ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

30-5
май - июнь
(һабанай - һөтай)
2020
№22 (908)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Батыр яуҙа һынала,**
йәки Алғы һыҙыҡтағы табиптарыбыҙ тураһында

6

**Балаларығыҙ менән...**
туған телдә аралашығыҙ!

8

**Әҙәби телде белеү кәрәк**

9

**Абруй, хөрмәтте...**
илле һумға алыштырҙы

12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! 1 июндән 10-на тиклем 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡҡа - 628 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Июнь башында Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелеүгә 25 йыл тула. Ошо тарихи сараға ниндәй өмөттәр бағлап барҙығыҙ, өмөттәрегеҙ аҡландымы, үҙегеҙҙе борсоған мәсьәләләрҙе күтәреп сыға алдығыҙмы һәм улар буйынса ҡарарҙар ҡабул ителеп, тормошҡа ашырылдымы?

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез ҡалаһы, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре:*** Уҙған быуаттың 90-сы йылдары аҙағында Башҡортостан ҡала-райондарында, күрше-тирә төбәктәрҙә барлыҡҡа килгән милли ойошмалар республика етәкселеге алдында башҡорт милләтен үҫтереү, әсә телен уҡытыуҙы яйға һалыу һәм башҡа бихисап мәсьәләләр күтәрҙе. Был проблемаларҙы төплө өйрәнеү маҡсатында етәкселек бөтә донъя башҡорттарын йыйып, кәңәшләшергә ҡарар итте. Беҙ предприятиеларға, ойошмаларға, ауылдарға сығып аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Бынан тыш, шефлыҡ ярҙамы күрһәтеү маҡсатында Мәләүез ҡалаһына һәм районына Ырымбур өлкәһенән беркеттеләр. Ул тарафҡа ла барып, ҡоролтайҙан һуң район һабантуйына саҡырып ҡайттыҡ. Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғас, өлкә ҡоролтайының ойоштороу йыйынын уҙғарыуҙа булышлыҡ итеүҙе лә үҙ өҫтөбөҙгә алдыҡ.

Башҡортостанда бындай донъя күләмендә форум үткәреү тәжрибәһе юҡ тип әйтерлек ине. Шуға күрә, унын нисек уҙырын бер кем дә күҙ алдына килтермәне. Ер шарының төрлө төбәктәренән килгән милләттәштәребеҙ халҡыбыҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәне. Беренсе Ҡоролтай шуныһы менән әһәмиәтле: унын эшендә ҡатнашҡан сит ил вәкилдәренең күбеһе Башҡортостанда тыуыу ғына түгел, ә тарихи Ватанына беренсе тапҡыр килгәйне. Кемдең ата-әсәһе, икенселәренең олатай-өләсәһе был төбәктән булған икәнен иҫкә төшөрҙө улар. Ҡытайҙа тыуып-үҫкән бер милләттәшебеҙҙең ҡытай акценты менән башҡортса һөйләшеп маташҡанын ишетергә тура килде. Ил етәкселегенән вәкил булып Федерация Советы Рәйесе Владимир Шумейконың килеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй ине. Форум эшенә күрше өлкә хакимиәттәре башлыҡтары сығыш яһауы ла мәртәбә өҫтәне. Германиянан килгән немец ғалимәһе Маргарет Эрсен-Раштың башҡортса телмәр тотоуы һоҡландырҙы һәм күптәрҙе уйланырға мәжбүр итте.

Минең өсөн иң иҫтә ҡалғаны - Америка тарихсыһы Алтон Стюарт Донелли менән осрашыу булды. Алыҫ илдә йәшәгән Бөйөк Ватан һуғышы ветеранының башҡорт халҡы тарихын ентекле өйрәнеүе хайран итте. Ҡыпсаҡтарҙың үткәнен төплө белгән Морат Аджи менән аҙ аралашыуым өсөн аҙ-аҡ үкенеп бөтә алманым. Һанай китһәң, иҫкә алырлыҡ ҡунаҡтар ҙа, ваҡиғалар ҙа етерлек булды Беренсе Ҡоролтайҙа. 31 майҙа көндөҙ "Аҡбуҙат" ипподромында булып үткән саралар ҙа, район-ҡала вәкилдәре йыйындары ла бөтә донъя форумының ни тиклем етди икәненә ишара ине. Киске аштан һуң театрҙарҙағы сараларҙа ҡатнашмаған делегаттар баш ҡаланың Ленин урамын тултырҙы. Ҡайҙа ҡараһаң да, уйын-көлкө, танышыуҙар, аралашыуҙар. Әйтерһең дә, оҙаҡ күрешмәй торған ағай-эне йыйылған.

Тәүге көн пленар ултырышта урындағы етәкселәр форум эшенә йүнәлеш биреп сығыш яһаны, ситтән килгәндәр ҡоролтай эшенә теләктәшлек белдереп, уларҙың телмәрен көүәтләне.

Икенсе көндә ун секцияға йыйылдыҡ, делегаттар, көн тәртибен үҙҙәре һайлап, секцияларға ла үҙаллы килде. Пленар ултырышта ҡыҫҡырып ултырыусылар булманы, сөнки секцияларҙа теләгәндәрҙең һәр кеменә һүҙ бирелде, ҡарар ҡабул иткәндә фекерҙәре иҫәпкә алынды.

Бөгөн, 25 йыл уҙғас, ул көндәрҙе һағынып иҫкә алыу менән, ҡоролтай эшенә лә бер аҙ йомғаҡ яһарға мөмкин. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына, урындағы ҡоролтайҙарға яңы көстәр килде. Яңы яҡшы тигәнде аңлатмай әле. Ҡайһы берҙәре урындарҙа быға тиклем эшләп килгән милли хәрәкәт ойошмалары эшен дауам итте, икенселәре "өҫтән" күрһәтмә көттө. Ошо осорҙа телебеҙгә дәүләт статусы бирелде. Уны тормошҡа ашырыу юлдары, мөмкинлектәре тик үҙебеҙҙән тора. Райондарҙа башҡортса гәзиттәр асылды, республикала бер нисә телевидение каналы һәм башҡалар булдырылды. Беҙ быларҙың бөтәһен дә еңел генә, көндәлек ваҡиға кеүек ҡабул итәбеҙ. Ә бит унын артында бына ошо ҡоролтайҙы йыйыуға килтергән, унын программаһын булдырған, көндәлек эшенә йүнәлеш биргән милли ойошмаларҙың ныҡышмалы тырышлығы, беренсе бөтә милләт форумында нигеҙ һалынған йүнәлештәре ята. Унан һуң уҙғарылған 2-се һәм башҡа ҡоролтайҙар иң беренсеһенең бик ваҡытлы ойошторолоуы һәм унда ҡаралған мәсьәләләрҙең һәм ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың дөрөҫлөгө хаҡында асыҡ һөйләй.

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

✓ *Тик йылдар үтә бара башҡорт милләтенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн булдырылған был ойошманың үҙ маҡсаттарынан ситләшеүе, уның исеме генә ҡалыуы бошондора барыбер.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Июнь башында Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелеүгә 25 йыл тула. Ошо тарихи сараға ниндәй өмөттәр бағлап барҙығыҙ, өмөттәрегеҙ аҡландымы, үҙегеҙҙе борсоған мәсьәләләрҙе күтәреп сыға алдығыҙмы һәм улар буйынса ҡарарҙар ҡабул ителеп, тормошҡа ашырылдымы?

(Башы 1-се биттә).

***Тәскирә ДАЯНОВА, Мәсетле районы, яҙыусы:*** Ул йылдарҙа мин тиктормаҫ хәбәрсе буларaҡ, район гәзитенә тел, милләт хаҡында әсенеүҙәремде яҙа торғайным. Сөнки тел бөтөү алдында, халҡы тулыһынса тик башҡорттарҙан ғына торған ауыл мәктәбендә педсоветтар, йыйылыштар русса алып барыла. Минең ошо проблемаларҙы киң даирғә сығарыуыма иғтибар итеүсе булғандыр, күрәһең. Сөнки көтмәгәндә генә Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп һайландым. Бындай иҫ киткес ҙур сарала беренсе тапҡыр ҡатнаштым. Был ҙур масштаблы йыйында барыһын да күреп, ҡарап бөтөү мөмкин түгел ине, шуға күргәндәремде генә һөйләмәксемен. Иң беренсе миңә Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов оҡшаны - саф башҡорт ҡиәфәтле олпат шәхес. Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә Туғанды күреү бер бәхет ине. Саф башҡорт телендә һөйләгән немец ғалимәһе Маргарет Эрсен-Раш иҫтә ҡалды.

Бөтөн донъя ҡоролтайын ойоштороу, халыҡтың милли-мәҙәни кимәлен үҫтереү, традицияларҙы терелтеп, халыҡҡа кире ҡайтарыу, башҡорт теле, уның йәмғиәттә тотҡан урыны, йәшәү кимәлен яҡшыртыу кеүек темалар күңелемә хуш килде. Башҡорт халҡының рухи тормошо, уны тергеҙеү перспективаһы секцияһы эшендә ҡатнаштым. Сығыш яһарға алдан яҙылмаһам да, һүҙ алып һөйләү форсаты тейҙе. Ауыл халҡын баҫып алып, милли сифаттарҙы, кешелекте харап итеп һәләкәткә илтә торған эскелек хаҡында һөйләнем. Бик эмоциональ килеп сыҡты. Аҙаҡтан байтаҡ ҡына кеше рәхмәт әйтеп китте.

Рәсми өлөштән һуң хайран шәп кимәлдә ойошторолған концерт ҡарау насип булды. Шулай шаулап-гөрләп ике көн үтте лә китте. Әммә мин күп нәмәнең үҙгәргәнен тойҙом: мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре артты; йыйылыштар туған телебеҙҙә үтә башланы; районда башҡорт ҡоролтайы үҙәге булдырылды; яңы мәктәптәр, яңы юлдар һалынды; ҙурыраҡ ауылдарға әкренләп булһа ла газ килеп етте.

Шулай эйфория хәлендә йәшәгәндә бер ваҡыт килеп бөтәһе лә емерелә башланы. Өҫәр-дүртәр ай эш хаҡы алмау, гөрләп эшләгән фермаларҙы тар-мар итергә керешеү, колхоздың инфраструктураһын юҡҡа сығарыу, колхоз малдарын бөтөрөү... Колхозсыларға эш хаҡы түләү онотолдо. Игенләтә, итләтә, фуражлата түләү бар ине, йәләп улар ҙа юҡҡа сыҡты. Ауылға ялмауыҙ эйәләшкән кеүек булды. Район етәксеһе булған йылғыр әҙәм барыһын да йотто тип һөйләүҙәр әле лә тынмай. Бөгөнгө хәл-тороштан сығып фекер йөрөткәндә, ауыл иҡтисади йәһәттән йөҙ йылға артҡа сигенде. Ул ғына ла түгел, бөттө - мин хәҙер кешеһеҙ тиерлек ауылда йәшәйем. Булғанды юҡҡа сығарыу ғына енел, кире ҡайтарыу мөмкин дә түгел. Традициялар, халыҡтың элекке гөрөф-ғәҙәттәре клуб саралары булып ҡына ҡалды. Берҙән-бер ынғай күренгән хәл - диндең бер аҙ кире ҡайтыуылыр. Балаларға исем аҙанлау, никах йолаларын үткәреү кеүек матур йолалар онотолмай, улар электән йәшерен рәүештә булһа ла һаҡлана килде. Ауыл ерендә бына шулай. Ҡалала маҡсатлы, тәүфиҡлы күркәм холоҡло йәштәр күбәйеүе хаҡында ишеп шатланам.

Әле килеп тыуған афәт тә кешелек донъяһын алға алып бармай. Дистанцион уҡыу - уҡыу түгел инде ул. Шулай уҡ күп кенә эштәрҙе лә йыраҡтан тороп башҡарыу эш түгел. Әҙәм балаһы яралғандан алып бергә ойошоп йәшәгән бит, шуның менән көслө булған. Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ла башҡорттарҙы шулай берләштергәйне, ойоштورғайны, әммә бөгөн был ойошманың берләштереү эшмәкәрлеген күрмәйем.

***Әминә РАҠАЕВА, уҡытыусы:*** Ул ваҡытта беҙ Нефтекама ҡалаһында йәшәй инек. Мин мәктәптә уҡытам. Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат булып һайланғас, был сараға ҙур өмөттәр бағлап килгәйнек. Өмөттәребеҙ аҡланды, тип әйтә алам, сөнки төньяҡ-көнбайыш башҡорттары мәсьәләһе төп урында булды. Ҡоролтайҙан һуң инде был төбәктә "Башҡортостан" гәзите нигеҙендә баҫтырылған башҡортса гәзит нәшер ителә башланы. Төбәк өсөн юғары белемле башҡорт теле белгестәрен әҙерләү маҡсатында Башҡорт дәүләт университетының филиалын асыу мәсьәләһе күтәрелгәйне - ул да тормошҡа ашты. Ошо Ҡоролтайҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен раҫлап асылған Нефтекама ҡала филармонияһы бөгөн дә уңышлы эшләй.

Әммә тормошҡа ашмай ҡалған мәсьәләләр ҙә булды. Мәҫәлән, төньяҡ-көнбайыш райондары мәктәптәренән йыйып, башҡорт балаларын уҡытыу өсөн Башҡорт гимназия-интернатын астырыу хыял ғына булып ҡалды. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын үҙ асылына ҡайтарыу бурысына хеҙмәт итер был идеяны яңынан күтәреү, уны мотлаҡ тормошҡа ашырыу кәрәк. Шулай уҡ бөгөн БДУның Нефтекама филиалы ябылыуы ла бик аяныслы. Ә бит ул да ана шул Беренсе Ҡоролтай ҡарарҙарына ярашлы асылғайны.

***Камил ИЛЕМБӘТОВ, Хәйбулла районы:*** Поезд менән Өфө вокзалына килеп төшкәс тә Ҡоролтай делегатына шундай мөнәсәбәт, мәртәбә булыуына хатта күңелем тулып, күҙҙәремә йәш төйөлдө: башҡортса музыка уйнай, килеп төшөү менән ҡаршы алып, тәғәйен ергә алып барып ҡуйҙылар. Ул ваҡытта башҡорттар өсөн ойошторолған бындай сараны күреү генә түгел, хыялланған да булманы. Сара үҙе лә эшлекле шарттарҙа үтте: милләтте борсоған һәм йылдар буйына йыйылып килгән проблемалар күтәрелде, һәр теләгән кеше үҙенең фекерен белдерҙе, мәсьәлә уртаға һалып һөйләшенде. Хәҙерге кеүек алдан яҙылыу ҙа, фекеренде тыңлап бөтмәй бүлдереүсе лә булманы. Ысын мәғәнәһендә был сара рух байрамы булды. Ҡоролтайҙан һуң унда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың күбеһе тормошҡа ашырылыуы ла күңелдә милләт, уның киләсәге өсөн ышаныс, дәрт уятты.

Бөгөн үткәндәргә боролоп ҡарап, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетын Нияз Мәжитов һәм Әхмәт Сөләймәнов етәкләгән ваҡыттар - иң уңышлы һәм иң һөҙөмтәле йылдар булған, тигән фекергә киләм. Тик йылдар үтә бара башҡорт милләтенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн булдырылған был ойошманың үҙ маҡсаттарынан ситләшеүе, уның исеме генә ҡалыуы бошондора барыбер. Әлбиттә, заман үҙгәрә килә маҡсаттар ҙа үҙгәрә, тип аҡларға булыр ине был хәлдә. Ләкин проблемаларыбыҙ шул уҡ ҡала, әйләнеп килә лә ҡабатлана. Мәҫәлән, туған телебеҙҙе уҡытыу мәсьәләһе берәй заман аҙағынаса хәл итәлерме икән? Ул мәсьәләне иғтибар үҙәгендә тотоу - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының үҙгәрмәй, ситкә ҡуймай торған бурысы инде ул. Ғөмүмән, был ойошма башҡорт милләтенең мәнфәғәтен ҡүҙәтеү өсөн булдырылған икән, тимәк, шул хәстәр хәстәрләнһен ине инде ул...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## ҮҘЕҢДЕ ГЕНӘ УЙЛАМА...

Һүҙемде бер риүәйәттән башлайым әле. Бер көтөү кәзәләрҙе кәртә эсендә бикләп тотҡандар. Уларҙың бер мохтажлығы ла юҡ, һыуы ла, үләне лә етерлек, ти. Әммә бында шундай бер хәүеф күҙәтелгән: билдәле бер ваҡытта көтөүлеккә кешеләр килеп, бер кәзәне тотоп салып алып китә торалар, ти. Башҡа кәзәләр ҡорбан булғанына ҡарап: "Уңманы был", - тип кенә уйлап ҡуялар ҙа, артабан бер ни булмағандай, ҡорбанлыҡҡа сиратта үҙҙәре лә торғанын аңламай, йәшәй бирәләр, ти...

Йәмғиәттә лә кешеләр менән төрлө хәлдәр булып тора: ауырыуҙар, бәләләр, бәхетһеҙ осраҡтар, үлем, ҡазаланыу һәм башҡалар. Был теҙмәне оҙон итеп һуҙырға була. Һәм әлеге көтөүлектәге кәзәләр кеүек, беҙ ҙә таныштарыбыҙ тарыған бәләне ишетеп, бер уфтанабыҙ ҙа, артабан йәшәй бирәбеҙ, был хәлдәрҙең сәбәбен, эҙемтәләрен белергә лә, аңларға ла, ярҙамға мохтажлыҡ бармы-юҡмы икәнен белешергә лә теләмәйбеҙ. Беҙ шулай хайуан инстинкты кимәлендә йәшәй бирәбеҙ. Ә бит кешегә хайуандарҙан айырмалы рәүештә аҡыл бирелгән. Шул аҡылы менән ул тормоштағы проблемалар сығанағын таба, өйрәнә, кире эҙемтәләрҙе иҫкәртә һәм мәсьәләне ыңғай хәл итә ала...

Ҡөрьән Кәримдә: "Мин кешеләр үҙҙәре үҙгәрмәй тороп, хәлдәрен үҙгәртмәйем", - тиелә. Ысынлап та, үҙебеҙҙе, эргә-тирәләге хәлдәргә ҡарашты, мөнәсәбәтте үҙгәртеп, беҙ үҙебеҙҙең йәшәйеште лә үҙгәртә алабыҙ. Бының өсөн үҙеңде генә түгел, башҡаларҙы ла йәшәйешеңдең бер өлөшө итеп ҡабул итеп, һәр ваҡыт әҙләнеүсе, үҫеүсе, вайымлы, абсолют хаҡлыҡты таныған кеше булып ҡала белергә кәрәк шул...

**Әлфиә АЛТЫНБАЕВА, врач-терапевт.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓26 майҙа Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәйҙә коронавирустың юғары нөктәһе үтелгән тип белдерҙе һәм 24 июндә Еңеү парадын үткәрергә әҙерләнә башларға бойороҡ бирҙе. Парад 1945 йылда еңеүселәрҙең тарихи парады уҙған көндә була, тип билдәләне ул. Ул шулай уҡ 26 июлдә, Хәрби-диңгеҙ флоты көнөндә, "Үлемһеҙ полк" маршын уҙғарырға тәҡдим итте. Ләкин Путин белгестәр кәңәше буйынса маршты күсерелеү ихтималлығын әйтте.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 29 июндән Берҙәм дәүләт имтиханын үткәрә башларға тәҡдим итте. "Коронавирус эпидемияһы хәүефенән тотороҡло кәмеүен иҫәпкә алып, тотош илдә Берҙәм дәүләт имтиханын уҙғарырға кәрәк тип иҫәпләйем. Ул 29 июндә башлана", - тине Путин мәғариф системаһындағы хәл тураһында видеоконференция режимында уҙғарылған кәңәшмә барышында. Мәктәптәр сығарылыш уҡыусыларына дистанцион режимда имтихандарға әҙерләнергә ярҙам итергә тейеш, тип билдәләне етәксе.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Халыҡ-ара Фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре ойошмалары советы етәкселегенә VI Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреүҙең яңы датаһын тәҡдим итте - 2021 йылдың 3-10 июле. Башҡортостан Республикаһында был сара бынан уҙырға тейеш ине, ләкин коронавирус пандемияһына бәйле 2021 йылға күсерелде.

✓Өфөлә Табиптар аллеяһын булдырыу күҙаллана, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иреҡмәндәр менән осрашыуҙа. "2020 йылдың яҙында һәм йәйендә булған хәл - быуаттарға, тиҫтә йылдарға торошло ваҡиға. Бындай хәүеф менән тәүге тапҡыр осраштыҡ, беҙгә уны мәңгеләштерергә кәрәк. Өфөлә коронавирусҡа ҡаршы көрәштә алғы һыҙыҡта эшләгән бөтә медиктар хөрмәтенә Табиптар аллеяһы барлыҡҡа килергә тейеш. Кешеләр бөтәһен дә хәтерләһен өсөн". Аллеяның урыны әлегә билдәләнмәгән.

✓29 майға Башҡортостанда 3105 кешелә COVID-19 диагнозы раҫланған. Тәүлек эсендә республикала 84 осраҡ теркәлгән. 2080 пациентта - сирҙен әүҙем формаһы, 1007-he һауыҡҡан. Уҙған тәүлектә республикала коронавирустан вафат булғандар һаны үҙгәрмәгән, улар - 18 кеше. Рәсәйҙә пандемия башланғандан алып 387 623 кешегә яңы коронавирус инфекцияһы диагнозы ҡуйылған. Һуңғы тәүлектә 8572 сирле асыҡланған. 159 257-he һауыҡҡан (тәүлегенә +8 264), 4374-е (тәүлегенә +232 осраҡ) вафат булған.

*✓ Йәш быуындың рухи, әхлаҡи, интеллектуаль һәм физик үҫеше өсөн ғаилә мөхите генә тарҙыр. Ә мәктәптәрҙә әле был йәһәттән эштәр гөрләй тип әйтеп булмай. Ҡыҫҡаһы, тәрбиә эше байтаҡтан бирле "бер аяғына аҡһай" беҙҙә.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# НЫҠЛЫ ҒАИЛӘ - ИЛ КҮРКЕ...

**Тәбиғәт үҙенекен итә: уның өсөн бер ниндәй сир ҙә, сикләүҙәр ҙә юҡ. Әле генә тәҙрә аша яҙҙы ҡаршылағайныҡ: тирә-йүн йәшеллеккә төрөндө, йорт яны газондарын һап-һары бәпкәләрҙәй бәпембә сәскәләре ҡапланы; алмағас, муйыл, сейә ағастары сәскәләрен ҡойоп, емешкә тумаланды. Йәй етә, йәй - бер нәмәгә ҡарамаҫтан!**

Бындай осорҙа шул бер үк хәбәр - сир хаҡында, ниһайәт, онотоп торғо килә. Ҡайһы берәүҙәр шулай эшләй ҙә: иркенләп йорт алды майҙандарында, урамда, Ҡариҙел ярындағы дамба буйлап йөрөй, хатта бәләкәй балаларын да етәкләп алып сыҡҡандар. Әйтерһең вирус та, вайым да юҡ донъяла. Их, ҡайҙа икән ул саҡтар! Һәм, әлбиттә, үҙҙәрендә лә, балаларында ла битлек тигән нәмә юҡ. Үҙҙәре - ярай, бәлки, иммунитеттары көслөләр, ә бына бала бит үҙ-үҙен бәлә-ҡазанан һаҡлай, яҡлай алмай, бының өсөн уның ата-әсәһе бар. Бала хәүефһеҙлеге өсөн тулыһынса улар яуаплы. Йәйге айҙың тәүге көнө лә бит шуны иҫкәртеп торғандай. Балаларҙы яҡлау һәм Бөтөн донъя ата-әсәләр көндәре **(1)** бер үк көндә ярышлап һәм дә ярашып килһә, ай аҙағындараҡ Халыҡ-ара атайҙар көнө лә **(21)** оҙаҡ көттөрмәйәсәк. Был тәбиғи ҙә, сөнки бала менән ата-әсә бер бөтөн - улар, кешелектең күпселеген иҫкә алғанда, шулай уҡ хайуандар донъяһында ла хатта - бер-береһенән башҡа йәшәй алмайҙар. Балаларҙың киләсәген хәстәрләү бөгөн Рәсәйҙең дәүләт сәйәсәтендә өҫтөнлөклө йүнәлеш алыуы ла бала менән ата-әсә берлеген көйләү, ғаилә нигеҙен нығытыу маҡсатын алға ҡуя. Был турала хатта илдең Төп законы - РФ Конституцияһына үҙгәрештәрҙә лә асыҡ әйтелә һәм айырым пункт итеп бирелә: "Дәүләт балаларҙың төрлө яҡлап рухи, әхлаҡи, интеллектуаль һәм физик үҫеше, уларҙа илһөйәрлек, гражданлыҡ тойғоһо һәм өлкәндәргә ихтирам тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙыра".

Был сәйәсәтте тормошҡа ашырыу сараларының иң мөһиме итеп, әлбиттә, ғаилә тәрбиәһе ҡарала, сөнки тап ғаилә һәм балалар Рәсәйҙең ышаныслы киләсәген тәьмин итәсәк көс. "Ниндәй генә дәүләттең дә уңышы - ныҡлы һәм берҙәм ғаилә... Әлегә мин президент булғанда, ата-әсә № 1 тигән нәмә булмаясаҡ, ә атай менән әсәй генә буласаҡ" - Рәсәй Президентының ошо һүҙҙәре күптән инде ҡанатлы фразаға әүерелде. Ысынлап та, В.В. Путиндың ғаилә һәм балаларҙы яҡлау йүнәлешендә һуңғы осорҙағы нығышмал һәм эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлеге, донъя иктисадына килеп тыуған ауыр хәлгә ҡарамаҫтан, быға тарихта булмағанса тиңһеҙ аҙымдарға барыуы ил етәксеһенең һүҙ менән эш берҙәмлеген дәлилләй.

Әммә маҡсатҡа йүнәлешле хәстәрлек акцияһы бер бөгөн генә башланманы.



Ҡарабаевтар ғаиләһе.

Хәтерләһәгеҙ, балалы ғаиләләргә социаль ярҙам сараларының быйылғы тәүге ҙур блогы ғинуарҙа В. Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтендә иғлан ителгәйне. Шул программаның дауамы булараҡ һәм коронавирус пандемияһы сәбәпле балалы ғаиләләргә матди ярҙам саралары буйынса 2, 8, 14 апрелдәге халыҡҡа мөрәжәғәттәр ҙә алынған курстың нығышмалы дауам ителеүе булды. Был саралар Рәсәйҙә демография мәсьәләһен бер ни тиклем көйләүгә булышлыҡ итмәй ҡалмаҫтыр, моғайын. Әле үк "ҡара иҫәп", тоҫмал менән дә шуны әйтергә була: баш ҡала урамдарында ғына ла бәләкәй һәм имсәк балалы ата-әсәләрҙең артыуы күҙгә салына. Ләкин бала табыу - ярты эш, бының менән генә эш бөтмәй. Рәсәйҙең киләсәге хаҡында һүҙ бара икән, ошо балаларҙы ашатыу, аҫрау тураһында ғына түгел, ә уларҙы лайыҡлы граждандар, илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү мәсьәләһе лә көн тәртибенә баҫа. Совет осоронан һуңғы йылдарҙа тәрбиә эшенең фәҡәт ғаилә яуаплылығына йөкмәтелеүе сер түгел. Эйе, бер кем дә инҡар итмәй, баланың буйын үҫтереү генә түгел, ә матур тәрбиә лә биреү һәр ғаиләнең туранан-тура изге бурысы.

Ләкин, бая әйтелгәнсә, йәш быуындың төрлө яҡлап: рухи, әхлаҡи, интеллектуаль һәм физик үҫеше өсөн ғаилә мөхите генә тарҙыр. Ә мәктәптәрҙә әле был йәһәттән эштәр гөрләй тип әйтеп булмай. Ҡыҫҡаһы, тәрбиә эше байтаҡтан бирле "бер аяғына аҡһай" беҙҙә. Тап шуның өсөн дә, бәлки, һушты китерерлек күренештәр әленән-әле баш ҡалҡыта торалыр ҙа. Һуңғы көндәрҙә генә Башҡортостанда булып, уның ямантыһы бөтөн донъяға тараҡҡан бер нисә хәл шул турала һөйләй. Хәйер, бөгөнгә заманда балаһы тыуғас та уны моҡсайға һалып, сүп-сар контейнерына сығарып ташлау ҙа, йылдар буйы ҡурҡытып, үҙ ҡыҙҙарын көсләп йәшәгән "атай кешенең" йыртҡыслығы ла, етем балаларҙы яҡлау, тәрбиәләү урынына осраҡлы "тәрбиәсе"нең уларҙы кәмһетеп, мыҫҡыллап, шунан ҡыҙыҡ табыуы һәм кәмит итеп интернетҡа видео төшөрөп һалыуы ла бәғзеләр тарафынан һәүетемсәрәк ҡабул ителеүе үҙе бер ҡот осорғос ғибрәттер. Бындай ғибрәттәр байтаҡтан бирле ике, өс ҡатлыға үҫеп бара түгелме? Ташландыҡ, ата-әсәһе иҫән-һау булып та тере етем ҡалған балалар һаны арта. Әлбиттә, дәүләт уларҙы ҡурсалауҙы ла тулыһынса тип әйтерлек үҙ өҫтөнә ала. "Ғаилә тәрбиәһенә өҫтөнлөктө тәьмин итеп, Рәсәй ҡарауһыҙ балаларға ҡарата ата-әсә бурысын ала",- тиелә Төп законға төҙәтмәләрҙең береһендә. Тимәк, илдә етемдәр приюттары, балалар йорттары киләсәктә лә йәшәйәсәк һәм, бәлки, артасаҡ та?

Дөрөҫ, ҡайһы бер белгестәр, психологтарҙың, бала фәҡәт ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш, тигәне бик тә хаҡ булған хәлдә лә, бының менән килешеүе ҡыйын булған осраҡтар ҙа күп. Уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алынған балаларҙың ғаилә мөхитенә генә хас йылылыҡ, наҙ һәм ихлас туғанлыҡ хистәрен татып йәшәү бәхете етемдәрҙең бик аҙҙарына ғына тәтейҙер ул. Икенсенән, яҙмыш упҡынына ташланған балаларға һәр саҡ иңен ҡуйып, ҡосаҡ йәйергә әҙер торған икенсе "ата-әсә" - дәүләт барҙа, выжданын юғалтҡан әҙәмдәр угата еңеллек менән сабыйҙарынан баш тартыуҙы ғәҙәт итеп алмаҫмы? Ә бит арабыҙҙа уллыҡҡа һәм ҡыҙ итеп етем балалар алып тәрбиәләүсе уңышлы ғаиләләр ҙә бар. Шулар араһында Баймаҡ районы Йәнһегет ауылынан Фәниә менән Азамат Ҡарабаевтар үҙҙәренең өс балаһы менән бергә ун етемде уллыҡҡа һәм ҡыҙ итеп алып, барлығы ун өс бала тәрбиәләй! Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына ғаилә башлығы Азамат уҙаман республикабыҙҙағы 27 өлгөлө атай иҫәбендә "Атайлыҡ батырлығы" наградаһына лайыҡ булды. Ниңә ошондай өлгөлө ғаиләләр тәжрибәһе өйрәнелмәй һәм таратылмай? Урындағы муниципаль органдар ана шундай уңған, фиҙаҡәр, сәләмәт ғаиләләрҙе эҙләп табырға һәм ҡарауһыҙ ҡалған балаларҙы алып тәрбиәләү эшенә дәртләндерергә тейештәр ул. Ә беҙ әлеге өлгөлө һәм батыр 27 атайҙы Халыҡ-ара атайҙар көнө **(21)** менән ихлас ҡотлайбыҙ!

Июнь, ғөмүмән, күренекле байрамдарға бай ай. Үҙенең боронғо атаһын аҡлап, һөтәйҙың тәүге көнө үк Бөтөн донъя һөт көнө **(1)** билдәләнә, тик бында ла - тотош проблема... Ысын һөт ауылда ғына инде ул, ә магазин һөтө ҡулланыусыға, әкиәттәгесә әйткәндә, "ут, һыу, еҙ торбалар аша" үтеп, таныһыҙ булып килеп етә: һөт тигәндең тәме лә, хатта еҫе лә ҡалмай...

Был айҙа 1 Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы асылған **(1 июнь 1995)**, шулай уҡ БР Халыҡтары ассамблеяһы ойошторолған **(3)** көндәр, Салауат Юлаев көндәре **(10-20)**, Рәсәй көнө **(12)**, Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө ҡалаһы көнө **(14)**, шулай уҡ Эколог көнө **(5)**, Рус теле, Пушкин көндәре **(6)**, Социаль хеҙмәткәр **(8)**, Халыҡ-ара архивтар, Халыҡ-ара дуҫтар **(9)** көндәре, Башҡорт матбуғаты һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, Бөтөн донъя ҡан доноры, Халыҡ-ара блогер **(14)** көндәре, Хәтер һәм ҡайғы көнө, Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн **(22 июнь 1941)**, Халыҡ-ара Олимпия көнө **(23)**, Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Еңеү параҙы үткәрелеүгә - 75 йыл **(24 июнь 1945)**, Уйлап табыусы һәм рационализатор, Йәштәр, Бөтөн донъя балыҡсылыҡ **(27)** көндәре билдәләнә.

**Һөтәйҙә тыуғандар :**

**5 -** БАССР-ҙың халыҡ артисы, 1972-1998 йылдарҙа - А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры, М.Кәрим исемендәге БР милли йәштәр театры артисы **Рәмилә Сәләмгәрәеваға - 70 йәш** (1950).

**12 -** йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ғәли Хәмзиндың тыуыуына - 70 йыл** (1950-2009).

**13 -** 1971-1984 йылдарҙа Баймаҡ районы хужалыҡ комбайнеры, механизатор, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР Дәүләт премияһы лауреаты **Риза Яхиндың тыуыуына - 85 йыл** (1935-1998).

**17 -** инженер-механик, математик, Рәсәй Фәндәр академияһының П.Ширшов исемендәге Океанды өйрәнеү институты директоры, физика-математика фәндәре докторы, профессор, РФ Дәүләт Думаһы, БР Дәүләт Йыйылышы депутаты, СССР Дәүләт премияһы лауреаты **Роберт Ниғмәтуллинға - 80 йәш** (1940).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмигә иң яҡшы һәйкәл проектын эшләүгә конкурс иғлан ителде. Һәйкәлде ҡуйыу урыны - Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана янындағы майҙан. Конкурсҡа ҡатнашыуға ғариза, проекттар, график материалдар һәм башҡа документтар Октябрь проспекты, 148 адресы буйынса Башҡортостан Республикаһының Рәссамдар союзына 2020 йылдың 30 октябренә тиклем ҡабул ителә. Тел: 8 (347) 284-42-47.

✓Башҡортостан властары 1 июндә йәнә юғары әҙерлек режимын йомшартырға ниәтләй. Был хаҡта ирекмәндәр менән онлайн-осрашыуҙа республика Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Беҙгә май аҙағына барып етергә, июнь башын һәйбәт үтергә һәм 1 июнгә беҙҙә йомшартыу булыр", - тине ул. Башҡортостанда йомшартыуҙың беренсе этабы 2020 йылдың 12 майынан индерелде. Республикала битлек менән иркенләп йөрөргә рөхсәт ителде. Балаларға һәм 65 йәштән өлкәндәргә өйҙән сығыу сикләнде.

✓Августан пенсия тупланмаларын берлектә финанслау программаһында ҡатнашыусыларҙың да пенсияһы 7,99 процентҡа арта. Хәҙер 32 мең пенсионерға ошондай пенсия түләнә. Әлеге ваҡытта тупланма пенсияның уртаса күләме айына 956 һум тәшкил итә. Берлектә финанслау программаһында ҡатнашыусыларға пенсия түләүенең уртаса күләме - 1705 һум. Пенсияның ике төрө лә ҡатын-ҡыҙҙарға - 55 йәштән, ир-егеттәргә 60 йәштән йә иһә ваҡытынан алда хаҡлы ялға сыҡҡан осраҡта иртәрәк тәғәйенләнә.

✓Башҡортостанда 19 майға медицина учреждениеларына 2 946 кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт иткән, улар араһында 1 290-ы - балалар. Былтыр ошо осорҙа 3 172 кешене, шул иҫәптән 1 160 баланы талпан тешләү теркәлгән. Роспотребнадзорҙың республика идаралығында белдереүҙәренсә, Гигиена һәм эпидемиология үҙәгендә, уның филиалдарында талпандарҙың энцефалит һәм боррелийҙар менән зарарланған булыуын тикшереү пункттары асылған.

✓Н.С. Михалковтың Кино һәм театр сәнғәте академияһы Рәсәй Мәҙәниәт министрлығы эгидаһы аҫтында "Йәшенмәк" исемле киноальманах төшөрә башлай. Кино Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында Башҡортостандың күркәм урындарында төшөрөлә. Фильмға башҡорт телен белгән 5-8 йәшлек малай кәрәк. Фото-видеоны, анкетаны һәм телефон номерын casting.film@inbox.ru почтаһына ебәрергә мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# КҮПЛӘП ЙЫЙЫЛМАҪҠА!

✓**Башҡортостанда Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу көнө 2 майҙан 6 июнгә күсерелде. Дата быйылға ғына үҙгәртелде.** Был турала яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына ҡаршы көрәш буйынса оператив штаб кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров иғлан итте. "Беҙ, халыҡтың зыяраттарҙы асыу үтенесенә таянып, йәнә дин әһелдәре менән кәңәшләштек", - тип аңлатты Башҡортостан етәксеһе. Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына автобустар маршрутын уйларға, мәрхүмдәрҙең туғандары барырҙан алда зыяраттарҙы тәртипкә килтерергә, сүп-сарҙан таҙартырға, ағастарҙы ҡырҡырға һәм Иҫкә алыу көнөнән һуң сүпте йыйыу өсөн коммуналь көстәрҙе иҫәпләргә ҡушты. Шулай уҡ Башҡортостан Башлығы зыяраттарҙа бер урында күп кеше йыйылмауҙы күҙәтеүҙе һораны.

✓**1 июлдән баш ҡалала "DeafМобиль" социаль такси хеҙмәте эшләй башлай.** Проект ишетеү һәләте буйынса инвалидлығы булған өс водителде һәм рус ым-ишара теленән диспетчер-тәржемәсене күҙ уңында тота, тип хәбәр итте Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы. Хеҙмәт командаһы Өфө ҡалаһында оҙатыусылары менән беренсе төркөм инвалидтарҙы һәм инвалид балаларҙы бушлай хеҙмәтләндерә. Социаль такси пассажирҙары уның хеҙмәттәре менән айына 5 тапҡыр бушлай файҙалана ала. DeafМобилдәрҙең көн һайын юл йөрөү сикле, шуға күрә социаль такси хеҙмәтләндереүенә алдан заявкалар биреү хуплана. Диспетчер хеҙмәтләндереүгә заявкаларҙы эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем ҡабул итә, ә "DeafМобиль" водителдәре заказдар буйынса көн һайын тәнәфесһеҙ һәм ял көнһөҙ иртәнге сәғәт 7-нән киске 10-ға хәтлем йөрөй. Әйткәндәй, Өфөлә 9 мендән ашыу беренсе төркөм инвалиды һәм инвалид бала йәшәй.

✓**Башҡортостан Мәғариф министрлығынан 1 сентябрҙән мәктәптәрҙә уҡыу барышының нисек ойоштороласағын хәбәр иттеләр.** "Мәғариф системаһы, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, белем биреүҙе ойоштороуҙың традицион формаһына әйләнеп ҡайтасаҡ. Уҡытыусы уҡыусылар менән туранан-тура, девайстар, гаджеттар һәм башҡа телекоммуникация саралырынан тыш, аралашырға тейеш. Беҙгә шәхес тәрбиәләү мөһим, туранан-тура бәйләнешһеҙ был мөмкин түгел. Беҙ 1 сентябрҙә бөтә балалар туған мәктәптәренә барыр һәм парта артына ултырыр тип ышанабыҙ", - тине республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин

✓**Пенсияны мотлаҡ страховкалау тураһындағы федераль законға индерелгән төҙәтмәгә ярашлы, 2020 йылдың 1 июленән балиғ булмаған балаларҙың опекуны йәки попечителе булып торған пенсионерҙар индексация менән страховка пенсияһын ала.** Башҡортостан буйынса Рәсәй Пенсия фонды бүлексәһе матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, үҙгәрештәр килешеү буйынса тыләүгә, шул иҫәптән тәрбиәгә бала алған ғаилә тураһында килешеү буйынса үҙ бурыстарын үтәгән һәм эшләп йөрөгән тип иҫәпләнгән опекундарға йәки попечителдәргә ҡағыла. Индексация ғаризаһыҙ тәртиптә башҡарыла. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, быйыл июлдән республикала тәрбиәгә бала алған 1336 пенсионер ата-әсә индексация менән пенсия ала. Йыл аҙағына тиклем ошо маҡсатҡа сығымдар 35 миллион һумдан артып китә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ДАУАХАНА ӘҘЕР

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров Өфө районындағы яңы йоғошло сирҙәр дауаханаһында төҙөлөш эштәренең тамамланыуын тикшерҙе. Билдәләнеүенсә, 1 июнгә тиклем объектта эшләтеп ебәреү-көйләү эштәрен тамамлау һәм махсуслаштырылған медицина ҡорамалын, шул иҫәптән үҙаллы елләтеүҙе сафҡа индерә башлау планлаштырыла.**



Инфекцион үҙәк - тиҙ төҙәлөүсе модуль конструкцияларҙан бер ҡатлы комплекс. Унда тәүлек әйләнәһенә эшләгән 100-гә яҡын, шул иҫәптән 62 бер урынлыҡ һәм 18 реанимация боксы бар. Хеҙмәткәрҙәр өсөн ятаҡ - айырым бинала. Санитар транспортты эшкәртеү майҙансығы, таҙартыу ҡоролмалары, резерв тукланыу сығанаҡтары, ҡаҙанлыҡ бүлмәһе, кислород станцияһы хәүефһеҙ аралыҡта урынлашҡан. Төп бина ярым түңәрәк рәүешендә төҙәлгән. Дауалау бүлексәләре бар. Бөтәһе лә таҙа һәм сирлеләр зонаһына бүленгән. "Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров алдыбыҙҙа ҡыҫҡа ваҡыт эсендә коронавирус йоҡторған ауырыуҙарҙы дауалау өсөн яңы инфекция үҙәге төҙөү бурысын ҡуйҙы. Уға ҡарап, дауахана республикала иң яҡшыһы исеменә дәғүә итә ала, тип әйтергә була. Төҙәлөштөң рекордлы сроктарын (55 көн) иҫәпкә алғанда, был - ысын уңыш. Хәҙер уның тулы хоҡуҡлы хужалары - табиптар", - тине Андрей Назаров һәм Башҡортостандағы төҙөлөш тәжрибәһе менән башҡа төбәктәрҙең дә ҡыҙыҡһына башлауын өҫтәне. Алдан хәбәр ителгәнсә, инфекцион үҙәкте төҙөү эшендә ҡулланылған материалдарҙың 80 процентташ ашыуы Башҡортостанда етештерелгән. Хәҙерге шарттарҙа был урындағы етештереүселәр өсөн һиҙелерлек ярҙам булды.

# ИМТИХАНДАР БУЛАСАҠ!

**Ағымдағы йылда имтихан кампанияһын үҙгарыуҙың яңы календарь планы төҙөлдө, тип хәбәр иттеләр БР Мәғариф министрлығынан. Быйылғы уҡыу йылында Берҙәм дәүләт имтиханының календарь планы 29 июндә башлана.**

29 һәм 30 июндә имтихандар һынау рәүешендә ойоштороло. Шунан һуң Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу этабы башлана. 3 июлдә географиянан, әҙәбиәттән һәм информатиканан Берҙәм дәүләт имтиханы була. 6 һәм 7 июль - рус теле, 10 июль - профилле математика, 13 июль - тарих һәм физика, 16 июль - йәмғиәтте өйрәнеү һәм химия, 20 июль - биология һәм сит телдәр (яҙма), 22 һәм 23 июль - сит телдәр (телдән). Резерв көндәр 24 июлгә (рус теленән һәм сит телдәрҙән тыш, бөтә фәндәр буйынса) һәм 25 июлгә (бөтә фәндәр буйынса) билдәләнгән. Етди сәбәптәр буйынса июлдә Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнаша алмағандар өсөн августа имтихан биреүҙең өҫтәмә осоро ҡаралған. 3 августа география, әҙәбиәт, информатика, биология, тарих һәм сит телдәр (телдән) буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы була. 5 августа - рус теле, 7 августа - йәмғиәтте өйрәнеү, химия, физика, профилле математика һәм сит телдәр (яҙма). 8 августа теҙмәлә бөтә фәндәрҙән имтихан биреү өсөн резерв көн билдәләнгән. Киләһе айҙы мәктәп уҡытыусыларына имтихан этабы алдынан ял итеү мөмкинлеге өсөн бүлеү күҙаллана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын юғары уҡыу йорттарына инергә йыйынған сығарылыш класс уҡыусылары ғына тапшыра.

# РЕСПУБЛИКА БУЙЛАП...

**1 июндә Башҡортостан Республикаһында Рус география йәмғиәте Башҡортостан бүлексәһенең бер юлы "Европа-Азия велоһуҡмағы" һәм "Урал барыҫы" туристик проекттары башлана.**

Проекттарҙа теләгән һәр кем ҡатнаша һәм Көньяҡ Уралдың ҡыҙыҡлы урындары буйлап сәйәхәткә сыға ала. "Урал барыҫы" - Көньяҡ Уралдың ете түбәһен берләштергән маршрут: Оло Ирәмәл, Рассыпная, Ялангас, Көмөрҙәк (Белорет районы), Ҡурташтау (Учалы районы), Ҡушай (Әбйәлил районы), Мәсем (Бөрйән районы). Рус география йәмғиәте сайтында әйтелгәнсә, программа туризмға һәм Көньяҡ Урал тауҙарына йәйәүле походтарға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға, экологик мәҙәниәт һәм хәүефһеҙлек мәсьәләләрендә аңлылыҡ тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.

Велоһуҡмаҡ проектын ойоштороусылар велотуристарға маршрутты һәм уны үтеүҙе, иҫтәлекле урындарҙы, туктальштарҙы, яҡындағы ауылдарҙы һүрәтләү йәйәһәтенән кәңәштәр бирергә вәғәҙәләй.

"Дуҫтар, бөтәбеҙ ҙә, айырыуса ҡалаларҙа, өйҙә ултырып ялҡтыҡ. Ҡайһы бер илдәрҙең сиктәрен ябыу шарттарында изоляция режимын йомшартыу беҙгә илдә, хатта республикала сәйәхәт итеү өсөн шәп мөмкинлек бирә. "Урал барыҫы" проекты Башҡортостанда тәүгә йыл ғына ойошторолмай. "Ете Түбә" проектының беренсе этабында хатта балалар (өлкәндәр менән) һәм оло йәштәгеләр ҙә ҡатнаша ала. "Европа-Азия велоһуҡмағы" проектының маршруты ла ҡатмарлығы буйынса айырылып тора: маршруттың Көнбайыш өлөшө - тигеҙерәк һәм ябай, Көнсығышы иһә тауҙар буйлап үтә. Ниндәй генә маршрут һайлаһағыҙ ҙа, сағыу тәьҫораттар вәғәҙә итә алам", - ти "Европа-Азия велоһуҡмағы" проекты етәксеһе Ксения Салазанова.

"Урал барыҫы", "Европа-Азия велоһуҡмағы" проекттарында ҡатнашыу өсөн www.velo102.ru сайтында теркәлергә кәрәк. Унда маршруттар хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт, шул иҫәптән карталар, gps-трекатр һәм башҡа мәғлүмәт бар. Проекттарҙа ҡатнашыу бушлай, ә иң әүҙемдәрҙе иҫтәлекле билдәләр көтә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафиндың ҡушыуы буйынса ташландыҡ, хужаһыҙ һәм тулы булмаған комплектлы транспорт сараларын асыҡлау эше дауам итә. Мәғлүм булыуынса, улар асыҡланғас, тәүҙә белдереү яҙыла, билдәле ваҡытта хужалары табылмаһа, техника һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән махсус урынға күсерелә. Совет районында ғына ошо көндәрҙә 23 транспорт сараһына белдереү ҡуйылған, 3 техниканы хужалары икенсе урынға күсергән. Сираттағы тикшереү 12 июндә үтәсәк.

✓Өфө ҡалаһы мэры Өлфәт Мостафин эш сәфәре менән баш ҡаланың төньяҡ өлөшөндә булып, генерал Шайморатов исемендәге урамда барған капиталь ремонт эштәре менән танышты. Артабан ул Беренсе Май урамындағы билдәле "восьмиэтажка"ларҙың торошон тикшерҙе. Әлеге ваҡытта хәҙер инде тарихи-мәҙәни мираҫ объектына әүерелгән был йорттарҙың түбәһен һәм архитектура элементтарын ремонтлауға әҙерлек эштәре алып барыла. Ремонт 1 ноябргә тамамланырға тейеш.

✓Дим районында яңы "Умка" балалар баҡсаһы төҙөлөшө тамамланды. Учреждение 260 балаға иҫәпләнгән. Балалар баҡсаһы территорияһында балалар өсөн уйын майҙансығы, прогулка зонаһы эшләнгән. Май һуңына тиклем Совет районында бер балалар баҡсаһы сафҡа индереләсәк. Ә инде йыл һуңында тағы ла дүрт: Дим һәм Октябрь районында икешәр учреждениены тапшырыу күҙаллана.

✓Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә миҙгел дауамында дөйөм оҙонлоғо 20,85 километр, дөйөм майҙаны 460 мең квадрат метр тәшкил иткән 22 участканы норматив торошҡа килтереү планлаштырылған. Бөгөн эштәр 16 объектта алып барыла. Барлыҡ объекттарҙа ла ремонт араһындағы ваҡытты арттырыу маҡсатында "Superpave" асфальт-бетон ҡатнашмаһын күләмле проектлау ысулы ҡулланыла.

✓Башҡортостан властары Өфөнөң "Родина" кинотеатрына хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы түләү һәм коммуналь сығымдарҙы ҡаплау өсөн субсидиялар бүлә. Документҡа ярашлы, кинотеатр 1 апрелдән 30 июнгә тиклем коммуналь хеҙмәттәргә сығымдарҙың 50 процентын һәм хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡының бер өлөшөн ҡаплай. Өфөнөң боронғо кинотеатры Рәсәй Федерацияһының мәҙәни мираҫы булып иҫәпләнә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Тормошобоҙға коронавирус тигән афәт килгәс, Өфө ҡала округы хакимиәте етәкселеге лә балаларын ҡурсыған атай-әсәй һымаҡ, ҡала халҡының мотлаҡ талаптарҙы нисек үтәүен шәхсән тикшерергә булды.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

**Өфө ҡала округы хакимиәтендәге видеоконференция форматындағы сираттағы оператив кәңәшмәлә мосолман донъяһындағы иң изге һәм оло байрам булған Ураҙа ғәйетенең быйыл ябыҡ мәсеттәрҙә үтеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып, ҡала мэры Өлфәт Мостафин халыҡтың мәсьәләне аңлап ҡабул итеүе өсөн рәхмәт белдерҙе. Хәйер, бер ай буйына үҙенең рухи ныҡлығын һынаусылар был хәлдә лә сираттағы һынау тип ҡабул иткәндәр. Сөнки һәр һынауҙың әжере лә була - яҡшыға өмөтләнәйек.**

# ФОНТАНДАР ҘА...

## йырлай башлар

Кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы сик буйы һаҡсыларына саҡырыу ташларға ла онотманы. Белеүебеҙсә, был көндә баш ҡалала ҙур саралар үтә, хатта йәшел фуражкалыларҙың ҡала фонтандарында (быйыл фонтандар июндә генә эшләй башлай) һыу инеүе лә ғәҙәти күренешкә әйләнеп бөткәйне инде. Ниндәйҙер кимәлдә был көндө урамда халыҡ башҡа ваҡыттағынан әҙерәк тә кеүек тойола ине - баш ҡалаға сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәр "хужа" була торғайны. Быйыл иһә уларға ла байрамдарын киң ҡолас алмай ғына үткәрергә тура килә - сик буйы һаҡсыларын, башҡаларға өлгө күрһәтеп, ҡурсаланыуҙа ултырырға саҡырҙы ҡала хакимиәте башлығы.



Шулай уҡ 6 июндән ҡала зыяраттары асыла һәм был осраҡта ла ажиотаж тыуҙырмаҫҡа кәрәклеген билдәләне Өлфәт Мансур улы, сөнки күмәкләп йөрөү һаман да тыйыла, ә зыяраттарға артабан да инеү мөмкин буласаҡ, транспорт маршруты ойоштороласаҡ. Әммә был осраҡта ла һаҡланыу саралары һәм ҡуйылған талаптарҙы үтәү мотлаҡ.

Ҡурсаланыу осоронда күп ойошмалар ситтән тороп эшләүгә күсһә лә, бындай алым менән эшләй алмаған учреждениелар ҙа бар. Шундайҙар иҫәбенә етем балалар өсөн тәғәйенләнгән учреждениелар инә. Ҡала хакимиәтенең опека һәм попечителлек буйынса идаралығының күҙәтеү эшмәкәрлеген һәм ведомство-ара бәйләнеште ойоштороу бүлеге етәксеһе Эльза Мөслимова эпидемиологик режим ваҡытында балалар йорттарының эше менән таныштырҙы. Баш ҡалала бөгөнгә етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн - 4, балиғ булмағандарҙы социаль хеҙмәтләндереү буйынса 2 ойошма бар. 20 апрелдән улар ябыҡ режимға күсерелгән, хеҙмәткәрҙәр сменалап 14-әр көн учреждениенан ситкә сыҡмай эшләй. Эшкә килеүсе смена коронавирусҡа анализ тапшырып, һөҙөмтәләр кире булған осраҡта ғына эшкә сыға. Көн һайын хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмәтлек, психологик торошо тикшерелә. Карантин ваҡытында был учреждениеларҙа тәрбиә-белем биреү эше өҙөлкһеҙ дауам иткән, планлаштырылған саралар ҙа һаҡланыу талаптарын тулыһынса үтәп үткәрелгән. Учреждениеға ситтәр йәки башҡа ойошма вәкилдәре индерелмәй, яңы килеүсе балалар булғанда, улар мотлаҡ ике аҙна ҡурсаланыу үтә, даими рәүештә дезинфекция саралары үткәрелә.

Өфөнөң халыҡ күпләп йөрөгән урындарының береһе, моғайын да, фонтандар ҡуйылған майҙандарҙыр. Быға тиклем улар майҙа уҡ эшләй башлаһа, быйыл бер айға һуңлап - 1 июндә генә асыласаҡ. Баш ҡаланың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөклəндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, йәйҙең беренсе көнөндә 21 фонтан эшләй башлаясаҡ. Шулай уҡ тиҙҙән "Имәндәр" (Дубки) скверында "Торнадар" төҫлө һәм йырлаусы фонтан да сафҡа индереләсәк. Өфөнөң тарихи үҙәгендә урынлашҡан "Ете ҡыҙ", Орджоникидзе майҙанындағы Беренсе Май, Салауат Юлаев майҙанындағы "Ҡурай" һәм Ленин майҙанындағы "Сәғәт" фонтандары йырлаусы фонтандар булараҡ та билдәле. Улар эргәһенә көн һайын меңләгән кеше йыйыла. Шуға ла халыҡ күп йөрөгән урындарҙағы фонтандар төнгө 12-гә тиклем эшләйәсәк. Ә инде именлекте полиция һәм ҡаланың Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре тәьмин итәсәк. Һәм, әлбиттә, улар эпидемия осорондағы һаҡланыу сараларының үтәлеүен дә күҙәтәсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТОНА...

**Башҡортостан мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлитбирҙин вуздарҙа ҡабул итеү кампанияларының нисек уҙғарыласағы хаҡында һөйләне.**

Ҡабул итеү кампанияһы берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре нигеҙендә үткәрелә, тип белдерҙе ул. Ғариза электрон документ формаһында ҡабул ителә. "Вуздың ҡабул итеү кампанияһының ҡасан эшен тамамлауы тураһында бик күп һорауҙар килә. Юғары уҡыу йортонда ҡабул итеү кампанияһының башланыу ваҡыты үҙгәрмәй: көндөҙгө бүлектә уҡыу өсөн 18-20 июнь. Уның тамамланыу ваҡыты берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыуҙың һуңғы һөҙөмтәләрен иғлан итеү датаһына бәйле", - тине Мәүлитбирҙин. Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләрен иғлан иткәндән һуң 23 көн үткәс, ҡабул итеү кампанияһының ваҡыты тамамлана, тип билдәләне чиновник. Юғары уҡыу йорттарына инергә теләгәндәр өсөн документтар пакетына COVID-19 булмауы хаҡында белешмә һалыу талап ителмәй.

Әйткәндәй, Башҡортостанда мәктәп тамамлаусыларҙың мәктәпкә хушлашыу кисәләренә йыйылыуы ихтимал, тип хәбәр итте республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин. "Сығарылыш кисәһе - уҡыусылар өсөн иң мөһим ваҡиға. Уларҙы мәктәпкә йыйылып, ғәҙәти форматта үткәрә алырбыҙ тип ышанабыҙ. Беҙҙә сығарылыш кисәләре 25 июлдән һуң, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы тамамланғас булырға тейеш", - тип билдәләне ведомство етәксеһе.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӘПӘҮЛӘҮ ТӨЙМӘҺЕНӘ...

## баҫылмаясаҡ әле

**Яңыраҡ ҡына социаль селтәрҙәрҙә коллегаларымдың береһенең сәхифәһендә шундай юлдар уҡығайным: "Әсәй, шундай итеп әйтеп ҡуяның, әйтерһең дә, мин яңы тыуған бала!" Биш йәшлек ҡыҙының шулай тиеүенә нимә тип тә яуап бирергә белмәгән әсә: "Абау", - тиеүҙән ары китмәй һәм: "Әсәйҙәрҙең балаларын артыҡ әпәүләүен туктата торған төймәһе ҡайҙа икән?" - тигән һорау күтәрә. Моғайын, ундай төймә юҡтыр - комментарийҙарҙа барыһы ла шундай фекер яҙа, сөнки һин нисә йәштә булыуыңа, хатта үҙең атай-әсәй булып, сәстәрең салланыуына ҡарамаҫтан, атай-әсәйең өсөн һәр саҡ бала булып ҡалаһың. Улар һине һәр саҡ күҙәтеп, хәстәрләп, тикшереп торасаҡ.**

Тормошобоҙға коронавирус тигән афәт килеп инеп, тиҙ генә сигенергә уйламағас, Өфө ҡала округы хакимиәте етәкселеге лә балаларын ҡурсыған атай-әсәй һымаҡ, ҡала халҡының мотлаҡ талаптарҙы нисек үтәүен шәхсән тикшерергә булды. Өфө ҡалаһы мэры Өлфәт Мостафиндың ҡушыуы буйынса, улар көн һайын йәмәғәт урындарында һәм транспортта граждандарҙың битлектә йөрөү һәм бирсәткә кейеү режимын тикшерә. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫарҙары Салауат Хөсәйенов, Алина Сәләймәнова, Илдар Юланов, Рөстәм Ғәзизов, Николай Фадеев рейдтарҙа ҡатнашты ла инде. Улар яһаған һығымта буйынса, граждандарҙың күпселеге ҡуйылған талаптарҙы үтәй, барыһы ла битлектәрҙә, бирсәткәһеҙ кешеләр ҙа берәм-һәрәм генә. Шул уҡ ваҡытта ҡағиҙәләрҙе формаль рәүештә генә үтәүселәр, йәғни битлектәрен сумкаларында йәки кеҫәләрендә йөрөтөүселәр ҙа бар. Улар штраф алмаҫ өсөн генә һаҡланыу сараларын ҡуллана ла, һуңынан тағы ла битлек, бирсәткәләрен сумкаларына йәки кеҫәләренә алып ҡуя. Ләкин йәмәғәт транспортында социаль дистанция һаҡлау мөмкин түгел, шуға күрә битлек һәм бирсәткә кейеү мотлаҡ һанала. Шулай уҡ парк-скверҙарҙа ла талаптарға күҙ йомоп ҡараусылар осрай. Шуға күрә рейдта ҡатнашыусылар халыҡ менән профилактик эш ына түгел, бер ыңғай уларҙы борсоған мәсьәләләр буйынса ла әңгәмә үткәрә.

Ҡала хакимиәте, хатта етәкселек тарафынан шәхсән рейдтар ойошторолоуын һәр кем үҙенсә аңлап, үҙенсә ҡабул итеүе мөмкин. Кемгәләр ул оҡшай, кемдәндер асыуын ҡабартыуы ихтимал. Әммә хаҡы граждандарҙың сәләмәтлеге һәм кеше ғүмерҙәре менән баһаланған талаптарҙы, ҡағиҙәләрҙе һәр кем аңлы рәүештә үтәмәй тороп, бындай әпәүләү төймәһе баҫылмаясаҡ әле...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бауыр

❖ Ярты балғалаҡ бәпембә тамыры онтағын көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда ҡайнап сыҡҡан йылымыс һыуға ҡушып эсергә кәрәк. Был дауа бауырҙың таҙартыу функцияһын яҡшыртыуға, организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыуға һәм ҡан тамырҙарын холестериндан таҙартыуға йүнәлтелгән. Шулай уҡ талаҡ эшмәкәрлеге яҡшыра, лимфа биҙҙәре шеше бөтә, ашҡаҙан аҫты биҙенең гормональ әүҙемлеге арта һәм инсулин тейешле күләмдә бүленә башлай, ашҡаҙандың секрет бүлеп сығарыуы арта.

❖ Бауыр шешеүҙән ябай йәбешкәк, русса "репешок обыкновенный" үләне яҡшы дауа. Был үҫемлек бауыр күҙәнәктәре эшмәкәрлеген яҡшырта, матдәләр алышыуын яйға һала, вирусҡа һәм микробтарға ҡаршы, ҡанды туктатыу һәм үт һыуын сығарыу сифаттарына эйә. Шуға күрә бауыр ауырыуҙарынан йәбешкәк үләнен ҡулланыу файҙалы. 1 ҡалаҡ ваҡланған йәбешкәк үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ҡайнап сыҡҡансы талғын утта тоторға. Бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә дүрт тапҡыр яртышар стакан эсергә.

## Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә ваҡ ҡырғыс аша үткәрелгән 50-шәр грамм кишер һәм сөгөлдәр, ваҡлап туралған кәбеҫтәне бутап, берәр ҡалаҡ май (постное масло) һәм бал ҡушырға. Был салатты иртәнге аштан 40 минут алда яҡшы сәйнәп, яй ғына ашарға кәрәк. 3-4 көндән ҡан баҫымы нормаллаша.

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда 100 грамм майлы эремсеккә берәр балғалаҡ дәрсен һәм бал ҡушып, иртәнсәк ашарға.

❖ Юғары ҡан баҫымынан 24 көн дауамында көн һайын 400 грамм алма ашарға кәрәк. Был баш ауыртыуын бөтөрә, йөрәк тапҡырындағы һыҙланыуҙарҙы баҫа, йоҡоно яҡшырта, артериаль ҡан баҫымы нормаға килә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Табиптарҙың сәстәре иртә ағарып, йәшләй көйө һәр төрлө йөрәк сирҙәренә һабышып китеүе йыш күҙәтелә. Оҙайлы әрме хеҙмәтем дәүерендә хирург халҡын хатта саперҙарға ла тиңләгәндәрен ишеткеләгәнем бар.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Бүлкәс эсенә төшөрөлгән боролмалы һабаҡ һәм сәскәләрҙе Силәбе өлкәһенең төрлө район башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәк-алъяпҡыстарында күрергә була. Түңәрәктәр, ярым оҙонса түңәрәк, сығынтылары булған үҙәктәш түңәрәктәрҙән торған стилләштерелгән үҫенсәлекле орнамент иһә, алыҫ көнсығышта ғына осрай (Ҡурған өлкәһе).

Көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ башҡорттарының тукыма биҙәү ғәҙәттәренә иғтибар итһәк, оҙон итәкле өсҡө кейем аҫтында ҡалған күлдәктәр ҡайылмаған, был малсылыҡ менән шөғөлләнеп йәшәгән бөтә ярым күскенсе халыҡтарға хас. Борон был башҡорт халҡына һәм көньяҡ сиктәге халыҡтарға ҡағылған. Ҡурған башҡорттарының күлдәк биҙәүҙә ҡулланған алымдары төрлөлөгө (ҡабартма, хисаплы ҡайыу, аппликация) был биҙәү алымдарын ҡатын-ҡыҙҙар еләне миҙгел кейеме рәтенә ҡалып, күлдәктәрҙе камзул йәки алъяпҡыс менән байрам сараларында ғына кейә һәм төп түй кейеме булараҡ аҙерләй башлаған мәлдә, сағыштырмаса һуңғараҡ осорҙа ҡулланыуҙары тураһында һөйләй.

Әлек ҡабартма ҡайыу йышыраҡ көнкүреш әйберҙәрен биҙәүҙә ҡулланылған. 1972 йылда Ҡурған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарына, Силәбе өлкәһенә яһалған экспедицияла ҡабартма ҡайыу һыҙаты менән һауыт-һаба таҫтамалдары, ашъяулыҡ һәм намаҙлыҡтар осраны. Орнаментта шул уҡ ҡайма, медальондар, күп япраҡлы оя биҙәктәр (многолепестковые розетки), өсәрле япраҡ, "суктар", киҫелешкән ике осло ырғаҡтар (интеграл) һәм был ерлеккә хас һүрәттәр ҡулланылған. Намаҙлыҡтарҙа орнамент арҡа тирәләй урынлашҡан һәм тукыманың өсҡө мөйөштәрен тултырған. Һауыт-һаба таҫтамалдары һәм ашъяулыҡтарҙың ситен киң орнамент биҙәгән, ҡайны берҙә уртала оя биҙәкле түңәрәк формаһындағы медальон урынлаштырылған.



*Сәй һауыт-һабаһына ябыу (Силәбе өлкәһе). РЭМ. XX б. башы.*



*Таҫтамалға сигелгән ҡайма орнаменты (Силәбе өлкәһе, Сосновка районы, Туктыбай ауылы). 1972*



*Намаҙлыҡ. Ҡабартма ҡайыу (Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы, Аҙналы ауылы). Автор фотоны 1972*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ…

**Илгә берәй дошман һөжүм итә ҡалһа, ғәҙәттә, уны иң беренсе булып хәрби ҡоралды көстәр ҡаршы ала. Ана шул көстөң һәр берәмеге - әҙәм балаһы. Үҙебеҙҙең балаларыбыҙ. Берәүҙәр уҡытыусы, икенселәр - инженер, төҙөүсе, ә кемдер ошо ҡатмарлы тормошобоҙҙа ябай эшсе вазифаһын атҡарған кеүек, хәрбиҙәрҙең төп һөнәре - илде һаҡлау. Потенциаль дошмандарҙан. Һәр саҡ янап тороуҙарына ҡарамаҫтан, тиҫтәләгән йылдар буйы ул дошмандың һөжүм итмәй тороуы ла тәбиғи (сөнки уның үҙенең дә йәшәгеһе килә). Бына шундай тыныс саҡтарҙа бәгзеләребеҙ, үкенескә, һәр саҡ илебеҙ һағында торған ғәскәри хеҙмәткәрҙәребеҙҙең кәрәген тоймай башлай. (Хатта уларҙы "әрәмтамаҡ" тип атауҙан да тартынмағандар табыла. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, дүрт-биш тиҫтә йыл үткәс, "үҙгәртеп ҡороу" заманында Совет Армияһына ҡарата йыш ҡына ана шундай сәнскеле һүҙҙәр ташланғанын ишеткеләй торғайным… ) Әммә, берәй уңайын тура килтереп, әлеге сит дошман баш ҡалҡыта башлай икән, хәрбиҙәребеҙҙе ҡабаттан иҫкә төшөрәбеҙ.**

# БАТЫР ЯУҘА ҺЫНАЛА,

## йәки Алғы һыҙыҡтағы табиптарыбыҙ тураһында



Бына шундай һөнәр эйәләренә мин табип халҡын да индерер инем. Тыныс тормошта матур кейенеп, ваҡытында эшкә барып-ҡайтып йөрөгән ошо категория кешеләрен тәү ҡарауҙа "еңел эштәге" һөнәр эйәһе тип һанай күптәр. Шат йөҙлө, юморға ла ярайһы ғына бай булған медицина вәкилдәренең һөнәре менән бәйләнешле эске тойғоларының үҙенә генә хас үҙенсәлеге бар ул, шулай ҙа, тимәксемен. Башта ябай ғына булып тойолған сирҙәр бәгзе ваҡыт шундай нык ҡатмарланып китеүсән. Бер үк сирҙе төрлө кешенең төрлөсә кисереүе хаҡында ла яҡшы белгән булараҡ, табип кеше ғәҙәттәге дарыуҙар, төрлө процедуралар тәғәйенләп яҙып биреүҙән тыш, һәр пациенты хаҡында нык ҡына борсолоусан. Бәлки шунлыҡтандыр ҙа, табиптарҙың, айырыуса хирургия вәкилдәренең, сәстәре иртә ағарып, йәшләй көйө һәр төрлө йөрәк сирҙәренә һабышып китеүе йыш күҙәтелә. Оҙайлы әрме хеҙмәтем дәүерендә хирург халҡын хатта саперҙарға ла тиңләгәндәрен ишеткеләгәнем бар. Кемделәр (Аллаһ ихтыяры менән) берәй операция ярҙамында ҡотҡарып алып ҡалһаң - һинән яҡшы кеше юҡ! Хатта яҡын-тирәгә ниндәйҙер кимәлдә шөһрәтең дә тиҙ генә таралып өлгөрә. Әммә… Хирургтың төп шөғөлө булғанғалыр, был - ғәҙәти күренеш булып ҡала, тиҙ арала онотола ла. Ә инде (Аллаһ һаҡлаһын!) пациентың үлә ҡалһа - һинең "аяҡ-ҡулыңды ботарлап", нәжескә болғап ташларға ла күп һорамайҙар... Бер коллегам һәр саҡ: "Операцияла торғанда башымдың бер ярты "нисек пациентымды үлтермәй алып ҡалырға", тип уйлаһа, икенсе яртыһы - "прокурор иптәштәрҙе" һәр саҡ иҫтә тота", - ти торғайны. Бер аҙ ғына тыныс тормоштағы табип хаҡында фекерләп алдым.

Хәрби академияла уҡыған саҡта "противочумный костюм" тип аталған комбинезон, маска, күҙлек, резина бейәләйҙәрҙән торған кейем комплектын "кейеп-сисеп", "Хәрби эпидемиология" фәне буйынса имтихандың практик өлөшөн биргән саҡтарҙы хәтерләйем. Ентекләп, дөрөҫ итеп кейенеп-сисенеүгә генә дүрт-биш минут ваҡыт үтә ине. Ана шул арала шыбыр тиргә батып: "Был костюмды бер ҡасан да кейергә тура килмәйәсәк бит, нишләп ыҙалаталар икән беҙҙе", - тип уйлай торғайным. Буласаҡ хәрби табип булараҡ, империалистик илдәрҙә - беҙҙең потенциаль дошмандарыбыҙҙың лабораторияларында чума, туляремия һымаҡ айырыуса хәүефле инфекцияларҙың бактериялары һаҡланғанлығы, уларҙан бактериологик ҡорал яһауҙары хаҡында белһәк тә, быңдай ҡоралды ҡулланыуға бер ҡасан да барып етмәҫтәр, тигән инаныуҙа булдыҡ...

Әммә көтмәгәндә "тажлы вирус" тип аталған инфекция бөтә кешелек донъяһын тетрәтте! Һис кемде аныҡ һәйепләп булмай торған бөгөнгө был ситуацияны хатта һуғыш мәленә тиңләргә булалыр, тип уйлайым. Ғәҙәти ҡорал ҡулланылған һәр һуғышта, башлыса, хирургтарға көс төшөүе хаҡында беләбеҙ. Әммә был юлы инфекционист, терапевт халҡы, тиҙ ярҙам табиптары һәм шәфҡәт туташтары (уларһыҙ бер ни ҙә атҡарып булмай), хатта кесе медперсонал ошо яуҙа иң алғы сафҡа баҫты. Әлеге "противочумный костюм"дың тағы иҫләйем. Шуны кейеп, бер нисә минут эсендә генә "бышлыға-бышлыға" имтихан биргән мәлдәрҙә, "Бындай кейемдә сәғәттәр буйы нисек эшләмәк кәрәк", тигән уйҙар ҙа башҡа килә ине. Тере кеше булараҡ, тәбиғи хәжәтенә лә йөрөргә кәрәк бит... Әле бөгөн барыбыҙ ҙа телетапшырыуҙарҙа ғына күреүебеҙсә, коллегаларым тап бына шул ауырлыҡты "уҡытыусы билдәһе" өсөн түгел, ә ысынлап та үлемесле инфекциянан башҡаларҙың (шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең дә) ғүмерен һаҡлап алып ҡалыу өсөн көрәшә. Эш сменаһы тамам булғансы комбинезон, битлектәрен һалмайынса, тирләп-бешеп эшләгән бәгзе табиптарыбыҙ, шәфҡәт туташтарыбыҙ хатта памперс кейеп йөрөргә мәжбүр, тип тә әйтәләр (Малышеваның телетапшырыуынан)...

Илдә ошо ҡурҡыныс сир тарала башлау менән үк, аҡ халатлы коллегаларым һис ни уйлап тормай, йәнен-тәнен аямай, хәрби тел менән әйткәндә, "передовой"ға - алғы сафҡа ынтылды. Әле булһа ниндәйҙер берәй һөҙөмтәле дауалау сараһы булмаған, яҡшылап асыҡланмаған сиргә үҙҙәренең күкрәктәрен ҡаршы ҡуйып, аяуһыҙ көрәш алып бара улар. Үкенескә, медиктарыбыҙға төшкән бар ауырлыҡ "костюм" мәшәҡәтендә генә түгел шул. Рәсәй күләмендә инде бер нисә тиҫтәләгән табип та (айырыуса Дағстан республикаһында) ошо сирҙән һәләк булды бит! Хөкүмәтебеҙҙең, әлхәмдүлиллаһ, бына ошо батырҙарыбыҙҙың эшенә битараф ҡалмай, аҡсалата булһа ла уларҙы дәртләндереү ысулдары уйлап сығарыуы ҡыуаныслы. Әммә кеше ғүмерен аҡса ярҙамында ғына алып ҡалып булмай... Бына шул коллегаларымды, ысын мәғәнәһендә, һуғыш яланындағы яугирҙарға ла тиңләр инем.

Ошо хаҡта уйлана башлаһам һәр саҡ бер һорау килеп тыуа: ниндәй үлем ҡурҡынысыраҡ: пуля, йә снаряд ярсығы тейгән йәрәхәттәнме, әллә инфекциянанмы? Әлбиттә, үлем - һәр саҡ ҡурҡыныс. Бер кем хаҡында ла: "Был кеше нык үлде, ә быныһы - әҙерәк кенә үлде", - тип әйтеп булмай. Был донъяға килгәс, һәммә кешенең йәшәгеһе килә. Барыһының да яҡындары, туғандары, бала-сағалары бар. Шуға ла, беҙҙең ғүмерҙәрҙе һаҡлауға үҙ өлөшөн индергән ошо тәр профессия вәкилдәренә - аҡ халатлыларға рәхмәтле булайыҡ, тип кенә әйтмәксе инем...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

5

# Туған телем!

**30-5 май-июнь**
(һабанай - һөтай)
2020 йыл
**№22** (908)

ӘЙТӘГҮР!

## Өйҙә һөйләшһәң...

**Балағыҙҙы туған телгә ылыҡтырыу ниндәй ауырлыҡтар тыуҙырҙы?**

***Руслан БИККИНИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Ата-әсәләр комитеты ағзаһы:*** Әлхәмдулилләһ, ике ҡыҙым бар, өлкәненә - 15, кесеһенә 5 йәш. Икеһе лә Өфөлә тыуған балалар. "Туған телгә ылыҡтырыу" тигән һорау менән өсөн бик дөрөҫ түгелдер, бәлки, сөнки балаларымдың икеһенең дә телдәре башҡортса асылды һәм 3 йәшкә, баҡсаға йөрөй башлағанға тиклем башҡа телдәрҙе белмәнеләр ҙә тип әйтергә була. Баҡсаға бер-ике ай йөрөткәс, балалар яйлап рус теленә күсә башланы, тик өйҙә үҙ-ара һөйләшеү туған телдә генә барҙы.

Туған телдә өйҙән тыш иркенләп аралашмауҙың бер нисә сәбәбе барҙыр тип уйлайым. Беренсе сәбәп: башҡорт булған башҡа балаларҙың тик русса һөйләшеп йөрөгәндәрен күреү (балалар шулай аралашырға тейеш икән, тип уйлайҙармы, "башҡорт теле тик өлкәндәр теле" тигән ҡалып барлыҡҡа киләме икән баштарында?) Икенсе сәбәп: әлеге лә баяғы яҡшы сифатлы башҡортса йәнһүрәттәр булмау. Был турала күп әйтелде, шуға аныҡлап тормайым. Өсөнсө сәбәп: белем биреү учреждениеларында туған телдә аралашыу кимәле кәмеүе. Ҡыҙҙарымдың йәш аралары ҙур булғанға сағыштырып әйтә алам. Бер үк баҡсаға 10 йыл үтеп ҡабат килгәс, айырма һиҙелә (был һүҙҙәрҙе мин үҙебеҙҙең баҡсабыҙҙың етәкселеген һәм хеҙмәткәрҙәрен тәнҡитләп әйтмәйем, киреһенсә, улар заман афәттәре менән ҡулдарынан килгәнсә көрәшә). Минеңсә, ошо төп өс сәбәп туған телгә ылыҡтырыуға ныҡ ҡамасаулай, аяҡ сала.

***Зөһрә БУРАҠАЕВА, яҙыусы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Башҡортостанда, республикабыҙҙың баш ҡалаһында йәшәүсе милләттәштәр өсөн баланы башҡорт теленә ылыҡтырыу бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырмай, тип уйлайым. Был тик атай-әсәй, олатай-өләсәй яғынан күҙәтелгән психологик ҡаршылыҡ. Бала бит ул бар нәмәне һеңдереп, өйрәнеп кенә бара. Ә атай-әсәйҙәр, ғәҙәттә, тап әсәйҙәр, уны үҙҙәре үк туған тел тигән бик мөһим рухи асылдан, бик ҙур рухи байлыҡтан мәхрүм итә. Үҙем ҡалала тыуҙым, рус телле мөхиттә үҫтем, әле лә мине уратҡан мөхит күбеһенсә рус телле. Әммә башҡорт гимназия-мәктәптәре, балалар баҡсаһында башҡорт төркөмдәре була тороп, башҡорт китаптары, гәзит-журналдары, үҙебеҙҙең телевидение һәм радио каналдары, башҡорт интернеты булғанда, театрҙарыбыҙ, филармония, бик күп төрлө мәҙәни саралар үткән баш ҡалала үҙ-үҙеңә ҡаршылыҡтар уйлап сығарыуҙы мин бары тик психологик комплексҡа ғына ҡайтарып ҡалдырам. Эйе, ҡайһы бер милләттәштәр русса һөйләшеүҙе тиҙ генә ҡала кешеһенә әйләнеп китеүҙең рәхәт юлы тип уйлай. Туған телдә балаң менән урамда һөйләшеүҙе ауылса ҡылыҡ тип ҡабул итә, үҙе үк тартына. Бары тик шул ғына. Ҡаршылыҡ юҡ - хәҙер балалар өсөн дә, үҫмерҙәр өсөн дә, йәштәр өсөн дә, ололар өсөн Өфөлә башҡортса мөхит тыуҙырылған. Теләк кенә булһын.

***Рита АҠБУЛАТОВА, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды хеҙмәткәре:*** Беҙҙең ғаиләлә башҡорт теле бөтәбеҙ өсөн дә туған тел булып тора. Әммә ирем 2 йәшенән алып 21 йәшенә тиклем Башҡортостандан ситтә йәшәгән, аралашыу күбеһенсә русса булған мөхиттә тәрбиәләнгән, уҡыған, хәрби хеҙмәттә булған. Егерме йылға яҡын башҡорт телен белеү кимәле "ишетәм - аңлайым - аралаша алмайым" дәрәжәһенән ары китмәгән. Башҡортостанға әйләнеп ҡайтҡас, телде апаруҡ яҡшы үҙләштерҙе ул, әммә иркен аралашҡанда барыбер рус теленә өҫтөнлөк бирә. Туған телдә һөйләшеүҙең кәрәклеге тураһында артыҡ бошонмай. Шуға күрә беҙҙең балалар билингваль мөхиттә үҫә, тиһәм дә хата булмаҫ: әсәләре башҡортса һөйләшә, аталары - русса. Бындай шарттарҙа баланан башҡортса ғына һөйләшеүҙе талап итеү ҡыйын. Шуға өҫтәп, интернет ресурстарының, телетапшырыуҙарҙың, мәктәптең, балалар баҡсаһының, дуҫтарының йоғонтоһон да иҫәпкә алмай булмай. Эйе, улдарыбыҙ башҡортса белә, әммә аралашыу барышында уға өҫтөнлөк бирмәй. Әлбиттә, был проблема өҫтөндә ата-әсәнең икеһе лә эшләргә тейеш. Айырыуса малайҙарҙа милли рух тәрбиәләүҙә башҡаса булыуы мөмкин түгел.

Ата-әсәһе көнө буйы эштә булған балалар буш ваҡыттарында нимә эшләй? Исем өсөн генә бер 15-20 минут велосипедта йөрөп инәләр, яҙын-йәйен баҡсала ваҡ-төйәк эш менән ярҙам итәләр ҙә тиҙ генә виртуаль донъяларына сумырға ашығалар. Беҙҙең киҫәтеүҙәр, был шөғөлдәренең зыянлы булыуы тураһында мораль уҡыуҙар әллә ни һөҙөмтә бирмәй, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шуға ҡаршылыҡтарҙың ыңғай яҡтарын файҙаланырға тырышабыҙ: балалар өсөн башҡортса мобиль ҡушымталарҙың ниндәйҙәре бар - бөтәһен дә телефон-планшеттарына ҡуйҙыҡ, башҡортса йәнһүрәт, фильмдар ҡарарға яратабыҙ. Йоҡлар алдынан әкиәт һөйләйбеҙ, үҙҙәренән һөйләтәбеҙ. Оло улыбыҙ (12 йәш) башҡортса белергә кәрәклеген, әсә телендә аралашыу йән өсөн дә, тән сәләмәтлеге өсөн дә файҙалы булыуын аңлай. Бәләкәсе (6 йәш) ҡаршылашып маташа, әммә беҙ был юҫыҡта әүҙем эшләйбеҙ. Ыңғай һөҙөмтәләр көттөрмәҫ, тип ышанам.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ВӘҒӘҘӘ - ИМАН



**Борон-борон заманда һүҙ шул тиклем ҙур ҡөҙрәткә һәм көскә эйә булған. Һүҙ менән ант иткәндәр, тоғролоҡтарын гарантиялағандар, намыҫлы булыуҙарын раҫлағандар, кешеләр араһында ғына түгел, илдәр араһында ла килешеү төҙөгәндәр.**

Бирелгән һүҙҙе тотоу, вәғәҙә иткәнгә хыянат итмәү кешелек аңының, выжданының иң юғары нөктәһе булған. Сөнки бирелгән һүҙҙе, антты юғары көстәр, Аллаһы Тәғәлә, йыһан ишетеп тора, уға шаһитлыҡ ҡыла һәм үтәмәгән хәлдә йәки һүҙендә тотмағанда уның язаһы ла була, тип ышанғандар. Әйтелгән һүҙ, вәғәҙә, ант менән кешеләр нимәләргәлер бәйләнгәндәр, уны боҙорға ихтыярҙары етмәгән генә түгел, ә шул һүҙҙәренә тоғро ҡалып, ғүмерҙәрен дә биргәндәр. Һәм бөгөнгө беҙгә билдәле булған бөтә диндәрҙә һәм изге китаптарҙа ла һүҙ хаҡының юғары булыуы хаҡында һөйләнә. "Вәғәҙә биргәнһең икән - үтә, үтәй алмаҫтайҙы һөйләмә", тигән уртаҡ фекер үтә уларҙың барыһында ла.

Ҡолдар заманында ҡол хужаһына тоғро булырға һүҙ биргән һәм хатта ошо көсләп бирелгән антын да боҙа алмаған. Яу алдынан һуғышсылар һуңғы тамсы ҡанына тиклем алышырға ант иткән (ошонан хәрби ант килеп сыҡҡан) һәм шулай иткән дә. Сыңғыҙхан дәүерендә ялсы ла, яугир ҙа, дуҫ та, туғанлыҡ та һүҙ вәғәҙәһе менән шул тиклем көслө нығытылған, уны боҙғандар шундуҡ үлем язаһына тарттырылған. Һәм тарихтың ниндәй генә өлөшөн алып ҡараһаң да, әйткән һүҙен тотмаған батшалар, хандар, изгеләрҙең аяныс яҙмыштары һүрәтләнә. Уларҙы халыҡ әллә нисә быуаттар аша ла һүҙенә хыянат иткән кеше итеп хәтерләй. Был нимәнән килә?

Вәғәҙә итеп әйтелгән һүҙҙә көслө энергетика туплана, был энергетика һүҙҙе биреүсегә лә, уны алыусыларға ла ныҡ тәьҫир итә, хатта шул кешеләрҙе үҙ ауалаһында тота. Әйтелгәндәр үтәлмәһә йәки боҙолһа, был энергетика (көс) йыһанға таралырға, юҡҡа сығырға мәжбүр була. Тик ул үҙе генә осоп китмәй, ә вәғәҙә биреүсенең, шул вәғәҙә менән бәйле булыусыларҙың энергетикаһын да һурып алып китә. Был "алып китеү" эсенә уңыш, сәләмәтлек, рухи көс, өмөт, йәшәүгә булған һөйөү һымаҡ тереклек итеүгә ынтылыш биреүсе йыйылмалар булырға мөмкин. Ошондай рухи ҡиммәттәрҙән мәхрүм ҡалған кеше мотлаҡ ниндәйҙер уңышһыҙлыҡтарға осраған, сирләгән, бәләгә тарыған. Сөнки уның тормош ауырлыҡтарына, ҡаршылыҡтарына ҡаршы иммунитеты юғалған. Быны ошоно аңлаған халыҡ борон-борондан. Бәлки, аңлаған ғына түгел, ә ул уларҙың аңына һалынған да булған.

"Вәғәҙә - иман" тибеҙ беҙ. Йәғни, вәғәҙә һүҙе иман кеүек ныҡ һәм һынмаҫлыҡ. Ысынлап шулаймы? Үҙебеҙгә генә лә күпме һүҙ бирәбеҙ беҙ? Нимәнелер ваҡытында үтәргә, нимәләрҙәндер сикләнергә, телде тыйырға, серҙе һаҡларға һәм башҡалар. Ә башҡаларға бирелгән вәғәҙәләр? Көтөргә, тоғро булырға, мәңге ташламаҫҡа, ярҙам итергә, ваҡытында килергә, һүҙ йөрөтмәҫкә, алдамаҫҡа, урламаҫҡа, ҡыйырһытмаҫҡа... Беҙ хатта вәғәҙә һүҙҙәрен үҙебеҙҙе йәки башҡаларҙы тынысландырыу, хәлде киҫектереп тороу йә күрәләтә алдау итеп тә ҡулланабыҙ. Шулай уҡ балаларға ла уңлы-һуллы үтәлмәҫ вәғәҙәләр ташлайбыҙ: һатып алырмын, алып барырмын, күрһәтермен, шулайтырмын, былайтырмын. Әйтелгәндәрҙең ундан бер өлөшө үтәлһә, ярар ҙа. Ил башлыҡтарының, етәкселәрҙең, депутаттарҙың, халыҡ менән идара итеүсе башҡа структураларҙың үтәлмәҫ вәғәҙәләре - аҙмы? Һүҙ ҡиммәте юғалғандан алып инде нисә быуаттар кешеләр мөмкинлектәренән күберәкте вәғәҙә итәләр ҙә, мөмкин булғанын да үтәмәйҙәр. Ә тәбиғәтте, йыһанды, яҙмышты һәм бөтөн булған көстәрҙе үҙеңә ҡарата ыңғайға йүнәлтеп ебәреү өсөн бары һүҙҙе елгә осормау кәрәк икән. Үтәй алмаҫтайҙы һөйләмә һәм вәғәҙә итмә, әйткәнһең икән - үтә. Һүҙҙең (анттың, вәғәҙәнең) сакраль көсө шунда. Тел һәм һөйләшеү ҡөҙрәте кешегә үҙе кеүектәр менән генә аралаша алыу өсөн бирелмәгән. Был йыһанға үҙең тураһында мәғлүмәт ебәреү инеше лә ул. Һин әйтелгән һүҙҙәрең, һөйләгәндәрең менән үҙең тураһында мәғлүмәт бирәһең. Был мәғлүмәт нисек була (ыңғаймы-киреме, яуызмы-изгеме), шундай яуап килә лә.

"Һүҙҙе контролдә тотоу - ул бөтөн булмышыңды, аңыңды, хистәреңде, тәнеңде тәртиптә тотоу" тип яҙып ҡалдырған боронғо фәлсәфәселәрҙең береһе Фалес та. Һәм был тәртипкә өйрәнеү артыҡ ауыр ҙа эш түгел. Иң башта үҙең менән тәжрибә үткәреп ҡара. Мәҫәлән, иртәгәнән йүгерә башлайым, тигәнһең икән - йүгер. Ғәйбәт һөйләмәйем, тигәнһең икән - һөйләмә. Был аҙнала бер ялған һүҙ ҙә әйтмәйем, тигәнһең икән - әйтмә. Ошондай вәғәҙәләрҙе үтәү ҙә үҙеңә рухи һауығыу алып киләсәк. Балаларыңа күптән әйтеп килгәнеңде тот та башҡар - уларҙың хөрмәтен тояһың. Кемдәндер нимәлер бурысҡа алып торғанһың һәм ҡайтарыу ваҡытына өлгөрмәйһең икән, һөйләшеп кисектер, әммә алдама йәки яуапһыҙ ҡалдырма. Ҡағиҙә бер генә: хәлеңдән килмәҫтәйҙе әйтмә, әйтһәң - үтә. Ул ваҡытта һиңә ихтирам да бермә-бер артыр, абруйың үҫер, намыҫың таҙарыр. Һинең хаҡта "Ул һүҙенә тоғро кеше", тиерҙәр. Һәм быны йыһан да ишетер. Мотлаҡ ишетер.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

✓ *Беҙҙең Киров районының 3-сө гимназияһында башҡорт телен дәрес булараҡ уҡытыуҙан тыш, фольклор түңәрәктәре лә ойошторолған. Шунлыҡтан, башҡорт телен аҙнаһына 4 сәғәт уҡытып та була.*



*ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА*

**"Балаларҙы үҙ туған теленә нисек ылыҡтырырға, өйрәтергә, телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерергә һәм шул нигеҙҙә телмәр үҫтерергә?" тигән һорау әлеге көндә башҡорт теле уҡытыусыларын ғына түгел, ғөмүмән, үҙ теле өсөн борсолған бар кешене лә борсойҙор. Һуңғы йылдарҙа беҙ ни эшләптер тел мәсьәләһе ҡағылған проблемаларҙа йыш ҡына кемделер ғәйепләргә, кемгәләр үпкәләргә, кемгәләр асыуланырға тырышабыҙ кеүек. Шул уҡ ваҡытта туған тел алдында һәр беребеҙ үҙ бурысыбыҙҙы белеп тә бөтмәйбеҙ, хатта белергә лә теләмәйбеҙ. Ә кемде ғәйепләргә һуң? Өйҙә балаларыбыҙ менән аралашҡанда бер кем дә беҙҙең ауыҙыбыҙҙы бәйләп ултыртып ҡуймай ҙа инде.**

# БАЛАЛАРЫҒЫҘ МЕНӘН...

## туған телдә аралашығыҙ!



"Алма ағасынан алыҫ төшмәй" - ти йор телле халҡым мәҡәле. Ата-әсәһе өйҙә матур итеп үҙ туған телендә һөйләшһә, эргәлә йөрөгән бала ла телмәргә, хатта үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡушылмай ҡалмай бит. Телгә ҡарата ҡараш та, ихтирам, иғтибар, һөйөү ҙә мотлаҡ ғаиләнән, олатай-өләсәйҙән, атай-әсәйҙән башлана. Аллаға шөкөр, үҙем ике малайға әсәймен. Икеһенең дә исемен алдан уйлап ҡуйҙыҡ: Арыҫлан менән Алисхан. Өйҙә улдарым менән тик башҡорт телендә генә аралашам. Йәйге каникулды Мәсетле районының йәмле Әй буйында урынлашҡан Яңы Мишәр ауылында үткәрәбеҙ. Өләсәйебеҙ ҙә ейәндәре һәм бер ейәнсәре менән тик башҡорт телендә генә һөйләшә. Оло улым спорт менән дуҫ, уҡыуҙа ла һынатмай, әлеге көндә программистҡа уҡый. Өфө ҡалаһы Ленин районының 2-се һанлы башҡорт лицейын тамамланы. Өс йыл рәттән "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһендә республика кимәлендә сыҡтылыр, улым "Тағы ла ике..." командаһының лидеры булды. Шулай уҡ башҡорт теленән олимпиадаларҙа, төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар алды, 9-сы класты тамамлағанда ТДИ-ны башҡорт теленән дә тапшырҙы. Уның башҡорт телен яҡшы белеүе бер ваҡытта ла башҡа фәндәрҙе үҙләштерергә ҡамасауламаны. 18 йыл башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ һынағаным бар, үҙем уҡытҡан, үҙ туған телен яҡшы белгән уҡыусыларым да башҡа фәндәрҙән һынатмайҙар.

Мәктәпкә уҡырға килгәндә лә, хатта үҙ туған телемде һайлайым тип ғариза яҙғанда ла һәр ата-әсә үҙ ирке менән яҙа, береһе лә көсләп, башҡа телде һайлағыҙ тип эргәләрендә тормай! Ата-әсәнең башҡорт булып та, үҙ балаһына башҡорт телен уҡытырға теләмәүе күп уҡытыусыларҙы ла аптырата. Бына мине лә аптырата, уйландыра, хафаға һала. Хатта шундайҙар араһында республикабыҙға исемдәре киң билдәле шәхестәр ҙә булыуы теткәндерә. Был ни өсөн шулай, тигән һорауға күпме эҙләһәм дә яуап таба алмаҫмын кеүек. Үҙ туған телен уҡырға теләүселәргә әлеге көндә бик күп мөмкинлектәр бар. Мәҫәлән, беҙҙең Киров районының 3-сө гимназияһында башҡорт телен дәрес булараҡ уҡытыуҙан тыш, фольклор түңәрәктәре лә ойошторолған. Шунлыҡтан, башҡорт телен аҙнаһына 4 сәғәт уҡытып та була. Туған тел булараҡ башҡорт теле 1-се кластан 9-сы класҡа тиклем уҡытыла. Өйҙә ярым-йорто ғына башҡортса һөйләшеп, баланың теле бай, һутлы булыуына өлгәшеп булмай, әлбиттә. Балаға туған телдә шиғырҙар уҡыу, әкиәттәр һөйләү, йыр тыңлау мотлаҡ, һәм ошо бурыстар беҙгә, башҡорт теле уҡытыусыларына, йөкмәтелә лә инде. Һәр дәресемдә мотлаҡ тик башҡорт телендә һөйләшәм. Үҙем уҡытҡан уҡыусыларымды йәмәғәт эштәрендә ҡатнаштырам, осрашыуҙар, конкурстар ваҡытында мотлаҡ башҡорт милләтенән булған уҡыусыны алып барыусы итеп ҡуябыҙ. Дәрестәремдә күберәк башҡорт халҡының тарихы, тәбиғәте, билдәле шәхестәре тураһында текстар ҡулланам, уларҙа милләтемә ҡарата ғорурлыҡ уятырға тырышам. Бәләкәй генә ваҡиғаға ла сикһеҙ ғорурланам, 1 сентябрь көнөндә 1-се класс уҡыусыларының саф башҡорт телендә шиғыр һөйләп, тантананы асып ебәреүе оло шатлыҡ булһа, байрамды алып барыусы 11-се класс уҡыусыһы Ғәбәйҙуллин Эриктың минә ҡарап күҙ ҡыҫып, баш бармағын күрһәтеп, ғорур тороуы күңелемә икеләтә байрам.

Район, ҡала һәм республика кимәлендә үткәрелгән бер сараларҙан да уҡыусыларымды ҡалдырмаҫҡа тырышам. Ошо сараларҙа ҡатнашыу балаларға аудитория алдында сығыш яһарға, үҙ фекерҙәрен еткерергә һәм ҡыйыулыҡ, оялсан булмау, үҙ-үҙеңә йәмғиәт алдында тота белеү һыҙаттарын үҫтереүгә ярҙам итә. Ата-әсәләр менән дә йыш аралашып торабыҙ. Башҡаларға өлгө булырлыҡ, олимпиадаларҙа, төрлө конкурстарҙа уңышлы сығыш яһаған, уҡыуҙары менән генә түгел, ә тәрбиәле булыуҙары менән дә башҡаларҙан айырылып торған, үҙ туған телен яҡшы белгән уҡыусыларым бихисап: Әйүпова Зөлхизә, Әйүпов Айтуған, Харрасова Сабина, Шәйәхмәтов Арыҫлан, Ғәлиуллина Сулпан, Кинйәбаева Гөлмирә, Батырова Сабина, Уколова Камилла, Хәлитов Данис, Мөләков Артур, Фәттәхов Илсур. Уларҙан тыш, мәктәпте тамамлаған уҡыусыларым да минең ғорурлығым: Ғәбәйҙуллин Эрик, Суфиянов Ильяс, Яҡупова Камила, Рәхмәтуллина Камила, Вафина Луиза, Рысаева Эльмира, Толобаева Әлиә, Ғәлиева Зөлфиә, Мортазин Артур, Шәйәхмәтов Рөстәмдәр гимназиябыҙға килеп, хәлдәребеҙҙе белешеп, саф башҡортса аралашып китәләр. Улар барыһы ла юғары уҡыу йорттарында белем алалар, ҡайһылары ҡулдарына диплом алып, эшләп йөрөйҙәр. Суфиянов Ильяс кеүек уҡыусыларымдың интернетта дуҫтары менән башҡортса аралашыуы мине бигерәк тә ҡыуандыра. Уларҙың ата-әсәләренә, олатай-өләсәйҙәренә мең рәхмәт!

Мәктәптәрҙә башҡорт теленең ниндәй кимәлдә булыуы, нисек уҡытылыуы тик башҡорт теле уҡытыусыларынан ғына тора. Бының өсөн уҡытыусының үҙенең башҡорт телен яратыуы, үҙ балаларын милли рухта тәрбиәләүе, бар сараларҙа ла әүҙемлек күрһәтеүе мотлаҡ, әлбиттә. Әлеге мәлдәге дистанцион уҡытыуҙы ла йырып сығып киләбеҙ. Башҡортса шиғырҙар ятлайбыҙ, әкиәттәр һөйләйбеҙ, йырлайбыҙ ("Бөйөк Еңеү байрамы", "Һаумы, һаумы әкиәт"), бейейбеҙ ("Бейеү көнө"), милли кейемдәр ҙә кейәбеҙ ("Милли кейемдәр көнө"), диктант та яҙабыҙ (Башҡорт теленән онлайн диктант). Ғөмүмән, бер ҙә тик ултырмайбыҙ. Кешe үҙ күңелендә нимә бар, башҡаларҙа ла шуны күрә. Телем тип йәшәгән һәр кем мине аңлар һәм ризалашыр.

"Үҙ туған телен яҡшы белгәндәр сит телдәрҙе яҡшыраҡ үҙләштерә", йәки "Үҙ туған телендә теле асылған бала яҡшы өлгәшә һәм һәләтле була" тигән фараздар менән тулыһынса килешәм. Сөнки үҙем уҡытҡан 3-сө гимназияла ла һәләтле балалар, тик "5" билдәһенә өлгәшкән, үҙенең туған телендә иркен аралашҡан уҡыусыларыма ҡарап һоҡланам, ҡыуанам һәм сикһеҙ ғорурланам мин. Телебеҙҙе йәм биреп, һут өҫтәп, уны ҡурсалап, яҡлап, һаҡлап торорҙай уҡыусыларыбыҙ булған саҡта телебеҙ йәшәр тип өмөтләнәм. "Һәр ерҙә лә лидер булып, үҙ фекерҙәрегеҙҙе ҡурҡмайынса аҡыллы һәм дәлилдәр менән әйтергә өйрәнегеҙ", - тип өйрәтәм мин уларҙы (Бында һүҙ кем менәндер аңһыҙ рәүештә бәхәсләшеү тураһында бармай). Тимәк, ата-әсәләргә уйланырға кәрәк, уның балаһы киләсәктә кем була һуң? Үҙ туған телен белмәгән манҡортмо, әллә үҙ илендә ышаныслы атлап йөрөгән лидермы?

Бөгөнгө көндә башҡорт теле уҡытыусыларын, методистарын, ғалимдарын да телен ҡурсалап, яҡлап, һаҡлап торған ҙур ҡалҡанға оҡшатам. Нәҡ уларҙың хәләл көсө, ныҡышмалы эшмәкәрлеге, тырышлығы менән йыл һайын төрлө-төрлө конкурстар, олимпиадалар үткәрелә. Унда башҡорт балалары ғына түгел, башҡа милләт балалары ла ҙур теләк менән ҡатнаша. Ошондай яҡлаусылары булғанда ғорур яңғыраған, илһам шишмәһе булған телебеҙ - башҡорт теле лә йәшәр, сәскә атыр!

Ошо яҡты донъяға тыуғанда йән менән, әсә һөтө менән, тәүге һулыш менән ингән телебеҙгә ҡарата миһырбанлы, иғтибарлы, ихтирамлы булһаҡ икән. Бөтә байлыҡтарҙан да ҡиммәтлерәк, ағыйлыраҡ, зиннәтлерәк булған халҡыбыҙ хазиналарын: эпос, мәҡәл, йыр, әйтем, әкиәттәрҙән торған халҡыбыҙҙың рухи гәлсәрен һәр кем үҙ телендә аңлаһа ине. Бөгөнгә ҡәҙәр башҡорт милләте, бөтә һынауҙарға ҡарамаҫтан, үҙенең изгелекле, асыҡ күңелен, моңло йырҙарын, һоҡланғыс ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡала алды. Артабан да шулай дауам итер тигән өмөттә ҡалырға яҙһын. Бының өсөн күп кәрәкмәй. Тик айыҡ аҡыл, үҙ илеңдең патриоты булыу, үҙ туған телеңдән оялмау, уны ҡәҙерләү һәм балаларыңа өйрәтеү генә кәрәк.

**Фәнгизә НАФИҠОВА,**
**3-сө Өфө ҡала гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ҺӨЙӨРӨҢ ҺӨЙҺӘ,

## һөймәҫеңде лә һөйөрһөң

**Үтатма** - ел үтә өрөп торған урын (сквозняк).
**Әсимәк** - ҡомһоҙ, туя белмәй.
**Әсәкәтләнеү** - тик ашағыһы ғына килеп тора.
**Шыма табан** - хәйләкәр, алдаҡсы, ауыр хәл-ваҡиғаларҙан еңел генә ҡотолоусы.
**Хәтте юк** - хәтһеҙ генә, апаруҡ.
**Әшептән тыш** - саманан арттырып ебәреү.
**Эш ҡарынан, тыш ҡары** - арттырыу, күпертеү.
**Тыйһаң - тырҡ, ҡырҡһаң - бырк** - ауыҙында һүҙ тормаған кеше.
**Вайран булды** - юҡҡа сыҡты.
**Ҡулғаматлашыу** - ярҙам итеү.
**Тәмиға һалып йөрөү** - гел кеше ризығына ымһынып йөрөү.
**Төрлөк** - түшәк, юрған ҡорап тегергә өсмөйөш, дүртмөйөш итеп ҡырҡылған тауар киҫәктәре.
**Ҡабыҡ ҡанат** - үтә маҡтансыҡ кеше.
**Ала-таны ҡалмаған** - ҡарар ере ҡалмаған.
**Нарлау** - алдан ҡайып һөйләү.
**Һаңға һалам бирмәй** - тәкәббер.
**Хыйлы заман** - бик оҙаҡ ваҡыт.
**Көн битендә ҡояш ялтырай** - ярлы ғына кешенең ҡиммәтле әйбере булһа, шулай тип әйткәндәр.
**Кейемең урыҫ булһа ла, күңелең дөрөҫ булһын** - милли кейемең булмаһа ла, күңелең менән динле бул, тигән мәғәнәлә.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**

КИЛЕШМӘЙЕМ

**Башҡорт теле Көньяҡ Уралда, Ағиҙел - Яйыҡ йылғалары бассейнында бик боронғо замандарҙан бирле йәшәгән башҡорт ҡәбиләләренең теленән, йәғни диалекттарынан (ҙурыраҡ төбәктәрҙә таралған һөйләш айырмалығы тел ғилемендә диалект тип, ә бер нисә ауыл йәки район өсөн хас булған һөйләш айырмалығы һөйләш йәки урындағы һөйләш тип атала) халыҡ теле булып формалашҡан. Улар, территориаль яҡтан бер-береһе менән күрше булып, бик йыш һәм тығыҙ аралашып булғандар, шул сәбәпле уларҙың телдәрендә аҡрынлап уртаҡ элементтар арта барған. Шулай итеп, башҡорт ҡәбиләләре теленән бөтә башҡорттар өсөн дә аңлайышлы булған дөйөм башҡорт халыҡ теле барлыҡҡа килгән. Дөйөм башҡорт халыҡ теле составында Көньяҡ (Ҡыуаҡан), Көнсығыш (Юрматы) һәм Төньяҡ-көнбайыш диалекттар бар. Һәр диалект һөйләштәргә бүленә. Көньяҡ диалект Эйек-Һаҡмар, Урта һәм Дим һөйләштәренән тора. Көнсығыш диалект Ҡыҙыл, Әй-Мейәс, Арғаяш һәм Салйот һөйләштәренән тора. Төньяҡ-көнбайыш диалект Ҡариҙел, Танып һәм Түбәнге Ағиҙел, Ыҡ һәм Ғәйнә һөйләштәренән тора.**

# ӘҘӘБИ ТЕЛДЕ БЕЛЕҮ КӘРӘК

## һеңрәндәргә, таҙлар, ғәйнәгә...



Башҡорт әҙәби теленең ике төрлө формаһы бар: әҙәби һөйләү теле һәм яҙма әҙәби тел. Башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы дөйөм башҡорт теле нигеҙендә бик боронғо замандарҙа уҡ барлыҡҡа килгән. Ул, асылда, героик эпостарҙың, ҡобайырҙарҙың, легендаларҙың, сеңләүҙәрҙең, башҡорт классик йырҙарының теле. Уларҙың теле лә талантлы башҡорт сәсәндәре, йырсылары, һүҙ оҫталары тарафынан быуаттар буйына эшкәртелгән, шымартылған.

Әҙәби телдең яҙма формаһы үҙенең лексик, грамматик һәм дөрөҫ яҙыу нормалары тәртипкә килтерелгән һәм законлаштырылған булыуы менән характерлана. Башҡорт әҙәби теленең яҙма формаһы 1919-1923 йылдарҙа формалаша. Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби яҙма теле дөйөм башҡорт әҙәби һөйләү теленән үҫеп сыҡҡан әҙәби милли тел иҫәпләнә. Ә милләт кешеләрҙең телгә һәм ирке менән тыуа торған күренеш түгел, ул - тарихи категория.

Башҡорт әҙәби теле көньяҡ һәм көнсығыш диалекттарға нигеҙләнгән, тигән фекер әле булһа йәшәп килә. Ләкин хәҙерге башҡорт әҙәби теленә ҡарата былай тип әйтеү дөрөҫ түгел. Башҡорт әҙәби теле халыҡ теленә яҡын, уның дөйөм нормаларына нигеҙләнә. Әҙәби тел нормалары камиллаштырылғанда хәҙер диалекттарға мөрәжәғәт ителмәй, ә халыҡ телендә киң таралған күренештәр алына. Әҙәби тел диалекттарҙан өҫтөн тора. Хәҙерге ваҡытта әҙәби тел диалекттарға йоғонто яһап, уларҙы шымартыуға табан алып бара. Әҙәби телгә диалекттарҙың тәьҫире кәмей. Әҙәби тел нормалар системаһына ҡоролған. Уның нормалары бөтә кеше өсөн мотлаҡ. Уның нормаларын камиллаштырырға һәм байытырға кәрәк. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә, әлбиттә, дөйөм халыҡ телендә ҡулланылған күп кенә һүҙҙәр инеп тә бөтмәгән. Мәҫәлән, башҡорт теле һүҙлектәренә үҫемлектәр донъяһына ҡараған күп һүҙҙәр, бөжәктәрҙең, тау тоҡомо һәм минералдарҙың, бәшмәктәрҙең һәм башҡа күп кенә өлкәгә ҡараған нәмәләрҙең атамалары инеп бөтмәгән. Ә ул атамалар халыҡ телендә бар. Тимәк, диалект һүҙҙәр бөгөн дә башҡорт әҙәби телен байытыу өсөн әһәмиәтле бер сығанаҡ булып тора.

Төньяҡ-көнбайыш диалектына Башҡортостандың Асҡын, Тәтешле, Яңауыл, Илеш, Дүртөйлө, Ҡариҙел, Борай, Бөрө, Саҡмағош, Балтас, Ҡалтасы райондарында, Пермь өлкәһендә йәшәгән башҡорттарҙың һөйләштәре инә. С.Ф. Миржанова был диалектҡа арналған китабында һәр һөйләштең фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәрен тейешле фәнни кимәлдә тасуирлаған.

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкән һәм ошо мөхиттә йәшәгән башҡорт булараҡ, мин беҙҙең диалектта уҡытырға тигән идеяны алға һөрөп йөрөүселәргә ҡәтғи ҡаршымын. Сөнки бының файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк, тигән ҡараштамын. Диктант - ул ниндәйҙер ҡағиҙәләрҙе үҙләштереү кимәлен, дөйөмләштереп әйткәндә, телде белеү кимәлен тикшереү. Үрҙә диалекттар үҙҙәре һөйләштәрҙән тора тип әйтелгәйне инде. Асҡын һәм Ҡариҙел башҡорттарының теле Яңауыл һәм Борай башҡорттарының теленән айырыла. Ә был диктант тексы ниндәй һөйләште төньяҡ-көнбайыш диалектының нигеҙе итеп алды һуң? Ниндәй ҡағиҙәләргә нигеҙләнеп тикшереләсәк? Һорауҙар бихисап.

Икенсенән. Уҡытыуға килгәндә, бының өсөн башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектының лексик, грамматик һәм дөрөҫ яҙыу нормаларын тәртипкә килтереп, законлаштырырға кәрәк буласаҡ бит. Әйтелешендә һәм яҙылышында "диалект тел" менән башҡорт әҙәби теле араһындағы норматив башҡалыҡты кәүҙәләндереүҙе көн тәртибенә ҡуясаҡ. Ә был әлеге башҡорт әҙәби теле йоғонтоһон ситләтеүгә килтерәсәк. Башҡорт әҙәби теленең йоғонтоһо самалы йәки бөтөнләй булмаған һөйләштәр бит беҙҙең ҡәүҙәле йолды ҡабатлау буласаҡ, һәм ул тел нисек аталасаҡ һуң әле?

Был халҡыбыҙҙың бер өлөшөн башҡорт әҙәби теле йоғонтоһонан ситләтеүгә килтерәсәк. Башҡорт әҙәби теленең йоғонтоһо самалы йәки бөтөнләй булмаған һөйләштәр бит беҙ үҙҙәренең үҙенсәлектәрен һаҡлап килә, әммә башҡа телдәрҙең тәьҫиренә лә бирелә. Быны беҙ, "Туған илем Татарстан, Казан минем баш калам" тип уҡытып сығарылған башҡорттар, үҙ елкәбеҙҙә татып, танһыҡ инде. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты татар теленең йоғонтоһона бирелә башлағаны һиҙелеп тора. Һуңғы осорҙа мәктәптә уҡытыу татар телендә алып барылғанлыҡтан, район гәзиттәренең татар һәм рус телдәрендә генә донъя күреүе, ауылдарҙа мәктәптәрҙең ябылыуы арҡаһында был шауҡым көсәйгәндән-көсәйә генә бара. Шулай уҡ күрше өлкәләрҙә мәктәптә уҡытыу урыҫ телендә алып барылғанлыҡтан, үҙенең туған телен онота башлау ҡеүек күңелгә ауыр күреннеште лә осратырға мөмкин.

Беҙгә юҡ-бар менән булышып, көс сарыф иткәнсе, әҙәби телдең йоғонтоһон киңәйтеү һәм тәрәнәйтеү йүнәлешендә берҙәм булып эш итеү файҙалыраҡ булыр. Шағир Ғәбиҙулла әйткәнсә,

*Тел - үҙгәге милләт ағаһының,*
*Тик үҙәктә телдең ҡеүәте.*
*Таянмаһа ошо үҙәгенә*
*Милләттең юҡ иле, дәүләте.*

**Фидаил САФИН.**
**Ҡариҙел районы.**

ТЕМАНЫҢ ДАУАМЫ




# ӘҘӘБИ ТЕЛ БЕРӘҮ!

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:*** Олоғара мәсьәлә алдында тора халҡыбыҙ. Әммә был мәсьәләне бер яҡлы ғына хәл итеү дөрөҫ түгелдер. Урындағы халыҡтың мәнфәғәтен, мәктәпкә тәү аяҡ баҫҡан бәләкәстәрҙең күңел торошон мотлаҡ иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Әлбиттә, әҙәби тел - ул берәү. Бәхәсһеҙ. Әммә ғилми термин менән "диалект" тип аталған үҙенсәлекле һөйләштәр бихисап. Ошо диалект тип аталған телдәр, асылда, кешегә тәбиғәт тарафынан бүләк ителгән, быуындан-быуынға күсә килгән туған тел бит. Ә туған тел ул ҡанға һалынған, яҡты донъяға тыуып, тәү тапҡыр ауаз һалған, булмышыбыҙ бар ителгәндә әсә һөтө менән ҡушнаҡтәргә һеңгән туған өн бит ул. Үҙен башҡорт тип һанап та тәрләсәрәк һөйләшкән, йөҙҙәрсә йылдар туған өнөн һаҡлап килгән, илем, телем, тип ихтилалдарға күтәрелгән ғәзиз милләттәштәребеҙҙең һөйләшеү телен диалект тип атап, ситтән хәл итергә тейешбеҙме? Беренсе класҡа килгән балаға: "Бөгөндән башлап һин ысын, дөрөҫ башҡорт телендә һөйләшергә өйрәнәсәкһең. Әнкә, әнәй түгел, әсәй тип әйтергә тейешһең", - тип әйтергә тейешбеҙме?

Дөрөҫ, әҙәби телебеҙ берәү. Ул төрләсә һөйләшкән башҡорттарҙы берләштереүсе, туплаусы тел. Ә диалекттар күп. Төньяҡ-көнбайыш диалекты ғына түгел башҡортта.

Шуға ла, был мәсьәләлә алтын урталыҡты һаҡлайыҡ, тип әйтеп, 1990 йылда үткәрелгән конференциялағы фекерҙе ҡабатлап, шуны тәҡдим иткем килә. Башланғыс кластарҙа "Әлифба"ға ерле һөйләштәргә ҡушымта бирергә. Был - баланың туған теленә ихтирам күрһәтеү буласаҡ һәм уны башҡортса уҡытылған класҡа йәлеп итәсәк. Артабан, дүртенсе класты тамамлағансы әҙәби башҡорт телен урындағы һөйләш теле әйтелеше менән сағыштырып уҡытып, бишенсе кластан инде әҙәби телгә күсеү үҙен аҡлар ине, тип уйлайым. Арбаны юлдан кисҡен бороу тәртәне шаҡара һуғып ҡына ҡалмай, арба күсәренең үҙен дә селпәрәмә килтерә. Шул хаҡта онотмайыҡ.

***Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә:*** БДУ-ла беҙҙе диалектология фәненән оло педагог-ғалим Абдрахман ағай Ғәлләмов уҡытты. Ул миңә ғүмерлек бер һабаҡ бирҙе. Имтиханға инеп, өҫтәл артына килеп ултырҙым да, билеттағы һорауға шытырлатып бөрйәнсә яуап бирә "баштаным". Ағай миңә үҫал бер ҡараш "таштаны ла", зачеткамды ҡулыма тоттороҙо. "Касан әҙәби телде ихтирам итергә өйрәнәһең, шул саҡта килерһең",- тип мине аудиториянан ҡыуып уҡ сығарҙы. Аҙаҡ уны ҡарауыллап оҙаҡ йөрөнөм. Көҙгә, яңы уҡыу йылы башланғас ҡына бирҙем имтиханымды. Бына шундай аҡыллы остаҙдар уҡытты беҙҙе.

Минеңсә, әле төньяҡ-көнбайыш диалекты менән килеп сыҡҡан ғауға ла әҙәби телебеҙгә ҡарата ихтирам мәсьәләһе менән бәйле. Хатта сит телдәрҙе лә үҙләштерәләр. Беҙҙең әҙәби телебеҙ барса диалектта һөйләшкәндәргә лә аңлайышлы, тылмас кәрәкмәй. Бары ул телде үҙләштерергә телӛк кенә кәрәк.

Бер кем дә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын инҡар итмәй, ул башҡа диалекттарыбыҙҙан артыҡ та, кәм дә түгел, улар тиң, шуға, әйҙә, рәхәтләнеп һөйләшһендәр үҙ диалекттарында, тик әҙәби телде лә ихтирам итә күрһендәр! Төньяҡ-көнбайыш диалекты телендә лә "ç" өнө юҡ түгел, тик һүҙҙә ҡулланылған урыны ғына әҙәби телдекенән айырыла. "Ҙ" лары ла бар. Илештә минең Рита Солтанова тигән яраткан шағирәм бар, уның әсәһе үҙ диалектында был өндәрҙе әйтеп һөйләшә. Дүртеһен дә! Был өндәр уртаҡ байлығыбыҙ. Дөйөм хазинабыҙ. "Без үзебеҙ башҡортлар", тип торған милләттәштәребеҙҙе яратабыҙ, башҡортлоҡтарын инҡар итмәйбеҙ, үҙ күрәбеҙ. Ә яһалма проблемалар уйлап сығарырға кәрәкмәй...

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## КОМИССИЯ ЭШ БАШЛАЙ




**28 майҙа БР Хөкүмәтендә онлайн режимда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса Комиссия ултырышы булып үтте. Уны Комиссия рәйесе, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров алып барҙы.**

Дәүләт власы органдары, милли-мәҙәни, йәмәғәт, фәнни-мәғариф ойошмалары вәкилдәре ҡатнашҡан сарала Комиссияның эш планы проекты, был Комиссия составына ингән Терминология һәм Топонимия хеҙмәттәре эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре ҡаралды. Билдәләнеүенсә, Комиссия үҙ эшенең яңы этабын башларға тора. Ултырыштар даими үткәрелергә, Комиссия эшмәкәрлеге дәүләт тел сәйәсәтендәге яңы нормалар талаптарын үтәүгә йүнәлдерелергә тейеш. Планға шундай яңы йүнәлештәр ҙә индереләсәк: мәҫәлән, республика һәм муниципаль кимәлдәге оператив кәңәшмәләр, ултырыштар синхрон тәржемә мөмкинлеген дә файҙаланып, ике дәүләт телендә үтергә тейеш. Был тәжрибә былтырҙан башлап БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырыштарына индерелде лә инде. Йәмәғәтселектән килгән тәҡдимдәр буйынса, Комиссияның быйылғы икенсе ярты йыллыҡҡа эш планын тулыландырырға һәм киләһе ултырышты июнь айында үткәрергә тигән ҡарар ҡабул ителде

- Беҙ республиканың дәүләт телдәрен үҫтереү буйынса әүҙем эш алып барырға һәм был эшкә барлыҡ муниципалитеттарҙы ла йәлеп итергә тейешбеҙ, - тип йомғаҡланы Комиссия ултырышын Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев.

## ҠОРОЛТАЙҘА...



**Онлайн режимда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Мәғариф, фән, башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү комиссияһының киңәйтелгән ултырышы үтте.**

Ултырышта ҡатнашып, мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Башҡортостандағы белем биреү учреждениеларына сит төбәктәрҙән балаларҙы йәлеп итеү эше тураһында һөйләне. Айбулат Вәкил улы әйтеүенсә, быйыл йәй субъекттарға сығып, урындарҙа имтихандар ойоштороу планлаштырылған булған. Коронавирус инфекцияһына бәйле хәл арҡаһында, балалар инновацион уҡыу йорттарына инеү өсөн һынауҙарҙы ситтән тороп бирәсәк. Министр имтихандарҙың объектив һәм ғәҙел булыуын тәьмин итеү өсөн һынауҙарҙың өйҙә түгел, ә мәктәптәрҙә үткәрелергә тейешлегенә лә баҫым яһаны. Республикаһың һәр инновацион учреждениеһы тураһында видеоролик төшөрөлгән, улар ҡоролтай сәхифәләрендә күрһәтеләсәк. Эпидемиологик хәл яңғай яҡҡа үҙгәрһә, августа Рәсәй төбәктәренән 40 бала Башҡортостанда ял итә аласаҡ. Башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр менән юл карталары төҙөлгән, эш пландары рәҫланған.

Ултырышта республика Ата-әсәләр комиссияһы вәкилдәре тарафынан балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре асыу тураһындағы һорау күтәрелде, ололарға башҡорт телен өйрәтеү методикаһын әҙерләү тураһында ла фекер алышынды, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса БР Хөкүмәте Комиссияһының Терминология хеҙмәтенә тәҡдимдәр индерелде. Район һәм ҡала хакимиәттәре эргәһендәге терминология комиссияларының эшен әүҙемләштереү, уларҙы республика кимәлендәге акцияларға йәлеп итеү, "Хатаһыҙ ҡала/ауыл" конкурсы ойоштороу, башҡорт телендә социаль рекламалар эшләү кәрәклеге хаҡында ла фекерҙәр әйтелде.

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШ!

**Башҡорт теле хәҙер радионан да, телевидениенан да тәүлек әйләнәһенә ишетелеп тора. Тапшырыуҙарға саҡырылған кешеләр ҙә, тура эфирға шылтыратыусылар ҙа үҙ фекерҙәрен башҡорт телендә еткерәләр, еткерергә тырышалар. Уларҙың телмәре, бәлки, тел ҡануниәте буйынса бик үк төҙөк тә, бик үк дөрөҫ тә булмайҙыр. Ләкин был мөһим түгел, иң мөһиме - уларҙың үҙ фекерен туған телдә әйтергә теләүе. Уларҙың шулай, хаталанмаммы, булдыра алырмынмы, тип ҡурҡмайынса, башҡорт телендә һөйләүе барыбер хуплауға лайыҡ. Ә бына башҡорт телен эш теле итеп алған, шул тел менән тамаҡ туйҙырған, ғаилә аҫраған, эфирҙарҙа, сәхнәләрҙә сығыш яһаған журналистар, артистар, алып барыусыларҙың телмәренә талап икенсе: уларҙың башҡортсаһы дөрөҫ булырға тейеш. Тегеләй-былай яңылыш ебәрелгән хаталар ҡурҡыныс түгел, уларҙы берәү ҙә иҫендә ҡалдырмай, икенсе тапҡыр ундай осраҡлы хаталар ҡабатланмай ҙа. Беҙҙең мәҡәләлә һүҙ даими ебәрелгән, күптәр ебәргән, ҡабатланып торған хаталар тураһында барасаҡ. Сөнки көнөнә йөҙ тапҡыр ишетелгән хата тыңлаусыларҙың иҫтәрендә ҡала. Улар ҙа, шулай кәрәк икән, тип шул хаталарҙы тиражлай башлай. Бына ул хаталар.**

# ТЕЛМӘРҘӘГЕ ХАТАЛАР,

## йәки Актерҙарҙың, журналистарҙың хәтер һандығына

### Фонетик хаталар

1) **[а]** өнөн иренләштереп әйтеү. Башҡорт телендәге [а] өнө рус телендәге баҫымлы [а] өнөнән айырылмай. **Боа**ймаҡ, **оа**лма, **ҡоа**йта тип һөйләү - башҡорт теленең нормаһы түгел. Норма - Баймаҡ, алма, ҡайта.

2) **Иреү** һәм **эреү** - башҡорт телендә ике һүҙ. **Иреү** - ҡаты әйберҙең шыйыҡҡа әйләнеүе, **эреү** - сифаттың үҙгәреүе (нигеҙҙә, насар яҡҡа). Ҡар, йөрәк, боҙ, күнел ирей. Һөт эрей, яра эренләй. Шулай булғас, йөрәгең эрегән икән, уны сығарып ташларға ғына ҡала.

3) **Баҫым хаталары.** Башҡорт телендә баҫым рус телендәге кеүек бик ҙур урын биләмәй, сөнки баҫым һуҙынҡы өндөң артикуляцияһын үҙгәртмәй, баҫымлы өн көслөрәк итеп кенә әйтелә. Ысынлап та, рус телендәге **бол**О**то** (һаҙлыҡ) һүҙендәге өс **О** өнө өс төрлө артикуляция менән әйтелә. Ә башҡорт телендәге **болот**О һүҙендә өс **О** өнөн дә бер төрлө, тик һуңғыһын (баҫымлыһын) саҡ ҡына көслөрәк итеп әйтәбеҙ.

Исемдәрҙә баҫым хатаһы булмай тиерлек, сөнки бөтә исемдәрҙә лә (башҡорт һүҙҙәрендә) баҫым һуңғы ижектә була, һәм ул, ялғауҙар өҫтәлгән һайын, һуңғы ижеккә күсә бара: бала, балалар, балаларҙа, балаларҙы**ҡ**ы, балаларҙыҡын**а**...

Сифаттарҙың артыҡлыҡ дәрәжәһендә баҫым киҫәксәлә була, сифаттың үҙе баҫымһыҙ ҡала: **Ҡып**-ҡыҙыл, **Ап**-аҡ (Аппаҡ тип әйтелә), үтә ҡыҙыл, би**к** яҡшы, йәп-йәшел, са**лт** аяҙ.

Һандарҙа ла баҫым һуңғы ижеккә төшә. Тик һанағанда ғына баҫымды төп һандарҙың беренсе ижегенә төшөрәбеҙ: ик**е** китап, йөҙөнс**ө** аҙым, ләкин **Утыҙ** алты, **Утыҙ** ете, **Утыҙ** һигеҙ...

Ҡылымдарҙың күпселек ялғауҙарына баҫым төшә. Баҫым төшмәй торған ялғауҙар ҙа бар. Бараһың, киләһең тибындағы формаларҙа хата ебәрелмәй.

Хата юҡлыҡ ялғаулы ҡылымдарҙа һәм уларҙан яһалған башҡа һүҙҙәрҙә йыш осрай. Беҙҙең дәреслектәрҙә, **-ма, -мә** юҡлыҡ ялғауы баҫымһыҙ була, баҫым уның аша башҡа ижектәргә күсмәй, тигән ҡағиҙә бар. Был, ысынлап та, шулай. Ҡарағыҙ: йөр**ө**мә, бир**е**шмә, ки**л**мәнеләр, уҡ**ы**маныҡыҙ.

Ләкин башҡорт телендә киләсәк заманды белдереүсе **-маҫ, -мәҫ** юҡлыҡ ялғауы ла бар бит. Ә уныһы баҫымлы була, баҫым уның аша аҙаҡҡы ижектәргә лә күсә ала. Ҡарағыҙ: йөрөмәҫ, килмәҫтәр, уҡымаҫҡа.




Ошо ялғауҙарҙың (-маҫ, -мәҫ) ҡыҫҡартылған формаһында ла, улар ярҙамында яһалған яңы һүҙҙәрҙә лә баҫым, шулай уҡ була: йөрөмәм (йөрөмәҫмен формаһынан), бармаб**ы**ҙ (бармаҫбыҙ формаһынан), ҡарамаҫт**а**н (бәйләүес), аңғармаҫт**а**н (рәүеш), килмәҫк**ә** (уртаҡ ҡылым), бөтмәҫ-төкәнмәҫ (сифат).

Сәхнәләрҙән, эфирҙан ҡарамаҫтан, уҡ**ы**маҫҡа, "Кәңәшле эш тарҡ**а**лмаҫ" тип әйткәндә ишетһәң (көнөнә тиҫтәләрсә тапҡыр), ҡолаҡтар "ярылып-ярылып" китә.

Ҡылымдарҙағы тағы бер баҫым хатаһы тураһында ла әйтергә кәрәк. Хәҙерге заман ҡылымдарының III зат күплек формаһы **ни эшләйҙәр** һорауына яуап бирә: укый**ҙ**ар, бара**л**ар, әйт**ә**ләр. Күренеүенсә, был формала ла баҫым күплек ялғауына төшә. Уҡ**ы**йҙар, бар**а**лар, әйтәләр түгел, ә укыйҙ**а**р, барал**а**р, әйтәл**ә**р.

### Морфологик хаталар

1. Һан янында исемдәр, ғәҙәттә, берлек һанда ҡулланылалар: 25 уҡыусы, 18 бала - дөрөҫ, ә 25 уҡыусы**лар**, 18 бала**лар** тип һөйләү - хата.

2. Рус телендә күплек формала ғына ҡулланыла торған исемдәр башҡорт телендә берлек формала йөрөйҙәр (йә иһә берлектә тип иҫәпләнәләр), мәҫәлән, коньки - конькиҙар). Миҫалдар, **шахматы - шахмат, шашки - шашка, сани - сана**. Һуңғы ваҡытта каникул һүҙен каникулдар тип ҡуллана башланылар. Әгәр каникул бер нисә булһа, улар, ысынлап та, каникулдар. Мәҫәлән, быйылғы уҡыу йылындағы **каникулдарҙы** өйҙә генә үткәрҙем (**көҙгө каникул, ҡышҡы каникул, яҙғы каникул**). Әгәр ҙә һүҙ бер каникул тураһында бара икән, был осраҡта берлек форма ғына ҡулланыла: **ҡышҡы каникул** бик оҙон булды.

3. Мөмкин һүҙенән мөмкинлек һүҙе генә яһала ала. Мөмкинселек тип әйтеү - хата. Оҫтасылыҡ, кәрәкселек тип әйтмәйбеҙ бит.

4. Башҡорт телендә теләк мәғәнәһен белдерә торған **-ғы килә** ялғаулы ҡылым формаһы бар: **ҡайтҡы килә**, йоҡлағым килде, **ашағыһы килә**... Саф башҡорттоҡо булған ошо форманы беҙҙең телгә характерлы булмаған **-аһы килә, -йһы килә** ялғаулы формаларға алмаштыра башланылар. Йәнәһе, **ашайһы килә, ҡайтаһым килде**.

Үҙебеҙҙекенән бер сәбәпһеҙгә баш тартырға ярамай. Дөрөҫ, -аһы, -йһы формалы ҡылымдар беҙҙә лә бар. Ләкин улар аҙағынан **бар, ине, бул** кеүек һүҙҙәр ҡулланыла: **йөшәйһе бар, ҡайтаһы ине, йөрөйһө булған**. Ә кил ярҙамсы ҡылымын алабыҙ икән, төп ҡылымға шунда уҡ **-ғы** ялғауы ҡушыла: **уҡығы килә**.

Тағы ла бер күренешкә туҡталғы килә. Беҙҙең йырсылар татар телендә яҙылған йырҙарҙы башҡортса, татар йырсылары башҡорт телендәгеләрен татарса йырлайҙар. Тәбиғи һәм яҡшы күренеш. Ләкин минең, беҙҙең йырсыларға татар телендәге йыр һүҙҙәрен башҡорт теленә дөрөҫ итеп әйләндереп йырлаһындар ине, тип кәңәш биргем килә. Юғиһә, **меник (минәйек), икәнһеҙ (икәнһегеҙ)** кеүек ғәжәп формалы һүҙҙәрҙе, йәнәһе, "башҡортса" итеп йырҙарына индерәләр.

Минең бында шундай осраҡтағы бик уңышлы күсереүҙәрҙе миҫалға килтергем килә. Салауат Фәтхетдинов Салауат Низаметдиновтың Зөһрә Ҡотлогилдина шиғырына яҙған "Белгең килһә" тигән йырын бик яратып башҡара. Татар телендә ҡылымдың бындай формаһы юҡ, аналогик формаға күсерәм тиһән, ижектәр һаны тура килмәй. С. Фәтхетдинов был һүҙҙәрҙе **"беләм, тиһәң"** тигән һүҙҙәр менән алмаштыра. Мәғәнә лә һаҡлана, ижек иҫәбе лә тап килә, татар теленең нормалары ла боҙолмай. Фәрит Бикбулатов киң билдәле татар йыры "Етегән шишмә"не еренә еткереп башҡара торғайны. Унда **"Беҙ китәбеҙ инде, сез ҡаласыҙ"** тигән юлдар бар. Башҡортсаға шул көйө генә әйләндерһәң, ижектәр һаны тура килмәй. Фәрит Бикбулатов был юлдарҙы **"Ҡалаһығыҙ инде, беҙ китәбеҙ"**, тип, мәғәнәгә хилафлыҡ һалмай ғына, башҡортса йырлап ҡалдырҙы.

Күренеүенсә, ыңғай миҫалдар бар. Беҙгә шуларҙан өлгө алырға ғына ҡала.

**Вәкил ХАЖИН,**
**мәғариф ветераны.**

*✓ Зәңгәр төймәм кемдә - күңелем шунда, һөйөүемдең төҫө - зәңгәрҙер. Был йырҙан һуң ҡатындар шыма. Йыуашаялар. Ипләп кенә эйәктәре күтәрелә, йөҙҙәренә нур, ирендәренә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайыу килә.*



Хафиз ҡайыш ҡамсыһын шыйылдатып өҫкә күтәргәйне генә ауыр имән ишек асылып китте. Өйҙәгеләр барыһы бер юлы шымып, инеүсегә боролдо. Унда тупһа аша атлап өлгөргән дә, ингәс кенә хәлде аңғарып ҡалып, ни сәләм бирергә, ни борлоп сығып китергә белмәгән ҡараштағы дәрүиш ҡарт баҫып тора ине. Әле генә йортто осороп алып барған ҡатындарҙың йөҙөндә башта юғалып ҡалыу, унан оялыу, хатта ояттарынан ер тишегенә инеп китергә теләү ғәләмәте сағылды. Икеүһе шулай итте лә: шаршау артына йәшенеп өлгөрҙө. Олораҡ ҡатын ярһыуҙан ҡыҙарып киткән йөҙөн яулыҡ осо менән ҡаплай биреп, ынтылып, иренең һаман үрҙә торған ҡулына төрттө. Ире ҡамсыһын урындыҡ аҫтына бырғатып өлгөрҙө.

- Әссәләмәғәләйкүм бы-ыл йортҡ-аа! - тип, бөтөн был күренештәрҙе лә аңғармағанға һалышып, һуҙып ебәрҙе инеүсе.

Хафиз да үҙен ҡулға алды, хатта ки балаларса шатланып китте:

- Вәғәләйкүмәссәләм, дәрүиш хәҙрәт! Әйҙүк-әйҙүк! Түргә уҙ!

Үҙе ҡатынына бер генә ҡарап алды, тегеһе тилбер ҡуҙғала һалып барып, көлдөксәлә ҡырын ятҡан самауырҙы бер ҡолағына эләктереп һөйрәп тә алды. Һыу тултырып ултыртыуына, шаршау артындағы ҡатындарҙың береһе йәһәтләп килеп уны тышҡа алып сығып та китте. Өлкәне урындыҡҡа ашъяулыҡ түшәп, унда ит һәм башҡа ризыҡ теҙгәнсе, йәшенгән урынынан бөтөнләй йәш сырайлыһы баш баҫып ҡына сығып, янып ятҡан усаҡтың торонбаштарын йәмкә менән һуҡҡылап, күмер төшөргәс, шуларҙы һоҫҡоға өйөп һалып көндәше артынан сыҡты.

Ирҙәр күрешеп, хәл-әхүәл һорашып, урындыҡҡа менеп ҡунаҡланы. Хафиз өлкән ҡатыны алып килеп тотторған тас һәм ҡомған менән ҡунағының ҡул битен сайҙырып алды. Унан, самауыр түргә килеп ултырып, сәй яһалғас, ҡатындарына китергә ҡушып ҡул иҙәне. Тегеләре йәһәт йыйынышып, шаршау артындағы урындыҡта уйнаған балаларын алып, төкөтмә аръяғына - бәләкәй өйгә күстеләр.

* * *

Ҡунаҡ - суфый дәрүиш ине. Уның ысын исемен бер кем дә белмәй һәм һорарға ла ҡыймай. "Һыу-һаҡ, һыу-һаҡ" тип сәйер генә итеп һамаҡлап йөрөүенән үҙен "Һыуһаҡ ҡарт" тип тә атап ҡуялар. Ауылдарҙан ауылдарға, унан тағы ла әллә ҡайҙарғалыр әле, туҡтауһыҙ йөрөп ятыуынан "дәрүиш" тә тигәндәр. Ә инде туҡтаған урындарында дин тәғлимәттәрен һәм бәйғәмбәрҙәрҙең сихри тарихтарын тыңлаусыларын мөкиббән китәреп һөйләүҙәренән уның суфый хәҙрәт икәнен дә беләләр. Һәр хәлдә, был ҡартты бөтә ерҙә лә ихлас ҡабул итәләр, уның өсөн һәр йорттоң ишеге асыҡ, төн йөҙөндә лә, көн йөҙөндә лә уның өсөн ваҡыт бүләләр, мунса яғып төшөрәләр, аш һалып һыйлайҙар, уның менән бергәләп намаҙ ҡылалар һәм фатихаһын алып оҙатып ҡалалар. Ҡарт үҙе лә бик ипле, тәүфиҡле һәм таҙа әҙәм. Керен йыуып-киптереп биргән ҡатындар уның кейем-һалымында артыҡ кер юҡлығын, хужалар табын артында ла ҡыҫтатып ҡына ҡабыуын, юлға ла бер телем икмәк һәм бер баш ҡороттан башҡа һый алмауын беләләр. Ә инде ул һайлап ишек ҡаҡҡан йорт был изге йәндең тап уның өйөн һайлауын ҙур мәртәбә итеп ҡабул итә. Хатта үҙенең артыҡ тамағы булмағандар ҙа был бурысты намыҫ менән үтәргә тырыша. Сөнки күптәр уны Хыҙыр Ильяс тип тә уйлай. Ысынында, Хыҙыр Ильястың үҙеме, юҡмы, был хаҡта берәү ҙә бәхәсләшмәй, бары ҡарттың ризалығын алыу өсөн, уның был йөрөп ятыу сәфәрендә ниндәйҙер файҙа килтереү өсөн тырышалар. Әйтеүҙәренсә, үҙе һөйләгәндә килтергән мәғлүмәттәре буйынса, ҡарт Мәккәлә лә, әллә ниндәй сит-ят яҡтарҙа ла булған. Һәм юлының күп өлөшөн ул ошолай йәйәү үткән.

* * *

Дәрүиш хужаның ҡатындарын ҡыуып сығарыуынан уның бисә-сәсәһенә ныҡ асыулы икәнен аңланы. Улай тиһәң, бая ингәндә үк өйҙә талаш-тартыш барыуын аңғарғайны. Нимәгәлер ныҡ ҡыҙҙырып ташлаған ҡатындары ирҙе.

- Асыуҙы оҙаҡ һаҡлама, ул һинә барын ҡара затта күрһәтер. Асыу артында хата бар, хата артында бәлә ята...

Ҡарттан йәшереп булмаҫын төшөнә Хафиз да. Күңелен өйкәп торғанын әйткеһе килә:

## Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА

# ЗӘҢГӘР ТӨЙМӘ

(Хикәйә)



- Бына бисәләр үҙәккә үткәрҙе бит, хәҙрәт... Һин килеп инмәһәң, ысынлап туҡмап ташлай инем был юлы.

- Э-эй, ҡустым. Туҡмап ҡына аҡыл ултыртып булһа, аң индереп булһа, ана, күпме һуғылыуға һыйырҙан аҡыллыһы булмаҫ ине. Һөйләшеп киткән булыр ине ул мал, - тип кеткелдәп көлдө уға ҡаршы ҡарт.

- Ҡалайтырға быларҙы - хайран булынған?

- Тоталмағас, ни ниәттән ҡатындарҙы өсәү итеп ебәрҙең? Нәфсеме был, әллә башҡа сәбәпме?

- Нәфсе тип... Өлкән ҡатын ағайҙан ҡалған еңгәм ине. Ике бала менән ултырып ҡалғайны. Атай минә, ун ете йәшлек кенә егеткә, мин аныҡ-тоҡон аңлағансы, алды ла бирҙе. Ярай, үпкәм юҡ, еңгәм һәйбәт булды, тартты мине, уның ҡуйынында ир булдым. Бөтөн хужалығым уның ҡулында, балаларҙы ла тәрбиәләп ул ҡарай.

- Бынаһын бик дөрөҫ иткәнһең, етем ҡатынды ҡанатың аҫтына алыу, үҙ ҡаның балаларын ситкә һипмәү бик хуп, хуп...

- Икенсе ҡатынымды күҙем төшөп алдым. Егерме биштән үткәс, ялан яғына һалабаш, күмер һатырға барғайным, шунда бер ауылда бер ҡыҙҙы күреп, тынысылығымды юғалттым. Минең уйланып йөрөүемде ҡатыным һиҙеп ҡалып төпсөнгәйне, үҙ еңгәм дә инде, уға бар серемде һөйләп өйрәнгәнмен, әйт тә һал. Был, уйланы-уйланы ла, теге ҡыҙ менән һөйләшеп ҡарарға ҡушып ебәрҙе. Барып эҙләп табып һүҙ ҡуштам, ҡыҙ ҙа мине онота алмай икән. Ҡайттым да яусы ебәрҙем. Оҙаҡламай алып та ҡуйҙым.

- Өсөнсөһө нимәгә кәрәк булды бынаһына күңелең ятҡас?

- Өсөнсөһөн мин анау аслыҡ йылдары ҡалаға сауҙаға барғанда табып алып ҡайттым. 13-14 йәштәрҙәге генә бала ине, аслыҡтан миктәп, ҡала ситенә сығып ҡолағайны. Ылаусылар уны үлгәндер тип туҡтамай ҙа үтеп китә, мин, үҙ башымамы инде, санамдан төшөп янына барҙым. Ҡараһам - тере. Күтәреп йөк өҫтөнә һалдым да алдым. Ҡатындарым бағып терелтте. Ҡоро һөлдә лә төймә танау ине. Мишәр ҡыҙы булған икән, инәһе менән генә йәшәгән, унықы ауырып үлгән дә, был баланы ашатыр-ҡарар кеше табылмаған...

Шул ҡыҙ беҙҙә йөрөп буй еткерҙе, бик үткер, егәрле булып сыҡты. Ҡатындарым ҡулы аҫтында эшкә өйрәнде. Бернисә йылдан эргә-тирәнән яусылар килә башланы. Бер урынды яйлы ғына күреп, ризалашайым тип уйлап йөрөһәм, ҡыҙ мине аҙбар араһында тотоп алып, күҙемә тура ҡарап сатнатып: "Хафиз абый, мине берәүгә лә бирмә, үҙеңә ал, бирһәң дә ҡасып китәсәкмен, мин һине генә яратам", - тимәһенме? Ултыра төшә яҙҙым. Баҡтиһәң, уның был мөхәббәтен ҡатындарым да белә, имеш. Уларға ла "ятҡа бирмәгеҙ" тип илаған. Ҡатындарым: "Кем ҡулына бара әле, өйрәнгәнбеҙ, ҡасып та китер, әрәм булыр, бигерәк баш-баштаҡ бит", - тип торалар. Уйлаштыҡ-һөйләштек тә, алып ҡалдыҡ...

- Шунан... нимәһенә риза түгелһең бөгөн?

- Ризалығын ризамын да... талашалар бит. Юҡтан ғына яу булып сарылдаша ла китәләр. Әллә нимә бүлешәләр шулар? Һәр береһенең үҙ мөйөшө бар, ҡулдарында бала, айырмаҫҡа, бүлмәҫкә тырышам - юҡ, ирешмәйсә йәшәй алмайҙар.

Ҡарт һаман күҙҙәрен ҡыҫып хәйләкәр көлә:

- Нимә бүлешергә мөмкин бер ирҙең өс бисәһе? Ир һөйөүенән башҡа... Һәр береһе йәненңдең тик үҙенә генә табыныуын теләй.

- Нисек берәүһенә генә булайым инде, хәҙрәт? Улар бит өсәү икәндәрен белә. Үҙҙәре булдырҙы, үҙ теләктәре менән яһанылар был тормошто.

- И-и, ҡустым, ир уртаһына еткәнһең, бер түгел өс бисәгә хужа булып ултыраһың, ә ҡатын күңелен яйға һалыу хәйләһен белмәйһең икән әле...

- Бармы ни уның юлдары, сере, хәҙрәт? Ярҙам итә алаһыңмы минә?

- Һин, ҡустым, бына нисек итеп ҡара...

* * *

Баҙар көндө ҡатындарына алып ҡайтҡан ваҡ-төйәктән башҡа үҙенә лә бер кейем алғайны Хафиз. Ярайһы ғына ҡалын ҡара бәрхәттән ҡала сауҙагәрҙәренекенә оҡшатып тегелгән камзул ине ул. Ҡатындар яңы кейемде күреп ҡалыу менән бер-береһенән һыпыра тартып тигәндәй алып, әйләндереп-тулғандырып ҡаранылар ҙа, ирҙәренә кейҙереп тә ҡуйҙылар. Үҙҙәре ситкәрәк китеп һоҡланды:

- Әллә-лә-ә! Килешеүе!

- Әҙәм күрке сепрәк, йә әле!

- Төймәләре һуң, төймәләре! Аҫылташ ҡына!

Ысынлап та, камзулдың төймәләре зәңгәр ташты көмөш ҡайма менән нағышлатып яһалған да, йылтҡылдап, йымылдап, балҡып күренеп тора ине.

- Төймәләре тауар хаҡына барып баҫты. Тегенсе татар өҙмәй ҙә ҡуймай, ошо ғына бара, ти ҙә ҡуя. Ризалаштым инде, бер кейәйем әле, тип.

- Һатта һәйбәт иткәнең! - өлкән ҡатыны йөпләй һала. - Байҙар араһында бай булып йөрөйһөң, ә кейеп сығыр бер күренерлек кейемең юҡ. Бына шулай йөрөр кәрәк һинә!

* * *

Шул кисте үк оло яҡҡа ире янына инеп ҡунырға сираты еткән йәш ҡатыны көндәштәренә зарланды:

- Алтынбикә апам көнө буйы һуҡранып тик йөрөнө, йә быны былай итмәгәнһең, йә тегеһе оҡшамай. Мин уларға хеҙмәтсеме ни? Райхана көндәшем дә холоҡһоҙланды, үҙенең балларына күмәстең йомшағын биргән, минекенә ҡаткаһын тотторған...

Ир уның һөйләп бөткәнен көтөп тора алмай, бүлдерҙе:

- Нәжиә, һин уларҙың бер нәмәһенә лә иғтибар итмә, йәме. Улар һинән көнләшеп кенә шулай итә. Сөнки минең күңелем һиндә генә икәнде беләләр.

Йәш ҡатын ауыҙын аса биреп, оҙон керфекле матур күҙҙәрен сырт-сырт йомғоланы:

- Ы... ысынмы?

- Ысын, йәнем. Йөрәгемдә бер һин генә. Һин минең өйҙә иң һылыуы, иң яҡыны минә. Һин минең ҡарлуғасым... Минең томбойоғом...

Шул һүҙҙәренән һуң ир тора килеп урындыҡ өҫтөндәге урҙала эленеп торған теге камзулының бер төймәһен йолҡоп алды ла ҡатынына тотторҙо:

- Бына, матурым, һөйөүем билдәһе! Ошоно кейемеңдең иң йәшерен еренә генә тегеп ҡуй, берәүгә лә әйтмә. Һин беләһең дә, мин беләм! Йәме?

- Йә! - Ҡатыны хисләнеүҙән йәшкәҙәп килеп иренең ҡуйынына һыйынды. - Мин шулай тип уйлағайным да, мине генә яраталыр тип... Мине генә.

* * *

Йортҡа яйлап тыныслыҡ килде. Ҡатындарҙың сар-соро, талаш-тартышы күпкә баҫылды. Шулай ҙа ҡайһы саҡта ғына араларында аҙыраҡ сыйыш сығып китә китеүен. Бына бөгөнгә, бесәндән бер арбала тейәлешеп ҡайтып килгәндәге кеүек. Балалары этешеп-төртешеүгә ике йәше әләгешә лә китә. Өлкәне уларҙы тыймаҡсы булып ҡушыла. Шул ваҡыт, был әйтештә еңеүсе лә, еңелеүсе лә булмаҫын аңлаған ир, алға ҡарап дилбегә тотоп ултырған килеш, аҡрын ғына йыр һуҙып ебәрә:

Зәңгәр төймәм кемдә - күңелем шунда,
Һөйөүемдең төҫө - зәңгәрҙер.
Ҡулдарыңа башым һалып ҡына,
Ятып торһам донъя *сәңгерҙер.

Был йырҙан һуң ҡатындар шыма. Йыуашаялар. Хатта уңайһыҙлыҡ кисергәндәй булалар. Ипләп кенә эйәктәре күтәрелә, йөҙҙәренә нур, ирендәренә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайыу килә. Арҡалаш ултырған өлкәне, урынын рәтләгән булып, иренә иң менән терәлә биреп ала. Йәнәшендәге уртансыһы башҡаларға һиҙҙермәй генә "йәлп" итеп ҡарап ҡуя. Артта балаһын тубығында бәүелтеп килгән йәше, ынтылып, иренең яурынындағы бесән вағын ҡағып төшөрә. Һәр береһе хужаларына үҙенең бында, янында, яҡында ғына икәнен белдергеһе килә. Һәр береһе күлдәге эсендәге теге йәшерен урынға тегеп ҡуйылған зәңгәр төймәне һәм шул төймә бирелгән көндә әйтелгән ләззәтле һүҙҙәрҙе иҫләй... Һәр береһе теге камзулдың дүртенсе төймәһе ни өсөн етмәгәнен һәм ҡайҙалығын үҙҙәре генә белә...

... Ә зәңгәр төймәләрҙең ысынында нисәү булғанлығы бер Хафизға ла, дәрүиш ҡартҡа ғына мәғлүм. Рәхмәттәрен уҡып бөтә алмай ҡартҡа ир.

Ә талғын моң ҡатындарҙы иркәләй бирә:

Зәңгәр генә төймәм - (ы)сын вәғәҙәм,
Биҙәк итеп баҫсы түшеңә.
Аҡҡош ҡына булып керәһеңдәр,
Таң алдынан да татлы төшөмә.

**Сеңгер - салт, якты.*

✓ *Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡарашта булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТӨШ ҺӘМ АУЫРЫУ

■ Медицина белгестәре төштәр һәм ауырыуҙар араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Йоҡлаған саҡта кешенең мейеһе көн дауамында алған төрлө мәғлүмәтте генә түгел, эске ағзалар ебәргән сигналдарҙы ла анализлай. Рәсәй ғалимы Василий Касаткин раҫлауынса, ҡабатланып торған ҡайһы бер төштәр сәләмәтлек менән бәйле проблемалар тураһында һөйләй. Табип 1410 пациентты тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Йөрәк сирлеләр ҡурҡыныс төштәр күрә, улар йыш ҡына кемдәндер ҡаса, ҡайҙандыр йығылып төшә, кемделәр ерләүҙә ҡатнаша. Юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға тәбиғәт катаклизмдары, йорттарҙың емерелеүе инә. Ҡан баҫымы түбән булған кешеләр төштәрендә йылғаны йөҙөп сыға алмай йонсой, йә тауға күтәрелә алмай, йә ауыр йөккә көстәре етмәй. Астма ауырыуы булғандар төшөндә лә тын алыуға бәйле проблемаларға тарый. Бронхиаль астма менән ауырығандар һыуға бата, йә уларҙы ҡорон баҫа. Бауыр сирлеләргә ҡан, һуғыш, яраланыу инә. Ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарын төшкә боҙолған ризыҡ, еҫләнгән ит йәки балыҡ инеүенән билдәләргә була. Быңдай сирлеләр төштәре төшкән икән, тип төш күреүсән. Һалҡын тейеүҙе янғын, мунса ингән белдерә, тымауланған кеше төшөндә һыуһап, һыу эҙләй. Депрессиялағы кешенең төшөнә үтеп булмаған урман, бейек стеналар, барьерҙар инә.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡарашта булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һәҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйыҡайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Белгестәр хәтер насарайыуының йәштәрҙә лә йыш осрай башлауы хәүефен белдерә. Бигерәк тә 30 йәште үткәндәрҙә был күҙәтелә. Йышыраҡ кешеләр өйҙән сығып киткәндә өйөк кейергә, күҙлек йәки аҫҡыс алырға, дөрөҫ аҙыу ҡағыҙһын, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәш кеше була. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

# АБРУЙ, ХӨРМӘТТЕ...

## илле һумға алыштырҙы

**Өйҙә ҙур ҡыҙым менән икәү генәбеҙ, атайҙары, һәр ваҡыттағыса, эштә, ҡалған балаларым тышта уйнайҙар. Улар көндөң көнө буйына уйнап туя алмай, өйгә әллә нимә менән алдаштырһаң да индереп алып булмай. Әҙләп, саҡырып алып тамаҡтарына ашатамаһаң, ашауҙы ла оноталар хатта. Ә инде көсләп алып инһәң, ашарға ултыртырмын тимә, унан-бынан аяҡ өҫтө ҡапҡылайҙар ҙа тағы урамға атылалар.**



Ауылда шуныһы рәхәт шул, бигерәктә бала-сағаға хөрриәт. Көнө буйы әллә ҡайҙа олағып, күренмәй йөрөһәләр ҙә, баландың һәр аҙымын белеп тораһың. Ауыл бит ул! Һәр бала ҡәҙерле ауыл халҡына, олоһо ла, йәше лә уларҙы бер ваҡытта ла күҙ уңынан ысҡындырмай. Балаларҙың ҡайһы тирәлә, ни рәүешле уйнауҙарын бер-берененә еткереп кенә торалар. Шуға күрә лә, балалар менән бер-бер хәл булыр тип ҡурҡыу юҡ ауылда. Әлбиттә, бәләкәстән генә хәүеф-хәтәрҙән һаҡланыу сараларын, ҙурҙарының кесе туғандарын һәр ерҙә ҡурсып, ҡарап алып йөрөүҙәрен, әсәй менән атай рөхсәтенән башҡа алыҫ китмәүҙәрен, әгәр ҙә берәй хәл булһа, яҡын-тирәлә үҙебеҙҙең ауылдың ниндәй кешеһе бар, шуны ярҙамға саҡырыуҙарын, яҡшы белгән үҙебеҙҙең ауыл кешеһенән башҡа ят кешеләргә ышанмауҙарын һәм башҡа, һәм башҡа ҡағиҙәләрҙе һәр баланың аңына һеңдереп үҫтерәбеҙ...

Шуға күрә, уйнап йөрөгән балаларым өсөн һис борсолмай, өйҙә ҙур ҡыҙым менән ярышҡа (конкурсҡа) әҙерләнеп мәж киләбеҙ. Ауылдың мәҙәниәт йортонда "Әсәләр һәм ҡыҙҙар" исемле ярыш үткәрергә булғандар ҙа, ҡыҙым менән мине ҡатнашырға, көс һынашып ҡарарға саҡырҙылар. Мөкиббән китеп мода күрһәтеү конкурсына костюмдар, күлдәктәр әҙерләйбеҙ, аш-һыу әҙерләү буйынса ярышҡа еңел генә ебәк тукыманан йәрпесәкләп алъяпҡыс, рестарандарҙағы шеф поварҙарҙыҡы кеүек бейек түбәле башлыҡ тегеп алдыҡ. Бик матур килеп сыҡты. Ихласлап минә ярҙамлашып йөрөһә лә ҙур ҡыҙым ҡатнашмай ярышта. Ул үтә оялсан, ҡыйыуһыҙ, тыйнаҡ ҡыҙыҡай, шығырым тулы халыҡ алдында сәхнәгә сығып баҫыу ҡайҙа инде! Үҙенең ҡулынан килмәгәне юҡ, әммә ҡыйыуһыҙлығы көслөрәк шул.

Ярышта үтеп сығып барған, баҫҡан ерендә осҡондар осороп йөрөгән, ҡулынан да, теленән дә килә торған уртансы ҡыҙым ҡатнаша. Төрлө милли бейеүҙәр, заманса бейеү, брэйк данс башҡарасаҡ. Башҡорт телендә шиғыр һөйләргә лә оҫта ул ҡыҙыҡайым. Әммә ярышҡа әҙерләнергә уның түҙеме етмәй. "Әҙерләһәгеҙ, ҡатнашам!"- тип кенә ҡуйҙы ул. Әйткәндәй, ул ҡыҙыҡай осоп-ҡунып магазинға барып килде лә: "Әсәй, бына алып ҡайт тигән әйберең, бына ҡалған 50 һум аҡса", - тип әйберен өҫтәлгә, аҡсаны минең янымдағы ултырғысҡа һалып сығып китә һалды. Бөгөнгө әҙмамдың ғилләһе ошо 50 һумда ла инде...

...Шулай ҡымғыуытлап ултырып, ауылыбыҙҙағы иң һылыу, иң егәрле, иң һөйкөмлө апайҙың килеп ингәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Ул шундай күркәм, шундай ипле, шундай уңған, ундай кеше тураһында "аҫыл һөйәк" тигәндәрен ишеткәнем бар. Ул буй-һын, ул һылыуҙарҙан һылыу йөҙ, ул үҙәкте өҙөрлөк моңло тауыш, йырлап ебәрһә, илатмай ҡуймай. Бирһә бирә лә ҡуя бит Хоҙай Тәғәлә бөтә булған күркәмлекте бер кешегә! Ауылда бөтәһе лә уны хөрмәт итә, олоһо ла, кесеһе лә берҙәй яраталар. Минең дә күңелемдә ошо матур апайға хөрмәт, һоҡланыу тойғолары биләй. "Әйҙә, апай, түргә уҙ!"- тип ҡаршы алам мин уны. Әйткәндәй, өйөбөҙҙән түре лә юҡ инде, 20 кв.м. ғына бер бүлмәле өйҙә йәшәп ятабыҙ. Боронғолар әйтмешләй, күңелең киң булһа, өйҙөң ниндәй ҙурлыҡта булыуы мөһимме ни...

Шулай эшебеҙҙе ҡуйып тороп, апай менән әңгәмәләшеп, төрлө хәбәрҙәргә төшөп китеп, кинәнеп һөйләшеп ултырғанда өсөбөҙҙөң дә күҙебеҙ бер нөктәгә төбәлде. Был баяғы алабарман ҡыҙым ҡалдырып киткән 50 һум аҡса ине. Ул ултырғыста ята торғас, иҙәнгә төшөп киткән, күрәһең. Әллә үҙебеҙ үтеп барғанда итәк еленә әләгеп төштөмө, әллә теге бала ҡабаланып шулай елләп киттеме инде, белмәсһең. Беҙ ул аҡса тураһында бөтөнләй онотҡан булғанбыҙ икән. Бына хәҙер ул күҙгә салынып ҡалды. Әммә мин үҙем дә, ҡыҙым да уны әйелеп алырға ашыҡманыҡ...

Шулай һөйләшеп ултыра торғас, апайыбыҙ ҡапыл ғына йонләнеп, ҡыҙарынып китте, урынында ултырып сыҙай алмағандай, бер торҙо, бер ултырҙы. Иң ахыры ҡулына өҫтәлдә ятҡан гәзитте алып, өйөгөҙ бигерәк эҫе, тип, иҙәнгә төшөп ултырҙы. Аҙыраҡ ултыра биргәс, нишләптер гәзитен ултырғыс аҫтына иҙәнгә һалып торҙо ла, уны киренән алды. Шул саҡ баяғы аҡсаның гәзит менән ҡуша күтәрелеүен, апайҙың уны тиҙ генә кеҫәһенә тығып ҡуйыуын шәйләнем. Быны ҡыҙым да күрҙе. Әммә апай беҙҙең ҡараштарҙы абайламаны, буғай...

Мин ипләп кенә ҡыҙыма ҡарайым, үҙемдең башымда бер генә уй: "Уй Аллаҡай ғынам, балалыҡ менән әйтеп ҡуймаһа ярар ине..." Ә ҡыҙым аптыраулы, һораулы ҡарашын минә төбәгән. Мин һаҡ ҡына баш һелкәм дә, өндәшмә, тип ымлайым. Бына апайыбыҙ ҡабалана башланы: "Аһ-аһ, оҙаҡ ултырып ташлағанмын бит һүҙгә әүрәп", - тип, шәпләп атлап сығып китте...

Өйҙә тәрән тынлыҡ урынлашты. Мин иҫем китеп, әле генә күҙ алдыбыҙҙа булған хәлгә ышана алмай һеңгәҙәп ултырам. Нисек инде улай? Апайыбыҙ бик бай, етеш йәшәй бит! Ул һарай тулы мал, ул техника, машиналар, тракторҙар, ул эсе тулы йыһазлы өй! 50 һумға ҡалған көнө бармы һуң инде! Быны нисек аңларға? Ниһайәт, ҡыҙым түҙмәй, минә һүҙ ҡуша: "Әсәй нишләп әйтмәнең инәйгә, ул бит беҙҙең аҡса ла инде?" "Оялдым, балам, уңайһыҙ бит. Ә һин мин тыйғансы нишләп өндәшмәнең һуң?" - тием уға. "Мин дә оялдым, әсәй", - тине балам. Шулай итеп, үҙ аҡсабыҙҙы күрә тороп урлатып, үҙебеҙҙең әйбер өсөн үҙебеҙ оялып, өндәшмәй ултырып ҡалдыҡ...

Күңелгә шул тиклем ҡыйын булып китте, һөйләп аңлатырлыҡ түгел хатта. Күҙҙәр үҙҙәренән үҙҙәре йәш менән тулды. Ул йәштәрҙе ҡыҙымдан йәшерә һалам, әсәйем 50 һум аҡсаһын ҡыҙғанып илай, тип уйлай күрмәһен тағы. Бик ныҡ хөрмәт иткән, яратҡан апайыбыҙға ҡарашым үҙгәреүе, уның тышҡы һылыулығы, нисектер, уңып, юйылып, таушалып ҡалыуы, һоҡланыу, хөрмәт тойғолары ҡул менән йолҡоп ташлағандай юҡҡа сығып, урынында өңрәйеп, әсендереп, һулҡылдап һыҙлап бушлыҡ ҡына тороп ҡалыуы илатты минә. Быны йәш балаға нисек аңлатып була ине һуң?..

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

ЙОРТ-ҠУРА

# МАЛЫҒЫҘ КӨТӨҮҘӘМЕ?

**Ауыл ерендә халыҡ ҡура тултырып мал аҫрай. Был шөғөл хуплауға лайыҡ. Ҡар иреп бөтә һәм ҡыш буйы кәртәлә торған малды йәйләүгә сығарыу ваҡыты ла етә. Мал аҫрау өсөн көтөү осоро айырыуса әһәмиәтле һәм яуаплы.**



Хәстәрлекле хужа үҙенең малын көтөүгә сығарыр алдынан уларҙы ныҡлы әҙерләргә тейеш. Ветеринария законы буйынса, һауын һыйырҙарынан һәм көтөүгә ҡуша торған үгеҙ малынан бруцеллез ауырыуын тикшерер өсөн ҡан алына, шулай уҡ туберкулезға һәм эмкар ауырыуҙарына ҡаршы прививка яһала.

Башҡа мәшәҡәт эштәр ҙә күп: ҡуштояҡ малдарҙың үҫкән тырнағын тигеҙләп ҡырҡырға, һыйырҙың мөгөҙө осло икән, осон бысырға, ҡайһы берәүҙәренең оҙон, ергә тейеп торған ҡойроғон тубығы кимәленән ҡалдырып киҫергә лә онотмағыҙ.

Малды тәүге аҙна-ун көндә иртән бесән һәм ашлы һыу менән туҡландырып көтөүгә ҡыуығыҙ. Аҫ мал өлгөрөп етмәгән йәшел үләндә артыҡ ашап, эсе күбеп ауырыуы ла ихтимал. Башта малды оҙаҡ көтмәскә һәм алыҫҡа ҡыуырға ярамай.

Көтөүлектә малдың ятып ял итер урынын алдан тикшереп сығырға кәрәк. Ҡояшлы ваҡытта уларға ағастар ышыҡ булһын. Һыу эсереү урыны ла көтөүлектән әллә ни алыҫ булмаҫҡа тейеш.

Эҫе көндәрҙә малды көтөүгә иртә таңдан ҡыуырға һәм төштән һуң кискә тиклем көтөргә кәрәк. Малды өс-дүрт тапҡыр һыу эсереү файҙалы.

Малдың ял иткән урыны әҙ генә ауышыраҡ булһа, таҙалыҡты һаҡларға бик уңайлы. Ә инде көтөүгә өйрәнеп бөтмәгән, тәүге тапҡыр быҙаулаған тананды ике-өс көнгә һуңлап ҡыуһаң да яҡшы, сөнки баштағы мәлдәрҙә малдар һөҙөшә, йүгерә һәм башҡа төрлө хәүеф-хәрәкәт яһай.

Мал үҙенә кәрәкле үләнде эҙләп, көтөүлектә генә тороп ҡалмай, ары китә һәм иген сәсеүлектәрен дә тапап, күп зыян килтерә. Ҡайһы берәүҙәр малын көтөүгә ҡыумай - ирекка ебәрә. Был игенлеккә тағы ла ныҡыраҡ зарар итә.

Үрҙә яҙғандарыма өҫтәп, түбәндәгеләрҙе еткерәм. Әгәр мал сәсеүлеккә тапап, игенгә төшһә, уның хужаһына штраф һалына. Бынан тыш, бикләп ҡуйылған малды ике-өс көн эйәһе килеп алмаһа, уларҙы ит комбинатына оҙатырға ла күп һорамаҫтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, әгәр хужа малын ауыл советына иҫәпкә ҡуймаған булһа, юғалған йәки зыян күргән осраҡта, уны бер кем дә эҙләмәйәсәк һәм яуап бирмәйәсәк.

Малдарығыҙ һәр саҡ туҡ булһын, күп һөт һәм артым бирһен, юғалмай көҙгә тиклем йөрөһөн!

# ҠАҘ ҮҪТЕРЕҮ СЕРҘӘРЕ

**Әгәр ҙә һеҙ ҡаҙ аҫрарға уйлаһағыҙ, тәүге йылдарҙа 3-5 ҡаҙҙан башлағыҙ. Аҙаҡ үрсетеп, 10-15 инә ҡаҙға еткерергә була. Ике-өс инә ҡаҙға бер ата ҡаҙ тәҡдим итеlә. Уларға ҡышҡылыҡҡа ҡоро, ел үтә өрмәгән ҡура һәм ҡалын һалам түшәк булырға тейеш.**

Инә ҡаҙ йомортҡа һалыуын туҡтата икән, тимәк, ул себештәр сығарырға әҙерләнә башланы, тигән һүҙ. Баҫтырырға ултыртҡанда һәр инә ҡаҙға 11-13 йомортҡа һалына. Баҫырға ултырыу мәле апрель айына тура килә. Инә ҡаҙҙы ярым ҡараңғы, таҙа, еҫһеҙ, тыныс кәртә мөйөшөнә йәиһә бүлмәгә урынлаштырырға кәрәк. Йылылыҡ яҡынса 12 градус булырға тейеш. Ғәҙәттә, ҡаҙ йомортҡа һалған ояһына ғына ултыра, шуны иҫтә тотоғоҙ.

Себештәр 27-28-се көндә сыға башлай. Әгәр себештең башы сығып, ике тәүлек сыға алмай интекһә, уға ярҙам күрһәтеү талап ителә. Уларҙы ҡоро дебет шәлгә урап, тартма йә ҡатырға йәшниккә урынлаштырырға. Себештәр тулыһынса сығып бөткәс, әсәһенең ҡанат аҫтына һалырға (төнгөлөккә ҡушыу яҡшыраҡ). Себештәргә тәүге өс көндә ваҡ итеп туралған тауыҡ йомортҡаһы, һөт эремсегенә ҡушып буталған тары ярмаһы бирергә. Бер ай тулғансы көнөнә 4-5 тапҡыр ашатыу мөһим. Был осорҙа бәпкәләрҙе төрләндереп, еңел аҙыҡтар менән туҡландырырға. Бөрттерелгән ярмалар, бойҙай кәрпәһенә ҡушып ваҡланған кесерткән, юл япрағы, ҡуҙғалаҡ бутап ашатыу бик тә файҙалы. Мөмкинлектәре булғандарға бешкән картуф, сөгөлдөр, кишер ашатыу ҙа әһәмиәтле. Ә инде таҙа һыу, аҡ балсыҡ, ҡом, ваҡ күмер һәр ваҡыт уларҙың алдында булһын. Бер айҙан һуң бөртөклө ашлыҡ бирә башларға була. Йәй көнө һыу һәм йәшел үлән даими булһа, ем дә әҙерәк китә. Ҡаҙ үҫтереү өсөн йылға-күлдең булыуы мотлаҡ түгел, асыҡ кәртәлә йә ишек алдында ла ҡаҙ үҫтереп була. Ҡаҙ ашамлыҡ һайланыусан, һиҙгер ҡош. Әҙ генә күгәргән булһа ла еҫле ашамлыҡтан баш тарта. Октябрь-ноябрь айҙарында ҡаҙҙарҙы һимертеү өсөн ашатыуҙы яҡшыртырға кәрәк. Төнгөлөккә лә ҡоро ем ҡалдырыу мөһим. Шуны ла иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ҡаҙ иртә таңдан ашарға ярата.

# БРОЙЛЕР ҮҪТЕРЕҮ

**Уңған хәстәрле хужабикәләрҙең тәҙрә төптәрендә борос, помидор үҫентеләре шаулап ултыра, йорт янында "сип-сип" тигән тауыштар ишетелә. Ошо себештәр, атап әйткәндә, бройлерҙарҙы юғалтыуһыҙ үҫтереү өсөн бер нисә кәңәш биреп үтергә теләйем, һүҙ бройлер себештәрен һатып алыу, урын әҙерләп ашатып үҫтереү тураһында булыр.**

Күп кенә шәхси хужалыҡтар бройлер себештәрен беренсе 5-10 көндә ҡарауы ауыр, тап ошо осорҙа юғалтыуҙар күберәк була, тип зарлана. Ғәҙәттә, бройлер себештәренең бер көнлөгән һатып алалар. Әммә 10 көнлөгән алһаң, тағы ла яҡшыраҡ, сөнки юғалтыуҙар әҙерәк буласаҡ. Бройлерҙы ҡайҙан һатып алыу мөһим. Урам буйында һатып йөрөгәндәрҙән алһаң (әгәр ҙә белгән кешең булмаһа), себештәрҙең ҡасан сыҡҡан ваҡыты ла билдәле булмай, юлда улар йонсоп, асығып бөтөүҙәре, ваҡытында тейешле аҙыҡ алып өлгөрмәгән булыуҙары мөмкин. Себештең ҡанатын асып ҡарағыҙ: әгәр ҙә ҡанатта мамыҡ йөндәре юҡ икән, себеш 10-18 сәғәтлек кенә, ә бына бумалаға оҡшаған мамыҡ булһа, бер тәүлектән ашыу ғүмер йәшәгән. Тимәк, юлда күп йөрөгән, тейешле тәүге аҙығын ашай алмаған. Себештең тәне 6 сәғәттә кибә, ә 18-24 сәғәттән ул инде сепелдәп ашарға эҙләй башлай. Әҙ хәрәкәт итеүсе, ҡорһаҡ өлөшө ҡаты булған, ҡанаттары төшкәндәр оҙаҡ йәшәмәйәсәк. Шулай уҡ кендеге ҡанаған, күҙендә нуры булмаған, башы, сүкышы һәм аяғы имгәнгәндәр ҙә үҫтереүгә бармай.

Себеш алыр алдынан мөһим эштәрҙең береһе - уларға урын әҙерләү. Ҡайҙа ғына булмаһын, урыны таҙа, йылы, һауа температураһы 30-32 градус йылы булырға тейеш. Ике-өс тиҫтә себеш өсөн 100-150 Вт-лы лампаның йылыһы етә. Ә йәҙ һәм унан күберәк бройлер тотһаң, белгестәр кәңәше буйынса айырым йылытҡыс яһарға кәрәк. Йылылыҡ мөһим, ләкин артыҡ йылыла бройлерҙар йонсой, хәрәкәт итеүҙәре тотҡарлана, үҙҙәрен хәлһеҙ тота. Төрлө яҡҡа тарала, тын алыуы ауырлаша, күп һыу эсә башлайҙар. Әгәр һалҡын булһа, тәүҙә һыҡ итеп сепелдәйҙәр ҙә, һуңынан өйөлөшөләр һәм бер-береһен тапалап үлтереүҙәре лә ихтимал. Шулай уҡ дымлылыҡҡа ла иғтибар итергә кәрәк. Яҡтылыҡ уларға 10-12 сәғәт булырға тейеш. Яҡтыртыу өсөн ябай лампочкалар ҡулланыла. Бройлер себештәре бейек оса алмай, төнәкте 20-40 см бейеклектә ҡуйығыҙ.

"Тәүҙә йомортҡа ашатһам, һуңынан икмәкте һыуҙа ебетһәм дә бара ул", - тип ҡарай ҡайһы берәүҙәр. Был, әлбиттә, хата фекер. Бройлерҙарҙы һау-сәләмәт үҫтереү өсөн дөрөҫ ашатығыҙ. Беренсе көндәрҙә аҙыҡтың составы һәм сифатына бигерәк һиҙгер булалар. Ун көнгә тиклем бешкән йомортҡа һәм ярма бирәләр, һуңынан ашатыуҙы 5-7 тапҡырға еткереп, туҡлыҡлы ҡатнаш аҙыҡ өҫтәй башлағыҙ. "Бройлер" һәм "Солнышко" кеүек витаминлы минераль өҫтәмәләр ҡулланығыҙ. Аш һеңдереүҙе яҡшыртыу өсөн ваҡланған йомортҡа, эзбиз ташын һалығыҙ, һыу һәр ваҡыт таҙа булһын.

Бройлерҙар, башҡа себештәргә ҡарағанда, төрлө ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсән. Рахит, быуындар йыуанайыуы, дистрофия, аяҡтар кәкрәйеүе, төрлө минераль һәм витаминдарҙың етешмәүенән интегәләр. Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарын иҫкәртеү өсөн иртән ашатҡандан һуң һыуға 0,1 процентлы марганцовка иретмәһе өҫтәгеҙ ҙә ярты сәғәттән таҙа һыу ҡойоғоҙ. Тәүге көндәрҙә күҙәнәкле аҙыҡтар индерергә ярамай, көҙән йыйырыуына килтереүе ихтимал. Бройлерҙар үҙҙәрен яҡшы тойһон өсөн уңайлы шарттар булдырырға кәрәк. Ҡыҫып бикләп ҡуйылған себештәр ялан кәртәлә йөрөгәндәргә ҡарағанда ауырыуҙарға тиҙ бирешә. Аҫтарына ҡом, бысҡы онтағы, көл һәм эзбиз ташын (ҡалдығын) һалығыҙ.

**Вәсил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Хәйбулла районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**23-сө идея**
**Тормош дуэле**

Бер нисә быуат элек кешеләр намыҫ мәсьәләләрен дуэлгә сығып хәл иткән. Ә Германия тарихында ирҙең битендәге дуэлдә алған яра йәйә ҡатын-ҡыҙҙарҙа һоҡланыу уятҡан заманалар булған. Ундай ир матур тип иҫәпләнгән. XIX быуаттың бөйөк дәүләт эшмәкәре Бисмарк танылған дуэлянт булған: саҡ ҡына бер ҡаршылыҡ өсөн дә ул дуэлдә алышырға әҙер торған. Шулай бер тапҡыр ул ғалим, профессор Вихровҡа ниндәйҙер һүҙе өсөн бик ныҡ асыулана. Бисмарк, асыуын тыя алмай, профессорҙы дуэлгә саҡыра. Вихров аптырап ҡала, сөнки ғалимдар ҙа дуэлянт була икән тип уйламай. Ләкин Бисмарк уны саҡырғас, профессор баш тарта алмай, ҡорал һайларға ғына ҡала.

Бына билдәләнгән көндөң иртәһе етә, һәм дуэль урынына дуэлянттар, уларҙың секундантлары һәм врач менән ике экипаж килеп туҡтай. Улар ылауҙарынан сығып, дуэль яланы уртаһында осраша.

Бисмарк: "Корал һайлау хоҡуғы һеҙгә бирелгәйне. Нимә һайланығыҙ?" - тип һорай. Профессор Вихров ауыҙ һыуын ҡойҙороплоҡ ике һутлы сосиска сығара ла Бисмаркҡа: "Ғалим булыу сәбәпле, ҡорал итеп ошо сосискаларҙы һайланым", - тип аңлата. Бер сосиска үлемесле микробтар ҡушып яһалған, ә икенсеһе ҡәҙимгә ашай торған була. Профессор Бисмаркка борола ла: "Үҙ ҡоралығыҙҙы һайлағыҙ, бергә ултырып ашайбыҙ", ти. Бисмарк ике сосискаға күҙ һалғас та, уларҙың береһе үлемесле икәнен аңлай һәм йөҙө буҙарып китә. Үҙенең еңелеүен аңлап, ҡырт боролоп, яландан сығып китә. Был турала уйлаһам, мин һәр ваҡыт йылмайып ҡуям. Сосискалар менән дуэль! Асыу, ярһыу менән түгел, ә ғүмер менән үлем араһында һайлауҙы тәҡдим итеп отоу.

Бөгөн көн барышында һине дуэлгә саҡырасаҡтар һәм һин меңләгән тапҡыр дуэлдә алышасаҡһың әле. Бөгөн һинең әллә күпме һайлау варианттары буласаҡ - башҡаларҙың әйткән һүҙҙәренә һәм ҡылған эштәренә нисек яуап бирерһең, ни ҡылырһың. Һәм һинең алдыңда ла ике сосиска ятасаҡ: ағыулы һәм зыянһыҙ. Һинең уйҙарың кире һәм ағыулы, сирҙәр, яңғыҙлыҡ һәм фәкирлек һаҙлығына батырыусы, йәки, киреһенсә, изге һәм ынғай, рухыңды күтәреүсе һәм һине мәңгелек ғүмергә, һөйөүгә, бәхеткә илтеүсе булыуы мөмкин.

Бөгөн нимә эшләргә һәм нимә һөйләргә тигән һайлау алдында торорға тура килгәндә, һәр ваҡыт профессор Вихровты иҫеңә төшөр һәм теге ике сосиска хаҡында уйла. Изгелекте, яҡшылыҡ тураһындағы ғына уйҙарҙы һайла, көнсөллөк, асыу, кире ҡағыу, шикләнеү, ҡурҡыу һәм ғәйеп тағыу яғына әйләнеп тә ҡарама. Күңел асыу, мөхәббәт, тормош һәм бәхет тураһында уйла һәм һөйлә. Шул саҡта һинең бөгөнгө көнөң, бөтә ғүмерең һөйөү, бәхет менән һуғарылыр.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 1 ИЮНЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

#### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 11.45 "Тамыр" представляет... [0+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Тамыр - мир детства". [0+]**
**18.00, 5.00 "Бай баҡса". [12+]**
**19.00 Благотворительный телемарафон, посвященный Международному дню защиты детей.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.00 Спектакль "Счастье". [12+]**
**3.15 Спектакль "Ночной гость". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 2 ИЮНЯ
### ВТОРНИК
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 На ночь глядя. [16+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

#### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 "История башкирского войска". [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 3 ИЮНЯ
### СРЕДА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф "Последний из атлантов". К юбилею Виктора Тихонова. [12+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

#### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**15.45 "АйТекә!" [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 "История башкирского войска". [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Ради добра. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**3.00 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 4 ИЮНЯ
### ЧЕТВЕРГ
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф "Непобедимые русские русалки". К юбилею Татьяны Покровской. [12+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

#### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 "История башкирского войска". [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**23.30 Земляки. [12+]**
**23.45 Спектакль "Убежавшие в счастье". [12+]**
**2.45 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 5 ИЮНЯ
### ПЯТНИЦА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 3.00 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.45 Давай поженимся! [16+]
16.00, 1.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Лучшее. [12+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 "Брат-2". Концерт. К 20-летию фильма. [16+]
4.25 Наедине со всеми. [16+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 3.30 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Дом культуры и смеха. [16+]
23.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
0.10 Х/ф "Красотки". [12+]

#### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Документальный фильм". [6+]**
**10.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Гранд-финал чемпионата Республики Башкортостан по интерактивному футболу.**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Спектакль "Долгое - долгое детство". [12+]**
**3.00 Спектакль "Заноза". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 6 ИЮНЯ
### СУББОТА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф "Алексей Гуськов. Таежный и другие романы". [12+]
10.55 Х/ф "Граница. Таежный роман". К 20-летию фильма. [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Х/ф "Граница. Таежный роман". [12+]
19.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Х/ф "Хэппи-энд". [18+]
2.00 Мужское / Женское. [16+]
3.30 Модный приговор. [6+]
4.15 Наедине со всеми. [16+]

#### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 100ЯНОВ. [12+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Х/ф "Другая семья". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Анютины глазки". [12+]
1.05 Х/ф "Моё любимое чудовище". [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

#### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 5.00 "Аплодисменты". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Земляки. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00, 2.45 Спектакль "Земляки". [12+]**
**2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**

### 7 ИЮНЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.20, 6.10 Т/с "Любовь по приказу". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.20, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.10 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.25 Д/ф "Сергей Бодров. "В чем сила, брат?" К 20-летию "Брата-2". [12+]
16.30 Х/ф "Брат". [16+]
18.30 Х/ф "Брат-2". [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Д/ф Премьера. "Алексей Балабанов. Найти своих и успокоиться". [16+]
1.10 Мужское / Женское. [16+]
2.40 Модный приговор. [6+]
3.25 Наедине со всеми. [16+]

#### РОССИЯ 1
4.30, 1.30 Х/ф "Чего хотят мужчины". [12+]
6.10, 3.15 Х/ф "Судьба Марии". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 100ЯНОВ. [12+]
12.20 Х/ф "Куда уходят дожди". [12+]
16.10 Х/ф "Месть как лекарство". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

#### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә.Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00, 3.30 "Творчество - синоним счастья". [12+]**
**19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.15 Итоги недели (на рус. яз.).**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Спектакль "Скупой". [12+]**
**2.30 "Млечный путь". [12+]**

ҺОРАУ - ЯУАП

**Рәсәй Президенты коронавирус таралыуы һөҙөмтәһендә көтөлмәгән хәлдә ҡалған барлыҡ 3 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләр өсөн ай һайын өҫтәмә түләүҙәр биреү һәм 3 йәштән 16 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған ярҙам тураһында хәбәр итеү менән йәмғиәттә уны нисек алыу буйынса һорауҙар тыуҙы, йә булмаһа, "Госуслуги" хеҙмәте аша ғариза биреү аңлашылмаусылыҡтар һәм ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына Башҡортостан Республикаһы буйынса Рәсәй Пенсия фонды бүлексәһенең аңлатмаһын тәҡдим итәбеҙ, ул, моғайын, барлыҡ һорауҙарға яуап бирер.**

# АҠСАЛАР...

## балаларға тәғәйенләнгән



**➔ Айына 5 мең өҫтәмә түләүҙәр ниндәй ғаиләләргә бирелә?**

- Өс йәшкә тиклем балалары булған барлыҡ, хатта Әсәлек капиталына хоҡуғы булмаһа ла, Рәсәй гражданлығына эйә һәм илдә йәшәгән ғаиләләр өҫтәмә түләүҙәр алырға хоҡуҡлы. Хатта элек ҡайҙалыр икенсе илдә йәшәп, һуңынан Рәсәйгә ҡайтҡандар, әле йәшәгән урындарын раҫлаған осраҡта, түләү алырға мөмкин. Бының өсөн балаға 2020 йылдың 30 июненә тиклем өс йәш тулмаған булырға тейеш. Әгәр ғаиләлә өс йәшкә тиклем бер бала булһа, айына - 5, ике бала булһа, 10 мең һум бирелә. Түләүҙәр апрель-июнь өсөн федераль бюджет иҫәбенә башҡарыла һәм ғаилә килеменә ҡарамай. Әгәр ғаиләлә 3 йәшкә тиклемге ике бала булһа, айырым ғариза яҙыу кәрәкмәй, ике бала күрһәтелгән бер ғариза ла етә.

**➔ Бала июнь һуңында тыуырға тейеш. Мин өҫтәмә түләү алырға дәғүә итә аламмы?**

- Эйе, ҡануниәткә ярашлы, 1 июлгә тиклем тыуған барлыҡ балалар өсөн дә түләү ҡаралған. Әгәр бала 1 июлдә тыуһа, Әсәлек капиталы була, ә айлыҡ өҫтәмә түләүҙәр булмай.

**➔ Балама майҙа өс йәш тула. Түләүҙәрҙе ике айға аламмы, әллә апрель өсөн генәме?**

- Был осраҡта айлыҡ түләүҙәргә ике: өс йәш тулғанға тиклемге һәм ошо йәшкә еткән ай индерелә.

**➔ 3 йәштән 16 йәшкә тиклемге һәр балаға 10 мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған ярҙамды ниндәй ғаиләләр алырға хоҡуҡлы?**

- 11 майҙан 30 июнгә тиклем арала 3 һәм 16 йәштәре тулған балалары булған барлыҡ, хатта Әсәлек капиталына хоҡуғы булмаһа ла, Рәсәй гражданлығы булған һәм илдә йәшәгән ғаиләләр хоҡуҡлы. Хатта элек ҡайҙалыр икенсе илдә йәшәп, һуңынан Рәсәйгә ҡайтып, әле йәшәгән урынын раҫлаусылар ҙа түләү алырға мөмкин. Бының өсөн балаға 2020 йылдың 30 июненә тиклем өс йәш тулмаған булырға тейеш. Әгәр ғаиләлә шундай бер бала булһа -10, ике бала булһа - 20, өс бала булһа 30 мең һум бирелә. Түләүҙәр федераль бюджет иҫәбенә башҡарыла һәм ғаилә килеменә ҡарамай. Ғаиләлә 3 йәштән 16 йәшкә тиклем нисә бала булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың һәр береһе өсөн айырым ғариза яҙыу кәрәкмәй, барыһы ла күрһәтелгән бер ғариза ла етә. Түләүҙәрҙе алыу өсөн 1 июндән 1 октябргә тиклем мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**➔ 16 йәше тулған балаларға түләү буламы?**

- Әгәр балаға 16 йәш 11 майға тиклем тулһа (РФ Президентының 11 майҙа ҡул ҡуйған 317-се Указы), түләү бирелмәй. 11 майҙан 30 июнгә тиклем (30 июнь инә) 16 йәше тулыусыларға бирелә, сөнки бер тапҡыр түләүҙәргә хоҡуҡ 1 июлдән генә көсөнә инә.

**➔ Түләүҙәрҙе алыу өсөн нисек ғариза бирергә?**

- Ағымдағы йылдың 1 октябренә тиклем "Госуслуги" порталындағы шәхси кабинетығыҙҙа (gosuslugi.ru), шулай уҡ Пенсия фондының рәсми сайтында (es.pfrf.ru) ғариза бирергә кәрәк. Ғаризала ғариза биреүсенең СНИЛС номеры, банк иҫәбе номеры (банк картаһы түгел!) күрһәтелергә тейеш. Башҡа документтар кәрәкмәй. Кәрәк булғанда, Пенсия фонды үҙе барлыҡ мәғлүмәттәрҙе һорап ала.

Ғаризаларҙы шулай уҡ Пенсия фондының территориаль органдарына (йәшәгән урын, килгән урын, теркәлгән урын) һәм МФЦ-ға бирергә мөмкин. Әммә хәҙерге эпидемиологик хәл арҡаһында Пенсия фондына мөрәжәғәт итеү өсөн алдан яҙылырға кәрәк. Ғаризаны хатта граждандың вәкиле лә бирергә мөмкин. 30 июндән һуң яҙылған ғаризалар буйынса дөйөм сумма күсерелә.

**➔ Опекундар ғариза яҙа аламы?**

- Эйе. Бының өсөн Пенсия фондының территориаль органына йәки МФЦ-ға шәхсән ғариза яҙырға кәрәк.

**➔ Ата-әсәнең кеме ғариза яҙа ала?**

- Әсәлек капиталына сертификаты булғанда, сертификат эйәһе. Әсәлек капиталына хоҡуҡ булмағанда, баланың тыуыу тураһында таныҡлығында яҙылған ата-әсәнең икеһенең береһе ғариза яҙа ала. Әгәр икеһе лә яҙған осраҡта, кем беренсе ғариза биргән, түләү шуға күсерелә.

**➔ Әгәр балаға апрель-июнь айҙары арауығында өс йәш тулһа, айлыҡ түләүҙәрҙе лә, бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙе лә алырға мөмкинме?**

- Эйе, мөмкин. Әгәр балаға 3 йәш апрелдә тулһа, ғаилә апрель өсөн - 5, шулай уҡ 1 июндән һуң 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған пособие алырға хоҡуҡлы.

Әгәр балаға өс йәш майҙа тулһа, ғаилә апрель-май өсөн 5-әр мең һум, шулай уҡ 1 июндән һуң 10 мең һум ала.

Әгәр балаға өс йәш июндә тулһа, өс айға түләүҙәр 15 мең һум һәм 1 июндән һуң бер тапҡыр бирелгән 10 мең һум буласаҡ.

**➔ Түләүҙәр тәғәйенләнгәнме, юҡмы икәнлеген нисек белергә була?**

- Ғариза Пенсия фондының сайтында йәки "Госуслуги" порталындағы шәхси кабинет аша бирелһә, ғаризаны ҡарау статусы шунда уҡ күренәсәк. Белдереү автоматик рәүештә килһен өсөн белдереүҙәргә яҙылыуҙы көйләргә онотмағыҙ. Бының өсөн шәхси кабинетҡа инеп, "Ҡулланыусы профиле"н табырға һәм "Һораған хеҙмәттәрҙең үтәлеше барышы тураһында белдереү алырға теләйем" юлына билдә ҡуйырға кәрәк.

Әгәр ғариза Пенсия фондының клиент хеҙмәтендә шәхсән бирелһә, мәсьәлә ыңғай хәл ителгәндә, средстволар ҡануниәттә ҡаралған ваҡытта граждандың өҫтәмә иҫәпкә ҡуйылыуы кәрәклеге көсөнә инә. Телге булғандар ғариза биргән бүлексәгә шылтыратып та белешә ала.

Ғариза кире ҡағылған осраҡта (ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгәндә йәки был хоҡуҡ сикләнгәндә, бала үлгәндә, дөрөҫ булмаған мәғлүмәт биргәндә) гражданға ҡарар ҡабул ителгәндең икенсе көнөнә хат ебәреләсәк.

**Башҡортостан Республикаһы буйынса РФ Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (9) дүшәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 2 (10) шишәмбе | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 3 (11) шаршамбы | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (12) кесе йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 5 (13) йома | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |
| 6 (14) шәмбе | 3:14 | 4:45 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 7 (15) йәкшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...



# ТӘМӘКЕСЕ ТӘҮБӘҺЕ

**Тәмәке тартыу, был алама ғәҙәттән ҡотолоу хаҡында матбуғат биттәрендә күп уҡыйбыҙ. Тик уларҙың ҡайһы берҙәре икенсе баҫмаларҙан күсереп алынған мәғлүмәттән тора. Ә бына ошо ҙур бәләнән ҡотолғандар фекерҙәре менән уртаҡлашып бармай.**

Мин үҙем дә бала саҡта ауыл малайҙары менән һарай арттарында, быуа буйында ҡыҙыныпъ ятҡанда "быҫҡытып" маташтым. Беҙ, фронтовик улдары быуыны, атайҙарҙың "махра"һын бер аҙ йәшереп алып, серек таҡталарҙы бысып өҫтәп, көйрәтә торғайныҡ. Ғәмһеҙ бала саҡ үтеп, егет ҡорона ингәс, 17 йәш тулған көндә, магазиндан "Прибой" папиросы һатып алып, ысын тәмәкесе кеүек тартып алдым да киттем. Армияға тиклем сит өлкәлә эшләргә тура килде, унда ҡатын-ҡыҙ ҙа күпләп көйрәтә торғайны. Мин фильтрлы "Opal", "Pogonu" тәмәкеләрен генә тарта(ҡ)с, бөртөкләп һорауслар күп ине. Бөтәһенә лә еткереп булмаҫын аңлап, икенсе кеҫәгә арзанлы "Прима" сигаретын һалып ала торғайным. Әрме сафында ла ошоға оҡшаған хәлдәр осрап торҙо. Беҙҙең майор сығышы менән Күгәрсен районынан ине. Сыуаш милләтле яҡташым башҡорт телен һыу кеүек эсә торғайны. Быны белгән бер һалдат, командир алдында үҙен күрһәтәм типтер, һеҙҙенсә "Здравия желаю!" нисек була, тип һорап ҡуйҙы. Офицерҙы күргәс, хеҙмәттәшем уға, мин өйрәткәнсә, "Аҡса бир әле" тип әйтеп ташламаһынмы! Майор ҙа аптырап ҡалманы, кеҫәһенән өс һум сығарып, һәйбәт тәмәке гена ал, тип аҡса һондо. Фильтрлы тәмәкеләрҙе бөтә ротаға бүлешеп тарттыҡ. Һуңынан, башҡорт һәйбәт тәмәке тарттырҙы, тип бик оҙаҡ һөйләп йөрөнөләр.

Мин армиянан ҡайтҡанда урамда ныҡ һыуыҡ ине. Тышҡа сығып тартһаң, өшөтә, өйҙә, мейес алдында көйрәтергә атай-әсәйҙән оялдыра. Шулайтып, тәмәке тартыуҙы ташларға тура килде. Шулай, 1989-1991 йылдарҙа мин эшләгән химия заводына Ҡытайҙан ҡара сигареттар килтерҙеләр. Тәүҙә күпләп тараттылар, һуңынан берәр данаға күстеләр. Үҙемә бирелгән тәмәкеләрҙе кемгә бирәйем инде, тип, йөрөнөм дә, тартып ҡына ҡарайым, тип ҡабыҙҙым бит тегене. Икенсе көнөнә түҙеп булмай, тартҡы килә. Был алама ғәҙәттән ҡотолоу өсөн аҙна-ун көн ваҡыт уҙҙы. Был юлы ысын тартып ташлағандан да ҡыйын булды. Көндөҙ ҙә, төндә лә иҫтән китмәй тик тора. Организм никотин тәмен онотмай, икенсе юлы ташлауы беренсеһенән күпкә ҡыйыныраҡ, тигән раҫлау менән тулыһынса килешәм.

Тәмәке тартмауыма ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт уҙһа ла, организм уның тәмен иҫләй. Ваҡытында мин тартҡан "Прибой", "Беломор-канал" папиростарын, "Прима", "ТУ-34", "Opal", "Pogonu" һәм башҡа сигареттарҙы мин күрмәгәндә тоҡандырып бирһәләр, бер-ике һурыуҙа, төмәнә ҡарап, тәмәкенең маркаһын әйтеп бирә алам. Ағыулы организм дүрт тиҫтә йыл үтһә лә онотмай, көтә. Аҙ ғына тартып ҡарайым да ташлайым, тигәндәргә әйтер һүҙем: бер өйрәнгән яман ғәҙәтте, теләһәк тә, теләмәһәк тә, ташлап булмай, ул хәтерҙә барыбер һаҡлана. Мин айсбергтың өсөн өлөшөн генә яҙҙым, уның организмға күрһәткән яман яғы - айырым тема.

**Әмир ХӘЛИТОВ.**

ХӘТЕРКИТАП

# ШАҒИР БУЛЫП КИТМӘГӘН,

## шағир булып тыуған ул



**Өфө-Сибай поезында халыҡ мыжғып торған туҡһанынсы йылда, Өфөгә абитуриент булырға китеп барған саҡта танышҡайныҡ беҙ Дамир Шәрәфетдинов менән. Әле уның шағир икәнен дә, абруйлы "Йәшлек" гәзитенең яуаплы сәркәтибе икәнен дә белмәгән саҡта, шығырым тулы поездың дөйөм вагонында бер һәндерәгә тура килдек. Беҙ өс йәш ҡыҙ, ул яңғыҙы. Шунда уҡ танышып-һөйләшеп киттек. Ҡаланы белгән кеше булараҡ, ул беҙгә БДУ тәңгәлендә ниндәй ашханаларҙа ашарға һәм ниндәй магазиндарҙан талонға аҙыҡ-түлек алырға икәнде аңлатты. Ә беҙ ул һөйләгән арала уның тәҡдим иткән прәниктәрен ҡоролай ашап та бөттөк. Унан ярты төнгәсә сәй эстек. Ул беҙҙә нимәләрҙер һөйләп сәсәгәнсе көлдөрҙө. Аҙаҡ беҙгә урынын биреп, вагондың сумаҙан ҡуя торған өсөнсө кәштәһенә менеп ятты...**

Тағы ла бер-нисә йылдан һуң Дамир Шәрәфетдинов менән "Йәшлек" гәзитендә бергә эшләргә тура килде. 1995 йыл, мин декретҡа сығырға йөрөйөм. Бер коллега апайыбыҙ миңә һыуыткыс тәҡдим итә: "Күршеләрем һата, ал, яңыларына яҡын барырлыҡ түгел, һәп-һәйбәт. Һиңә хәҙер бөпәй менән һыуытҡысһыҙ булмай", - ти. Ә минең эш хаҡым һыуытҡыс алырлыҡ түгел. Шул ваҡыт Дамир килеп инде кабинетҡа. Кәйефе бик шәп, отпускыға китеп бара. Апай мине һаман өгөтләй, булғанда алып ҡалайыҡ, ти. Мин "аҡсам етмәй" тием. Дамир беҙҙең һөйләшеүҙе тыңлап торҙо ла, кеҫәһенән йомарлам аҡсаһын килтереп сығарып, алдыбыҙға һалды. Унан вайымһыҙ ғына: "Бына, отпуск аҡсаһы алдым, хәҙер егеттәр белеп ҡалһа, барыбер байрам итергә китеп бөтә. Мә, лутсы файҙаға булһын", - тине. Беҙ аптырашып ҡалдыҡ, ә Дамир эре генә сығып та китте. Бергә эшләгән апай әҙ: "Дөрөҫ әйтә ул, эскелеккә ебәргәнсе, әйҙә..."- тине һәм беҙ теге һыуытҡысты барып та алдыҡ.

Бына шундай кеше ине инде ул Дамир. Аҡса, мал тип иҫе китмәгән, донъялыҡтың матди берәмектәренә бәйләнмәгән, урман-тау кешеләренсә һауалыраҡ, ғорур, тура һүҙле һәм фекерле. Эйе, уның һәр нәмәгә үҙ фекере һәм ҡарашы бар ине. Һәм фекерен әйтеү өсөн дә һүҙ һорап торманы. Оҡшаймы-оҡшамаймы, килешәме-юҡмы - ярҙы ла һалды. Ярамһаҡлана, ялағайлана, ҡуштанлана белмәне. Ошо сифаттары уны ҡырыҫ итеп күрһәтте лә.

Дамир минең иждадыма иғтибарлы булды, Сабир Шәрипов ағай кеүек, ул да әйҙәләп, ҡыуалап, илһамландырып торҙо. Берәй яңы хикәйәмде күрһә, "Әйҙә, "Ағиҙелгә" ҡуйыйыҡ" тип әләктереп алды. Дамирҙың һуңғы эше лә, моғайын, минең повесты тәржемә итеү булғандыр. "Енеүҙән һуң" әҫәрен алғайны тәржемәгә, тамамлап биреп өлгөрҙө... Мин уның шулай теләктәш һәм рухташ була белгәне, ҡатын-ҡыҙ ижадсы булараҡ ошондай терәккә мохтаж икәнемде аңлауына рәхмәтлемен...

Быйыл Дамирҙың юбилейы алдынан уның ҡатыны Римма Манир ҡыҙы һәм ағаһы Вәкил Мөлкаман улы менән аралаштым, уларҙан Дамирҙың беҙгә билдәле булмаған яғы - эске донъяһы хаҡында һораштым. Сөнки был ғорур һәм ҡырыҫ кеше бер ваҡытта ла үҙен алға ҡуймай һәм иғтибарҙы үҙенә йүнәлтмәй ине. Шунлыҡтан, беҙ уны "сәнскеле" Дамир итеп кенә белдек.

- Ишле ғаиләлә үҫкәнгәме, талымһыҙ булды. Әҙәбиәттә тәнҡитсе ролендә йөрөп, ҡаты һүҙле булып күренһә лә, өйҙә аш-һыуға ла, башҡа донъяуи мәсьәләләргә лә ҡаныҡманы. Үҙе тота ла бешерә ине. Ваҡ-төйәккә иғтибар итмәне, көнкүреш кимәленән юғары булды, - тип һөйләй уның хаҡында ҡатыны Римма апай. - Алдай белмәне, тураһын әйтә лә ҡуя торғайны. Бер өйрәнгән кейемен ҡәҙерләп, ятатып кейҙе. Кешеләргә лә шундай мөнәсәбәттә булды. Яҡын күргәндәренә үтә лә тоғро булды һәм күп осраҡта шуларҙан уҡ хыянат кисерҙе...

Үлеп ҡызын яратты. Бөпәй тыуғанда оҙайлы ваҡыт дауаханала яттыҡ. Дамир нимәләр бешереп, көн дә килә ине. Балалар баҡсаһында йөрөгәнендә лә тотош төркөмгә уйынсыҡтар яһаны, төҙәтепйүнәтеп биреү, ярҙам итеү кеүек эштәрҙә беренсе йөрөнө. Байрамдарға кейемде лә бәләкәсенә үҙе яһаны. Балаһының тормошона мөмкин тиклем инергә, булдыра алған тиклем ҡушылырға теләне. Күңеле изге һәм нескә ине уның. Үтә нескә ине. Ул шуны нык йәшерҙе. Кешеләргә ярҙам итә, ниндәйҙер изгелек эшләй ҙә, шуны әйтмәй, хатта минән дә йома. Аҙаҡ ҡына кем ашалып ишетеп йәки белеп ҡалам. Әле үҙе мәрхүм булғас та күптәр унан ниндәй ярҙам алғандары, яҡшылыҡ күргәндәре хаҡында шылтыратып әйтте...

Вәкил Мөлкаман улы шағирҙың өлкән ағаһы. Ул әйткәнсә һәм үҙем белеүенсә лә, ҙур ғаиләләрҙә оло балалар үҫеп сығып китеп бөтә лә, бәләкәстәре икенсе төркөм булып, хатта икенсе ғаилә һымаҡыраҡ йәшәй. Уларҙа ла шулай була. Дамир, Юлай һәм Нәзир исемле малайҙар кәүҙәгә лә бер тигеҙ булып тистер үҫә. Уларҙың серҙәре лә берегә, уйындарыуҡыуҙары ла, ҡыҙыҡһыныуҙары ла үҙҙәренсә була. Быларҙы Дамир "Көн башы һукмаҡтары" тигән китабында мажаралы балалыҡ донъяһы итеп яҙып сыҡты. Ә Вәкил ағай иһә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Атайыбыҙ 1947 йылда фронттан ҡайтып өйләнгән дә, бер-бер артлы 12 балаға ғүмер биргән. Дамир унынсы бала. Атай-әсәйҙең икеһенең дә тулы булмаған башланғыс белем генә, ярай әле, атай һуғышта йөрөп килгән, ә әсәйебеҙ ауылдан ары ер китмәгән, руссаһы ла икмәк-тоҙлоҡ ҡына. Һәм шул кешеләр уҡырға ярата ине! Бөтөн башҡорт баҫмаларын алдырҙылар. Кистәрен кәрәсин лампаһы яҡтыһы аҫтында бөтә ғаилә бер өҫтәл артына йыйылып ултырып алып уҡыйбыҙ. Бер журналды ике яҡ битен ике бала уҡыр өсөн нисек кенә ҡыйшаймайбыҙ.

Дамирҙың һәм башҡаларҙың да тип уйлайым, холҡо китаптар аша тәрбиәләнде. Шунлыҡтан, ул уйнағанда ла һәр ваҡыт мәрхәмәтле, интеллектуаль уйындар уйлап сығарҙы. Ҡыйырһытыу, илатыу, кәмһетеү кеүек нәмәләр уға ят ине. Һүрәт төшөрөү оҫтаһы булды инде. Ул 10 класты тамамлағанда мин ауыл хужалығы институтының лабораторияһында эшләй инем. Минең өгөтләүгә бирелеп килде лә инде ул ауыл хужалығы институтына. Уның шағир икәнен мин дә, ул үҙе лә белмәгәнбеҙ, күрәһең. Аҙаҡ, уның шағирлығы асылғас, әсәйебеҙ: "Нишләп уға шағир булырға? Шағирҙар бит ҡыҫҡа ғүмерле..." - тип уфтанып ҡуйҙы.

Ижад ҡомары, ижади шауҡым яҙыусы-шағирҙарҙы, рәссам-артистарҙы бик соҡорло-саҡырлы, бер сиктән икенсеһенә ташлана торған тынғыһыҙ йәшәйештә тотҡанын беләм. Был уларҙың һәләттәре өсөн түләүҙер ҙә, бәлки. Тап ана шул шиғри йәшәйешендә ул туғандарынан да алыҫайып китте. Сөнки беҙ, яҡындары, уның ҡайһы бер яман ғәҙәттәрен генә күрҙек, шелтәләнек, тыйҙыҡ. Ә табындаштары, киреһенсә, ҡоторттo. Шешәләштәрҙең ысын тормошта терәктаяныс түгеллеген аңлай алманы ул баштa. Аҙаҡ төшөндө лә... һуң да булды.

Беҙ Дамир ҡустыбыҙҙы шағир итеп беләбеҙ һәм шулай хәтерләйәсәкбеҙ ҙә. Уның барлыҡ булмышын, уй-хыялдарын һәм хеҙмәтен шул шиғриәт ялмап алған, ул шул шиғриәттән бар булып, шул шиғриәт ҡосағына киткән икән, был уның мәйеле - беҙ ҙә хөрмәт итәйек...

...Вәкил ағайҙың һөйләгәндәрен тәрәнерәк тойоу, Дамирҙың әле әсе теле, ҡырыҫлығы булмаған сағы менән танышыу өсөн "Көн башы һукмаҡтары" китабын яңынан уҡып сыҡтым. Ысын мәғәнәһендәге тәбиғәт балаһын таптым унда. Һәм шул малайҙың шағир булып китеүенә аптырамаңым да. Ул шағир булып китмәгән, ә шағир булып тыуған булған икән. Шағир ғына түгел, шәп журналист та, фекерле тәнҡитсе лә, уңышлы прозаик та, тәржемәсе лә ине ул. Ғүмере генә ҡыҫҡа булды... Әсәһе дөрөҫ һиҙенгән...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САБЫР ЭШЕН БӨТӨРӨР,

## ҡауҙыр үҙен бөтөрөр

Ырҙында илле кешегә эш табыла, тиле кешегә генә эш табылмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хаталанмаған кешеләр бар ул, сөнки улар өсөн башҡалар уйлай.

**(Хенрик Ягодзиньский).**

Ябай кешеләр һәр ваҡыт ғилемлеләрҙән тегe йәки был мәсьәлә буйынса кәңәш һорай, әммә уның кәңәште тотмай.

**(Хуго Штейнхаус).**

Үҙһүҙлелек - көсһеҙҙәрҙең берҙәнбер көсө һәм тағы бер көсһеҙлеге.

**(Артур Шницлер).**

Уға һайларға ҡуштылар: байлыҡмы, аҡылмы? Аҡыллы кеше булараҡ, ул байлыҡты һайланы.

**(Мечислав Шарган).**

Ғаилә - ул суд ултырышы һәм был ултырыштағы фекер алышыуҙар төндә лә тынмай.

**(Малькольм де Шазаль).**

Кеше күп уйланып тормай шул: ҡабалан ғына уҡый, ашығып ҡына хөкөм итә һәм йөрөй торғас шымарып бөткән фекерҙе ҡабул итә.

**(Вольтер).**

Кешеләр сәғәт механизмы кеүек: көйләп ебәрһәң, ниңә икәнен дә белмәстән, алға китә бирә.

**(А. Шопенгауэр).**

Булдыра алғанса алға барығыҙ, аяғығыҙ ауырта икән, юл ситенә сығып, китеп барғандарҙы көнләшмәй генә күҙәтегеҙ - улар ҙа алыҫ китә алмаясаҡ бит.

**(И. Тургенев).**

Ҡартлыҡтың трагедияһы бит ҡартайыуҙа түгел, ә йөрәктең йәш ҡалыуында.

**(О. Уайльд).**

Кеше ғүмере үткәнде тикшереүҙәр, хәҙергегә зарланыуҙар, киләсәктән ҡурҡыу менән үтә.

**(А. Ривароль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Инглиз короле пленға төшкән һалдаттан һорай икән:**

**- Шулай итеп, һин аҡса өсөн һуғыштың инде, ә?**

**- Эйе, - ти һалдат,- аҡса өсөн һуғышырға ялландым, ә һеҙ ни өсөн һуғыштығыҙ һуң?**

**- Үҙ намыҫымды яҡлау өсөн, - ти икән король.**

**- Шулай инде, - ти һалдат, - һәр кем үҙенә нимә етмәй, шуны ҡайғырта..."**


1 582218 91006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 417/05